ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

22-28 июль (майай)

2023

№28 (1070)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Һалым ҡайтармалары




5

Кинйә рухы йәшәй һаман да...




6

Яҙмышына ла, остаздарына ла...

рәхмәтле булып йәшәй ул



8-9

Үткән дәүерҙәрҙә...

башҡорт өйө



13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*Иғтибар! Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ, әйләнә-тирәгеҙҙә гәзитебеҙгә яҙылып өлгөрмәй ҡалғандар булһа, әйтегеҙ: улар 15 августа тиклем яҙылып, сентябрҙән алдыра башлай ала - 4 айға яҙылыу хаҡы 532 һум 40 тин. Шулай уҡ ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2024 йылдың тәүге яртыһына ваҡытынан алда 771 һум 12 тингә яҙылырға мөмкин.*

*Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!*

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

### ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Быйыл баҡса хәлдәре нисек, тәүге уңыштар ҡыуандырамы? Баҡсасыларҙың тәжрибәһе лә ҡыҙыҡлы булыр ине...

***Ринат МИҺРАНОВ, Рәсәй Баҡсасылар берлегенең Башҡортостан бүлексәһе рәйесе:*** Һуңғы рәсми мәғлүмәттәр буйынса, Башҡортостанда 1,5 мең баҡсасылыҡ ширҡәте иҫәпләнһә лә, ысынында улар 2,5 меңгә барып етә. Ике төрлө һандың сәбәбе шунда: ширҡәттәрҙең 1,5 меңе генә юридик шәхес булараҡ теркәлгән һәм улар һалым түләйҙәр. Ҡайһы бер баҡса коллективтары яҡындағы ауыл, ҡасаба менән берләшеп киткән, шунлыҡтан баҡсаларын теркәтһәләр ҙә, ширҡәт иҫәбенә инмәйҙәр, шул уҡ ваҡытта улар урындағы муниципалитетҡа ҡайһы бер коммуналь хеҙмәттәр өсөн, мәҫәлән, сүп-сар сығарған өсөн түләүҙән баш тарталар. Ә ширҡәттә ағза булып тороу отошлораҡ: беренсенән, баҡса ере һатып алыу арзанға төшә, унан ширҡәттә шәхси торлаҡ төҙөлөшө өсөн алынған ергә ҡарағанда һалым кәмерәк түләнә; өсөнсөнән, баҡса йорто итеп теркәлһә лә, бында ла хәҙер йыл әйләнәһенә даими йәшәргә була һәм был йортта рәсми теркәлергә мөмкин, тик быны өсөн баҡсаның ниндәйҙер торлаҡ пункты биләмәһендә булыуы шарт.

Баҡсасылыҡ Рәсәйгә генә хас үҙенсәлекле күренеш, башҡа илдәрҙә ундай нәмә юҡ. Бына бит беҙҙә баҡсасыларға бағышланған махсус көн дә бар хатта (23 июль). Электән беҙҙә бындай ярҙамсы хужалыҡтарҙың төп маҡсаты ғаиләләр өсөн экологик таҙа өҫтәмә аҙыҡ-түлек мәсьәләһен хәл итеү юлы булһа, әлеге көндә лә ул көнүҙәк, айырыуса күп балалы ғаиләләр һәм пенсионерҙар өсөн магазиндарҙа хаҡтар артҡан мәлдәрҙә ҙур файҙа.

Үҙ ихтыяжынан артҡан баҡса емештәрен һатыу өсөн Өфөлә һәм республиканың башҡа ҡалаларында махсус урындар бүлеп ҡуйыу бик уңайлы тәжрибә булды. Әле ҡарай йөрөйөм: был сауҙа рәттәренең буш торғаны юҡ, тик быйыл баҡса еләге һатыусылар әҙ булды. Шулай уҡ ҡарағат, сейә, крыжовник кеүек емеш һатыусылар ҙа һирәгерәк. Был быйылғы һауа торошо "боларыуҙары" менән аңлатылһа, уның ҡарауы, бер ниндәй шарттарға ла бирешеп бармаусы һарымһаҡ, йәшел һуған, укроп, петрушка кеүек йәшеллек һәм ябыҡ парниктарҙа үҫтерелгән ҡыяр, помидорҙар күпләп күренә башланы.

### ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ЯБАЙЛАШТЫРАЛАР

Дәүләт Думаһына Әсәлек капиталы аҡсаһына алынған фатирҙарҙы һатыуҙы ябайлаштырыу тураһында закон проекты индерелде. Был хаҡта Дәүләт Думаһы сайтында хәбәр ителә. Хәҙер бындай фатирҙарҙы һатыуы ауыр, сөнки Әсәлек капиталын ипотеканы түләүгә тотонған милексе тәүҙә ипотека кредитын ҡапларға һәм ғаилә ағзаларына өлөш бүлергә тейеш. Бынан тыш, балаларҙың өлөшө булған фатирҙы опека органдары рөхсәте менән генә һатырға мөмкин, был килешеүҙе күпкә ҡатмарлаштыра. Шуға күптәр бындай торлаҡ һатып алыуҙан баш тарта.Тәҡдим ителгән закон проекты өлөш бүлеү тураһында йөкләмәне яңы һатып алынған торлаҡҡа күсерергә мөмкинлек бирә. Шул рәүешле балиғ булмағандарҙың, үҫмерҙәрҙең хоҡуҡтары сикләнмәй, ә граждандар бер фатирҙы икенсеһенә алмаштырыу һәм торлаҡ шарттарын яҡшыртыу мөмкинлегенә эйә була.

## ӨС БАЛАЛЫЛАР...

Ил хөкүмәте күп балалы ғаиләләр өсөн ипотека кредиттары буйынса түләүҙәрҙе компенсациялауға өҫтәмә рәүештә 15 миллиард һум йүнәлтте. Был 2019 йылдың 1 ғинуарынан һуң өсөнсө йәки артабанғы балалары тыуған ғаиләләр өсөн ипотека кредиттары буйынса йөкләмәләрҙе үтәүҙе гарантиялай. Күп балалы ғаиләләр торлаҡ һатып алыу йәки төҙөү, шулай уҡ шәхси төҙөлөш өсөн ер участкаһы һатып алғандағы бурысты тулыһынса йәки өлөшләтә ҡаплауға 450 мең һум аҡса алырға мөмкин. Хәҙер 33 меңдән ашыу балалы ғаилә торлаҡ шарттарын яҡшырта ала. 2023 йылда федераль бюджетта банктарға аҡсаны ҡайтарыу өсөн 60 миллиард һумдан ашыу сумма ҡаралған, уларҙың күп өлөшө күсерелгән. Республиканың ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова әйтеүенсә, ярҙам күрһәтеү тураһында ҡарар ҡабул иткәндә өлкән балаларҙың йәше иҫәпкә алынмай. Ғаиләләр 450 мең һум аҡса алыу өсөн ғариза һәм документтар менән банкка мөрәжәғәт итергә йәки Дәүләт хеҙмәттәре порталындағы форманы тултырырға тейеш. Аҡсаны ҡулға бирмәйҙәр - сумманы ипотека биргән банкка күсерәләр.

### АФАРИН!

## САЛАУАТ ЕРЕНДӘ...

### "Салауат ере" паркы

**Салауат районындағы "Янғантау" геопаркы биләмәһендә "Салауат ере" тарихи-мемориаль комплексы төҙөлә. Ул Тәкәй ауылы янында 4,5 гектар самаһы майҙанды биләй.**

Проект Мостай Кәримдең "Салауат. Өн аралаш ете төш" әҫәренә нигеҙләнеп әҙерләнгән. Унда юлдар, күҙәтеү майҙансыҡтары, беседкалар, эскәмйәләр, яҡтыртыу, тамашасылар өсөн амфитеатр, Салауат Юлаев исеме менән бәйле тематик зоналар бар. Объекттың хаҡы 128 миллион һумға баһалана. Төп объекттарҙы йыл аҙағына тиклем тамамлау планлаштырыла. Төҙөкләндереү, кәртәләү, электр уты менән тәьмин итеү эштәре 2024 йылдың яҙында башҡарыла. Йәйгә яңы парк ҡунаҡтарҙы ҡабул итә ала. "Подряд ойошмаһы урында әҙерлек эштәренә тотондо", - тип хәбәр итте "Янғантау" геопаркы директоры Айрат Ғәлиев.



12+

✓ ***Ялды туристар һиңә кире әйләнеп ҡайтырлыҡ итеп ойошторорға кәрәк. Үткәргән экскурсияларың ҡыҙыҡлы булһын, гидтарың матур итеп барыһын да һөйләһен, ашнаҡсыларың тәмле бешерһен.***



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ТУРИЗМ ОЙОШТОРАҺЫҢ ИКӘН...

***Минзиә ХАТИПОВА, Бөрйән районындағы "Башҡорт иле" туристик база етәксеһе:*** Бынан 10-15 йыл тирәһе элек Һамар өлкәһенән килеп, шул ҡәҙәре хозур тәбиғәтле Бөрйән ерен күреп, башта уйымда ла булмаған эште башлап ебәрҙем. Ул саҡта әле Башҡортостанда туризм өлкәһендә эшләүселәр әллә ни юҡ ине. Ситтән килеүсе кемдәрҙер Ағиҙел буйлап һалда ағып төшөүҙе ойоштора ине ойоштороуға.

Бөгөн республикала туризмды үҫтереүгә иғтибар артыуы тураһында күп һөйләйҙәр. Әммә туристик база төҙөп, даими һәм сифатлы эшләр өсөн ойоштороусының байтаҡ аҡсаһы булыуы шарт. Грант алыу һәм уның буйынса отчет биреп бөтөүе лә бик ҡатмарлы. Шуға ла яңы эш башларға торған кеше барыһын да алдан планлаштырып тотонорға тейеш. Быны ниҙән сығып әйтәм: Бөрйәндә хәҙер бөтәһе лә катамарандар алып, кешеләрҙе йылға буйлап йөрөтөргә тотондо. Катамаран алып, ҡуртымға биреп ятыу ҙа артыҡ килем килтермәй. Ялды туристар һиңә кире әйләнеп ҡайтырлыҡ итеп ойошторорға кәрәк. Үткәргән экскурсияларың ҡыҙыҡлы булһын, гидтарың матур итеп барыһын да һөйләһен, ашнаҡсыларың тәмле бешерһен. Һәр хеҙмәткәр яуаплылыҡ тойһон. Мин эшмәкәрлегемде нәҡ шуға ҡорам, бер килгән кешеләр киренән ялға килә, таныштарын да ебәрә.

Урындағы халыҡҡа ла файҙа килтерһен ине ул республикалағы туризм. Ауыл кешеһенең кафе, кибет төҙөргә хәленән килмәй, теләге булғанда ла мөмкинлеге юҡ уның күп осраҡта. Бына Шүлгәнташ мәмерйәһе эргәһендәге тирә-яҡ ауыл кешеләре элек шунда сығып, һатыу итештерә ине. Музей төҙөлгәс, будкалар урынлаштырҙылар ҙа, уларҙы ҡуртымға алып эшләргә тәҡдим иттеләр. Былтыр шул будкалар буш торҙо, ҡуртым хаҡы күтәрмәҫлек һәм уңайлыҡтары ла юҡ. Эҫе көндә һөт ризыҡтарын һатыу өсөн һыуытҡыслы бәләкәй генә баҙар төҙөп ҡуйырға кәрәк ине ул. Нәҡ "Шүлгәнташ" музейы эргәһендә тимәйем, юл ыңғайында булһын һәм ул ябыҡ баҙарҙа бөтә уңайлыҡтар эшләнһен, урындағы халыҡ шунда һөтөн-ҡаймағын, ҡымыҙын, балын сығарып һата алһын, ҡуртым хаҡы ҡиммәт булмаһын һәм бер мөйөшөндә милли ризыҡтар менән һыйланырлыҡ самауырлы өҫтәле лә ҡуйылһын, ҡатын-ҡыҙҙар милли кейемдә хеҙмәтләндерһен. Был сифатлы кафеларға ҡытлыҡ мәсьәләһен дә бер аҙ хәл итер ине, бәлки.

Ысынында, Бөрйәндә тамаҡ ялғау мәсьәләһе ҡатмарлы. Ғәҙәттә, ялға кешеләр шәмбе-йәкшәмбе көндәре килә һәм ҡайҙа инеп тамаҡ туйҙырырға белмәй йөрөй. Сөнки ял көндәрендә ашханалар ябыҡ була. Күп магазиндар эшләмәй. Туристар килгән көндә ял итмәй торорға булмаймы? Кибетме, ашханамы тотаһың икән, туристар килгән көндә ял итмә. Үҙебеҙ әүҙем, булдыҡлы, эшһөйәр булып, милли туризмды үҙебеҙ үҫтерәйек, милләттәштәр, тип әйтке килгәйне.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

АФАРИН!

# "ҺӘР ЭШТӘ ҺҮҘЛЕК МӨҺИМ".

**Башҡорт теле активисы күләмле лексик проект өҫтөндә эште тамамланы, йәғни башҡорт теленең һанлы лексик кодификацияһы тамамланды тип иҫәпләргә мөмкин. Был хаҡта "Башинформ" агентлығына башҡорт теле әүҙемсеһе, Glosbe платформаһы нигеҙендә русса-башҡортса онлайн-һүҙлек төҙөүсе Искәндәр Шакиров хәбәр итте.**

2019 йылдың мартында "Башинформ" Glosbe-һүҙлектең башҡорт бүлегенең тулыландырылыуы, уҡыусылар өсөн күләмле (211 меңдән ашыу һүҙ) электрон һүҙлектәрҙең берәһенә әүерелеүе хаҡында хәбәр иткәйне. Хәҙер русса-башҡортса электрон һүҙлектә 390 мең һүҙ һәм фраза, 750 мең параллель һөйләм өлгөләре бар. Әйткәндәй, һүҙлек авторы параллель текстар өсөн "Башинформ" мәғлүмәт агентлығының рус һәм башҡорт телдәрендәге хәбәрҙәрен әүҙем ҡулланған.

Һүҙлек менән glosbe.com сайтында, шулай уҡ Android һәм iOS операцион системаларында эшләгән мобиль ҡоролмалар өсөн махсус ҡушымта ярҙамында файҙаланырға була. Активист әйтеүенсә, ул онлайнға башҡорт теленең төп һүҙҙәрен һәм тәржемәһен индергән, һәм быны һүҙлектең сайты аша тикшерергә саҡыра. "Хәҙер инде һүҙлектең тулы булыуын ышаныс менән әйтергә мөмкин, - ти автор. - Башҡортсанан йәки башҡортсаға бер ниндәй ҙә ауырлыҡһыҙ тәржемә итергә була. Шулай итеп, башҡорт теле тормошонда яңы яҡты бит асыла тип ышанам". Искәндәр Шакиров әйтеүенсә, был проект өҫтөндә ул алты йыл эшләгән, һүҙлекте 2017 йылдың көҙөндә төҙөй башлаған. Ул төрлө йылдарҙа нәшер ителгән 200-гә яҡын башҡорт теленең һүҙлеген табып, һанлаштырған.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

## *Быйыл баҡса хәлдәре нисек, тәүге уңыштар ҡыуандырамы? Баҡсасыларҙың тәжрибәһе лә ҡыҙыҡлы булыр ине...*

***Гөлнара ИСМӘҒИЛЕВА, биолог, һәүәҫкәр баҡсасы, Нуриман районы Нимесләр ауылы:*** Мин үҙем БДУ-ның биология факультетын тамамлағандан һуң ғүмер буйы тыуған ауылымда биология уҡытыусыһы булып эшләнем, әле хаҡлы ялдамын. Баҡсасылыҡ һәм үҫемлекселеккә ҡыҙыҡһыныу һәм шул йүнәлештә һөнәр һайлау нәҫелдән бирелгәндер, тип уйлайым. Ҡасандыр ошо ерҙе төйәк иткән өләсәйҙәребеҙ күп итеп баҡса үҫтергәнен, күнегелгән ташҡабаҡ ҡына түгел, көньяҡ емеше булған ҡарбуз менән ҡауынға тиклем ултыртып, мул уңыш алғандарын хәтерләйем. Унан һуң атайым, РСФСР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы, биолог, ике тапҡыр Бөтөн Союз Ауыл хужалығы күргәҙмәһе миҙалы менән наградланған, исеме Республика йәш натуралистар станцияһының Почетлы кенәгәһенә индерелгән Әмир Салих улының да йоғонтоһо көслө булғандыр.

Һәр хәлдә, 20 йылдан ашыу баҡсасылыҡ менән шөғөлләнәм, үҙебеҙҙең шәхси хужалыҡ биләмәһендә еләк үҫтерәм. Ҡыҙыҡһынған, уңыш үҫтерергә теләгән кешеләр менән уртаҡлашыр бай тәжрибә тупланым. Ғүмер юлдашым йыш ҡына "Гөлнара ергә сыбыҡ ҡаҙап ҡуйһа ла, япраҡ ярып, үҫеп китер",- тип шаяртырға ятатһа ла, уның һүҙҙәрендә дөрөҫлөк бар, тик уның бер ниндәй ҙә сере юҡ: таң менән иртәрәк торорға, һуңыраҡ ятырға тура килә. Ғөмүмән, баҡсасылыҡта нимәгәләр өлгәшеү өсөн, уйынлы-ысынлы әйткәндә, был өлкәлә "ҡол булыу" кәрәк. Шуныһы ла бар: мин ун өсөнсө быуынға тиклем шәжәрәмде беләм. Нәҫелебеҙҙә халыҡ дауалау сараларын, шифалы үлән төрҙәрен яҡшы белгән һәм доғалар уҡып, сирлеләрҙе аяҡҡа баҫтырған имселәр булған. Дингә фанаттарса бирелмәһәм дә, ҡанымда үҫемлектәр менән илаһи бәйләнеш тоям.

Ә шулай ҙа тырышлыҡ һалмайынса ғына уңыш үҫтереп булмай. Беҙҙең климатҡа сыҙам татлы емешле еләктәр араһынан "Красавица", "Загорье" тигән сорттарҙы үҙ еремә ҡулайлаштырҙым, сөнки уңыш алыуҙа сорттар һайлай белеү ҙә хәл иткес әһәмиәткә эйә. Еләк үҫентеләре айырыуса тәрбиә ярата: түтәлдәрҙе ашлама, дымға туйындырыу мотлаҡ.

**Ашлама тигәндән, әрем, кесерткән, сөйәл, гәрсис үләндәрен мискәгә тығыҙлап тултырып, өҫтөнә һыу ҡойоп, быҡтырам. Аҙна эсендә әҙер булған ошо ашламаны еләктәргә йышыраҡ һибеп тороу кәрәк. Кесерткән тупраҡты азотҡа байыҡтыра, ә әрем ҡоротҡостарҙан яҡшы сара. Был төнәтмә менән картуф һабаҡтарын эшкәртеү уларҙы колорадо ҡуңыҙынан да һаҡлай.**

Соҡор эсенә ошо үләндәрҙе тултырып, компост, йәғни органик ашлама (бер ҡат үлән + бер ҡат тупраҡты алмашлап һалып) әҙерләп алырға ла мөмкин. Көҙ йә яҙҙан гәрсисте рәт араларына сәсеп сығығыҙ, япраҡланғас, тәпке менән тураҡлап, уны тупраҡҡа бутайһың. Бик файҙалы ашлама, ә улар - аяҡ аҫтында. Мейескә яҡһағыҙ, аҙаҡ көлөн ҡырып алығыҙ, уны еләк төптәренә һалып сыҡһаң, шау сәскәгә күмелер. Яңы ултыртылған еләктәр тәүге йылы ғына уңыш бирмәүен дә иҫәпкә алығыҙ. Был осорҙа улар ултыртылған ерҙең ниндәй кимәлдәрәк ятыуын самалағыҙ. Әгәр еләк ултыртылған ер түбәнерәк урында икән, түтәлдәрҙе бер аҙ күтәртергә тура килер; бейегерәк урында булһа, уны ҡыуан елдәрҙән һаҡлау өсөн тирә-яғына кукуруз йәки көнбағыштар ултыртып, тәбиғи ышыҡ булдырығыҙ. Һәм, әлбиттә, еләк дым һәм ҡояшлы урын ярата, был уларҙың уңдырышлылығы өсөн төп шарт.

Уңыш быйыл объектив сәбәптәр арҡаһында былтырғыға ҡарағанда кәмерәк булды, сөнки апрелдә ҡар иртә ирене, тупраҡта дым етешмәне. Артабан культуралар сәскә атҡан осорҙа көндәр һыуытып ебәрҙе, ҡырау төштө. Әйткәндәй, уңыш өсөн был наҙлы культураларға дым менән яҡтылыҡ ҡына етмәй, йылы көндәр ҙә кәрәк. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, йыл һайын муң уңыш алабыҙ. Ҡайнатып та, ҡайнатмайынса ла шәкәргә бутап, джем, ҡайнатма, ҡаҡ әҙерләйем, күп итеп туңдырғыста һаҡлайым. Уңдырышлы һәм тәмле сорттарҙың үҫентеләрен почта аша ла ебәрә алам (телефон һандарым - редакцияла).

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Дәүләт Думаһы депутаттары аҙаҡҡы уҡыуҙа кешеләрҙе хужаһыҙ хайуандар һөжүменән яҡлауға йүнәлтелгән закон ҡабул итте. Билдәле булыуынса, хәҙер эттәрҙе махсус урындарҙа ғына йөрөтөргә рөхсәт ителә. Уларҙы муниципалитеттар билдәләргә тейеш. Шул уҡ ваҡытта Дәүләт Думаһына яңы закон тексына берәҙәк хайуандарҙы эвтаназиялау тураһында положение индерергә тәҡдим ителде. Профилле комитет был башланғысты кире ҡағырға кәңәш итте. Шуға күрә федераль законда бындай формулировка юҡ.

✓Яҙғы саҡырылыш барышында Башҡортостандан 5,5 меңдән ашыу егет Рәсәйҙең ҡораллы көстәре сафын тулыландырҙы, тип хәбәр иттеләр республика хәрби комиссариатының матбуғат хеҙмәтенән. Белдереүҙәренсә, егеттәр илдең төрлө төбәктәренә хеҙмәт итергә оҙатылды, ә биш яҡташыбыҙ ғилми роталарға юлланды. Егеттәрҙең күпселеге 4-5 айға уҡыу үҙәктәренә ебәрелгән.

✓Рус география йәмғиәтенең Башҡортостан бүлексәһе Рус георгафия йәмғиәтенең Ҙур көмөш миҙалына лайыҡ булды, миҙалды Евразия күсмә цивилизациялар музейына тапшырабыҙ, тип өҫтәне Радий Хәбиров. 2014 йылда булдырылған награда Рус география йәмғиәте проекттарын уңышлы тормошҡа ашырған, экспедициялар, тикшеренеүҙәр һәм сәйәхәттәр ойоштороуҙағы эшмәкәрлек, география фәндәре өлкәһендәге ҡаҙаныштар өсөн бирелә.

✓Башҡортостан Хөкүмәтенең 2023 йылдың 12 июлендәге ҡарарына ярашлы республикала ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар менән эш итеү буйынса төбәк операторҙары менән килешеү төҙөү тәртибенә үҙгәрештәр индерелде. Яңы редакцияла төбәк операторы менән килешеүҙе тарҡатыу өсөн нигеҙ тураһында асыҡ әйтелгән. Юридик шәхес төбәк операторы статусынан мәхрүм ителгән осраҡта, вәкәләтле орган килешеүҙе өҙөргә мөмкин. Шулай уҡ яңы төбәк операторын конкурсһыҙ һайлап алып, уның менән 1 йылға килешеү төҙөү хоҡуғы нығытыла.

✓Учалы районында янғындан һуң өс ғаилә торлаҡһыҙ ҡалған. 13 июлдә көндөҙ Октябрьский ауылында хужалыҡ ҡаралтылары янып киткән. Ике йорт (уларҙың береһе ике хужаныҡы), 4 мунса, 4 һарай, 2 гараж, келәт, утынлыҡ, күгәрсен кетәге һәм аласыҡ янып бөткән. Бер сәғәттән янғын һүндерелгән. Ҡорбандар юҡ. Урында Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының тәүтикшереүсеһе эшләй, янғын сәбәбе асыҡлана.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Быйыл баҡса хәлдәре нисек, тәүге уңыштар ҡыуандырамы? Баҡсасыларҙың тәжрибәһе лә ҡыҙыҡлы булыр ине...

*Рәсүл МИҢЛЕҒОЛОВ, һәүәскәр баҡсасы, пенсионер, Өфө аэропорты янындағы "Авиатор" баҡсасылыҡ ширҡәте:* Нимә генә тимә, нисек кенә тырышма, ә уңыш йылы менән килә инде ул. Әле яңыраҡ ҡына социаль селтәрҙә Силәбелә яуған боҙло ямғырҙың өлгөрөп кенә килгән баҡса уңышын ҡыра һуҡҡанын видеоға төшөрөп һалғандар, ҡарауы ҡыҙғаныс кадрҙар: сейәһен йыйып өлгөрмәгәндәрме, әллә бешеп етмәгән булғанмы - ҡып-ҡыҙыл булып ерҙә түшәлеп ята, алмалар ҙа һыпырылып ҡойолған, ҡарағат ҡыуаҡтары ла япраҡтарына тиклем өҙгөсләнеп, яланғасланып ҡалған... Һуған, помидор, сөгөлдөр һәм башҡа йәшелсәләрҙе лә боҙ һуҡҡан, эшкинерлек түгелдәр. Ҡалай йәл.

Беҙҙә, Аллаға шөкөр әле, улайға барып етмәнен инде. Хәҙер бөтөн емеш-еләк өлгөрҙө, имен йыйып алырға, файҙаһын күрергә яҙһын, тип теләйбеҙ. Шулай ҙа баҡсасылыҡ шөғөлөнә күңелен биреп, һауа торошонан әҙерҙә көтөп ултырыуҙы өнәмәгән ҡаратырыштар теләһә ниндәй шарттарҙа ла уңышҡа өмөт итә ала. Мин үҙемде лә, ҡатынымды ла ошо төркөм баҡсасылар рәтенә индерәм. Әлдә шулай тап килгәнбеҙ, тип ҡыуанып бөтә алмайым: икебеҙ бар төпкә егелеп тартабыҙ баҡсаны. Шул арҡала үҙебеҙҙе генә түгел, бала тотмаған улыбыҙ менән ҡыҙыбыҙ ғаиләһен дә ҡышҡа етерлек йәшелсә-емеш менән тәьмин итеп торабыҙ, шөкөр. Бер тигәс тә, ике ейән менән бер ейәнсәребеҙ йәй буйына беҙҙең менән ошонда йәшәй, хеҙмәткә өйрәнә, сынаға, үҫеп килеүсе организмдарын тәбиғи витаминдар менән байыта.

Быйылғы уңышҡа килгәндә, миҙгел башланып киткәс тә иң тәүләп беҙҙе еләк уңыштары һөйөндөрҙө. Быны был культура һыуыҡҡа ла, боҙ ямғырға ла, ҡырауға ла бирешмәй, исмаһам, тик нығ тәрбиә ярата. Уның ҡарауы, ҡурай еләгебеҙ уңманы, элек агроном булып эшләгән күршебеҙ әйтеүенсә, бер урында 15-20 йыл үҫеп ултыра алһа ла, емеш биреү ваҡыты 12-15 йыл менән сикләнә икән. Аҙаҡ еләк ҡыуаҡтары күршеләргә "ҡаса" һәм уңыш бирмәй башлаһа, яңы урынға яңы үҫентеләр ултыртырға кәрәк. Уларҙы сәскә атмаҫ борон ҡоротҡостарға ҡаршы эшкәртергә, эсе көндәрҙә күп итеп төбөнә һыу ҡойоп торорға кәрәк. Ситкә таралып үҫмәһен өсөн эргә-тирәһенән һарымһаҡ рәте ултыртып сығырға.

Һауа торошоноң көйһөҙләгән күҙҙә тотоп, беҙ ҡыяр менән помидорҙы асыҡ һауала ғына түгел, парникта ла үҫтерәбеҙ. Исмаһам, ҡайғы белмәйһең. Ҙур уңыш алыр өсөн ҙур майҙан кәрәкмәй, йәшелсә һәм картуфтың уңдырышлы сорттарын һайлап ултыртырға кәрәк. Алдан тупраҡҡа 1 кв.метрына 1-2 биҙрә иҫәбенән тәбиғи ашлама (ҡый үләндәре серетмәһе, ат, һыйыр, тауыҡ ти-ҙәге, тиреҫ, торф) индереп ҡалыу мотлаҡ, химик ашламалар менән артыҡ мауығыу кәрәкмәй. Ҡыярҙарға көнө буйы ҙур һауытта йылынып торған һыуҙы һәм киске сәғәттәрҙә һибергә кәрәклеген һәр баҡсасы ла яҡшы беләләр. Ҡыяр орлоғонoң ҡатнаш сорттарҙан сығарылғанын күрһәтеүсе F1 төрҙәрен һайлайым, улар сиргә, ҡоротҡостарға бирешеп бармай һәм иң мөһиме, мул уңыш бирә.

Картуфтың да әрһеҙ, сыҙам, уңдырышлы сорттарын һайлап ултыртам. Быйыл беҙҙә картуфтың, әбейем мәрәкәләүенсә, "интернациональ" сорттары татыу ғына һыйышып үҫеп ултыра: һары картуф ("Нежный" сорт, ҡыҙылы - "Аленький цветочек" һәм шәмәхә төҫләһе - "Черный граф").

**Колорадо ҡуңыҙынан эшкәртәбеҙ, тип, кеше хәҙер рәхәткә сыҡты: картуф баҡсаһына тотош ағыу һиптерәләр. Ағыуҙың тышына тирә-йүндәгеләр өсөн зыянһыҙ, тип яҙылһа ла, мин уға ышанмайым: нисек инде бер ниндәй көрәш сараһына бирешмәүсән ҡортторҙы тәгәрәтеп төшөрһөн дә, зыянлы булмаһын, имеш. Ағыу һиптереп, дөрөҫ эшләмәй баҡсасылар. Бер тигәс тә, бал ҡорттары, ҡырмыҫҡалар, тупраҡты йомшартыусы сөләү кеүек файҙалы ҡорт-бөжәктәр ҡырыла. Икенсенән, ағыу ямғыр һыуы менән картуф бүлбеләренә һеңә. Иң һәйбәте - ҙур булмаған картуф ерендә ҡорттарҙы ҡул менән йыйып яндырыу. Яңынан сыҡҡандарын көн дә сүпләп тороу. Ҡортҡа һиптереү өсөн шундай ысул менән "дарыу" әҙерләгеҙ: төнгөлөккә 10 литр һыуға 100 г аш содаһы иретегеҙ, шуға 1 стакан аш һеркәһе һалып бутағыҙ һәм кисен һиптерегеҙ.**

Ҡояш нығ ҡыҙҙырмаһа, быны көндөҙ ҙә эшләргә була. Тағы бер ысул: картуф рәттәре араларына сей картуфты ҡырҡҡылап йә бүлмаһа, ҡабығын һалып сығығыҙ. Ҡуңыҙҙар яратҡан ризығын һырып алғас, уларҙы йыйып алып, юҡ итергә генә ҡала.

Тағы ла бер кәңәшем бар. Кишерҙең бай витаминдар сығанағы икәнен беләбеҙ, тик бына унан эре һәм һутлы "тамыр" уңышы алыу юлдары ниндәй һуң? Иң беренсе - кишер түтәлен һирәкләп, бер-беренән 7 см самаһы ара ҡалдырығыҙ. Тәүҙә, кишер үҫентеләре биш ҡыяҡланғас - 2 көнгә бер, ә аҙаҡ, үҫенте ҙурайып, нығынғас, аҙнаға бер мул итеп һыу һибегеҙ. Унан һуң кишерҙе лә, картуф кеүек үк, күмеп сығыу кәрәк: тупрағы ла йомшара, тамыраҙыҡтың өҫкө өлөшө ҡояштан йәшәрмәй.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ДОНЪЯ ШАНДАУЫ

# САБЫЙ НИҢӘ БАЙДЕНДАН ҠУРҠТЫ?

**12-13 июлдә халыҡ-ара хәлдәрҙе артабан да ҡатмарлаштырыу һәм ҡоралды ҡотҡолар таратыу йәһәтенән донъяла иң эре һәм ҡеүәтле империалистик альянс булараҡ, НАТО-ның Вильнюстағы сираттағы саммиты аҙнаның иң ҙур ваҡиғаһы булды, тип билдәләне донъя киң мәғлүмәт саралары.**

Блокты артабан ҡоралландырыу, Рәсәй менән Ҡытайға мөнәсәбәт һәм, әлбиттә, шефлыҡҡа (әллә уллыҡҡа?) алынһа ла, блок ағзалығына һаман индерелмәгән Украина мәсьәләһе саммиттың көн тәртибендә төп урында торҙо. Ә был һуңғы мәсьәләгә саммит хатта ки икенсе көнөн тотошлай бағышланы, ләкин, нисек кенә көсәнмәһендәр (ә бәлки, шулай күренергә тырыштыларма), Зеленскийҙы атайҙарса арҡаһынан ҡаҡҡылап, йыуатып, ағзалыҡты тәки бирмәнеләр. Шулай булырын алдан һиҙемләгән Украина етәксеһенең саммитҡа бер ҙә генә аяғы тартмаған, тинеләр, етмәһә, ул ярһыуынан НАТО-ны икеле-микеле вәғәҙәләре өсөн тәнҡитләп тә ташлаған, ләкин баш әйеп шунда кире килергә мәжбүр булған. Ә ҡайҙа барһын ул? Дөрөҫөн генә әйткәндә, ағзалыҡҡа Украинанан "ягымлы" ғына баш тартып, Көнбайыш асылда был илгә һәм бигерәк тә уның лидеры Зеленскийға ысын мөнәсәбәтен, уның урыны әле һаман да "ишек төбөндә" икәнен күрһәтте. Әлбиттә, "ҙур ағайҙар"ҙың ҡарары икенсе төрләрәк тә булыр ине, бәлки, тик Зеленский уларҙы яу ҡырынан бер ниндәй ҙә ҡыуанысл хәбәрҙәр менән һөйөндөрә алмай ине шул. Хәйер, хәлдәрҙең торошон "ҙур ағайҙар" үҙҙәре лә үтәнән-үтә күреп тора бит. НАТО-ның Генераль секретары Столтенберг айырым-асыҡ итеп: "Әгәр Украина еңмәй икән, уның ағзалығы хаҡында һүҙ ҙә алып барылмаясаҡ", - тип әйтеп һалды түгелме? Йыуатып, ҡорал ебәреүҙе дауам итергә вәғәҙәләнеләр, ләкин, әйтеүҙәренсә, Америка былдай ярҙамды былтырғыға ҡарағанда 10 тапҡырға әҙерәк бүлмәксе икән. Дөрөҫ, килем килтермәгән һуғыш бысағымамы һуғыш суҡмарҙарына, уларҙың "икмәге" шул бит, юғиһә. Әле килеп Балтик буйы илдәрен, Польшаны, Финляндияны хәрби көстәре һәм ҡорал менән тултырыуға ғына ла күпме ресурс кәрәк! Был, әлбиттә, Рәсәйгә лә һәр яҡлап аң һәм һиҙгерлек, өҫтәмә көсәргәнеш талап итә.

Шулай итеп, Вильнюс йыйылышы Америкаға Рәсәй менән Ҡытайға ҡаршы артабан ҡаршы тороу йәһәтенән НАТО сафтарын туплау һәм нығытыуға бер ни тиклем мөмкинлек бирҙе. Саммиттың һығымта документтарында Ҡытайға бик ҙур урын бирелгән, ти экспертар. НАТО илдәре Ҡытайҙың ядро арсеналын үҫтереүгә йүнәлеше һәм уның Рәсәй менән мөнәсәбәттәрен нығытыуы айҡанлы хәүефләнеү белдерә. Һөҙөмтәлә НАТО хәҙер Европа көрсөгөн хәл итеп тә тормаҫтан, Азия-Тымыҡ океан кризисы менән ныҡлап ҡыҙыҡһына башланы. Был Азия-Тымыҡ океан төбәктәренән саммитҡа килеп еткән Япония, Көньяҡ Корея, Австралия, Яңы Зеландия ҡунаҡтарынан да күренә ине инде. Былдай йүнәлеш Европаға бөтөнләй ҡулай түгел, әммә Американың үҙ өсөн бик отошло. Икенсенән, Ҡушма Штаттар, һәр ваҡыттағыса, ситтән күҙәтеүсе ролендә финдар, поляктар һәм Балтик буйы республикаларын алғы һыҙыҡҡа теҙеп ҡуйып, Рәсәйгә Балтик буйынан янауҙы көсәйтеү сараһын күрә. Бер һүҙ менән әйткәндә, Америка Ҡушма Штаттары донъя берлегенә планеталағы сәйәси хәл-ваҡиғалар менән үҙе уйлап сығарған ҡағиҙәләр буйынса, үҙе теләгәнсә идара итергә теләүен асыҡ белдерҙе. Өҫтәүенә, АҠШ-тың билдәле дәиләре килеһе һайлауҙа ла деменция менән яфаланыусы бөлтерәгән Байденды президент итеп, донъя лидерлығына өмөт бағлай.

Шулайын шулайҙыр ҙа, тик бына Вильнюста Байденды ҡаршылаусы халыҡ араһындағы бер әсәнең сабыйы нишләптер президентты шундуҡ оҡшатманы. Тәүҙә унан ҡурҡып, иламһыраны, ә Байден ҡарт шулай ҙа хушлашып, уны үберге ынтылғас, башын бороп, әсәһе яурынына һыйынды. Сабый күңеле һиҙгер шул, кемдең кем икәнен әллә ҡайҙан белә...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓2023 йылдың 1 июленән 30 октябренә тиклем "Асыш" йәш әҙиптәр конкурсына ғаризалар ҡабул ителә. Конкурс "Шоңҡар" һәм "Толпар" республика йәштәр журналдары менән берлектә үткәрелә. Конкурсҡа "Проза" һәм "Шиғриәт" номинациялары буйынса 18-40 йәшлек авторҙар саҡырыла. Башҡорт телендәге әҫәрҙәрҙе - Shonkar@yandex.ru, татар телдәгеләрен tulpar.06@mail.ru электрон почтаһына ебәрергә кәрәк. Һәр номинацияла 1-се, 2-се һәм 3-сө урын алған ҡатнашыусыларға еңеүсе дипломдары һәм аҡсалата призлар тапшырыла. Шулай уҡ һәр номинацияла "махсус приз" ҡаралған. Бүләк фонды - 200 мең һум.

✓Башҡортостандың төп йәштәр форумы - Волга буйы федераль округының "Йәштәр йыйыны-2023" IV Йәштәр форумы Бөрйән районында палаткалы лагерь форматында үтәсәк. Үткәреү датаһы: 22 - 25 август. Форум Башҡортостан һәм Волга буйы федераль округы төбәктәре йәштәрен, Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта һәм Ҡаҙанда уҡыған Башҡортостан йәштәрен, шулай уҡ йәштәр сәйәсәте органдары һәм учреждениелары вәкилдәрен берләштерәсәк. 11 августҡа тиклем теркәлергә өлгөрөгөҙ.

✓"Башҡортостан Республикаһында граждандарҙың мөрәжәғәттәре тураһында" "Башҡортостостан Республикаһы Законының 8-се статьяһына үҙгәрештәр индереү тураһында" закон көсөнә инде. Был хаҡта республика Дәүләт Йыйылышының матбуғат хеҙмәтенән билдәле булды. Хәҙер дәүләт власы органдарында, урындағы үҙидара органдарында, республика дәүләт, муниципаль учреждениеларҙа һәм ойошмаларҙа махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙы һәм улаҙың ғаилә ағзаларын тәү сиратта ҡабул итәләр.

✓Рәсәйҙең 19 төбәге, шул иҫәптән Башҡортостан коммуналь инфраструктураны модернизациялауҙың яңы программаһы буйынса аҡса аласаҡ. Был хаҡта Биләмәләрҙе үҫтереү фонды хәбәр итә. 2024 йылдың аҙағына тиклем был төбәктәрҙә 659,1 саҡрым инженер селтәрҙәре яңыртыла, 614,3 мең кеше өсөн коммуналь хеҙмәттәрҙең сифаты күтәрелә. Финанс ярҙамының дөйөм күләме - 12,5 миллиард һум.

ҠЫҪҠАСА

# ЯҢЫРТЫЛА

**Рәсәйҙең Мәғариф министрлығы башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән федераль программаларҙы раҫланы.** Башҡортостандың Мәғариф министрлығы башланғыс дөйөм, төп дөйөм һәм урта дөйөм белем биреүҙең федераль дәүләт белем биреү стандарттарын яңыртыу буйынса әүҙем эшен дауам итә. Мәҫәлән, туған телдәрҙе уҡытыу методикаһын һәм технологияһын камиллаштырыу маҡсатында һәм яңыртылған стандарттарға ярашлы "Туған (башҡорт) теле", "Туған (башҡорт) әҙәбиәте", "Башҡортостан Республикаһының дәүләт (башҡорт) теле" уҡыу предметтары буйынса федераль программалар әҙерләнгән. Ошо көндәрҙә Башҡортостан Республикаһының Мәғариф һәм фән министрлығы ҡарамағындағы уҡыу-методик совет ҡарары менән федераль программаларҙың хупланыуы һәм тейешле кимәлдәге федераль белем биреү программаларына индерелеүе билдәле булды. "Башланғыс дөйөм белем биреү, төп дөйөм белем биреү, урта дөйөм белем биреү федераль программалары Рәсәйҙең Мәғариф министрлығы бойороҡтары менән раҫланды", - тип хәбәр иттеләр ведомствонан.

✓ **Быйыл республикала тағы 55 тренерға 1 миллион һум аҡса түләнә.** Башҡортостандың Спорт министрлығы ойошторолоуға 100 йыл тулыу айҡанлы республикала дәүләт спорт стипендиялары һәм республика спорт премияһы булдырылды Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров социаль селтәрҙә хәбәр итеүенсә, ауыл спортын үҫтереү өсөн 2020 йылда илдә тәүгеләрҙән булып "ауыл тренеры" проекты индерелде. Ул иң яҡшы тәжрибәләрҙең береһенә әүерелде һәм 25-кә яҡын төбәккә таратылды. Проект сиктәрендә 103 тренерға ярҙам күрһәтелде. Быйыл тағы 55 тренер 1-әр миллион һум аҡса алырға тейеш. "Был яҡшы программа, әммә 100 мендән күберәк кеше йәшәгән ҡалаларҙа гәмәлдә түгел. 2022 йылдың декабрендә республика етәксеһе ҡарамағындағы физик культураны һәм спортты үҫтереү мәсьәләләре буйынса совет ултырышында "Ҡала тренеры" проектын индерергә ҡарар ителде. Һәр эштә лә үҙ һөнәренең оҫталары алтынға бәрәбәр", - тип уртаҡлашты Премьер-министр. Билдәләнеүенсә, аҡсаны торлаҡ һатып алыу, торлаҡ төҙөү өсөн ер участкаһы һатып алыу, ипотеканы ҡаплау, йорт төҙөү өсөн тотонорға кәрәк.

✓ **Рәсәйҙә училищеларҙың өлкән курс студенттарына балалар баҡсаларында һәм башланғыс мәктәптә уҡытырға рөхсәт ителде.** Өлкән курс студенттары балалар баҡсаларында һәм башланғыс мәктәптә уҡытыу, шулай уҡ балалар өсөн түңәрәктәр алып барыу хоҡуғына эйә. Дәүләт Думаһы депутаттары өсөнсө уҡыуҙа ҡануниәткә тейешле төҙәтмәләрҙе индерҙе. Шулай уҡ илдең юғары уҡыу йорттарының өлкән курс студенттары университеттарҙа, ғилми ойошмаларҙа уҡытыу-ярҙамсы персонал һәм фәнни хеҙмәтләндереү өлкәһе хеҙмәткәрҙәре вазифаларын биләү мөмкинлеген алды. "Ошо ҡарар мәктәптәрҙә кадрҙарға ҡытлыҡты бөтөрөргә ярҙам итәсәк. Был айырыуса ауыл ерендә мөһим, унда уҡытыусылар етмәй һәм сирләп киткән йәки декрет ялына сыҡҡан уҡытыусыға алмаш табырың тимә. Бынан тыш, дипломын ҡулына алған йәштәрҙең эш тәжрибәһе лә, хеҙмәт кенәгәһе лә буласаҡ", - тип белдерҙе Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# КОРРУПЦИЯҒА ҠАРШЫ...

**Өфөнөң "Торатау" Конгресс-холында Бөтә Рәсәй финанс-иҡтисади органдарҙың коррупцияға ҡаршы форумы булып үтте. Унда федераль һәм төбәк власть органдарының, юғары уҡыу йорттарының 500-ҙән ашыу вәкиле ҡатнашты. Форумда ҡатнашыусылар дәүләт идаралығының сифатын күтәреү, социаль ғәҙеллекте тәьмин итеү, коррупцияға ҡаршы көрәш һәм башҡа мәсьәләләрҙе тикшерҙе.**

"Өфөлә Бөтә Рәсәй коррупцияға ҡаршы форумында ҡатнашыусыларҙы ихлас сәләмләйем. Өфөнө форумды үткәреү урыны итеп һайлағандары өсөн Федераль ҡаҙналыҡ етәкселегенә рәхмәт белдерәм. Был беҙҙең өсөн ҙур яуаплылыҡ һәм оло мәртәбә булып тора. Беҙ һеҙҙең эшегеҙ өсөн тейешле шарттар булдырырға тырышырбыҙ. Сөнки һеҙҙең эшмәкәрлек өлкәһе илебеҙ өсөн мөһим әһәмиәткә эйә. Республикабыҙҙа коррупцияға ҡаршы көрәшкә етди иғтибар бүләбеҙ, сөнки ҡулдарҙа һәм аяҡтарҙа коррупция кеүек "бығау" торһа, республиканың әүҙем үҫешен тәьмин итеү мөмкин түгел. Эш хоҡуҡ һаҡлау органдары менән тығыҙ бәйләнештә ойошторолған. Коррупцияға ҡаршы эшмәкәрлекте координациялау буйынса комиссия һөҙөмтәле эшләй", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

Форумда ҡатнашыусыларҙы сәләмләп, Федераль ҡаҙналыҡ етәксеһе урынбаҫары Александр Михайлик республика етәкселегенә сараны һөҙөмтәле ойошторғаны, ғөмүмән, коррупцияға ҡаршы көрәшкә ҙур өлөш индергәне өсөн рәхмәт әйтте.

# СЕНТЯБРГӘ ӨЛГӨРТӘЛӘР

**Һуңғы ваҡыт Өфөнөң Пугачев урамында төҙөкләндереү эштәре менән бәйле, автомобиль тығындары күҙәтелә. 16 июлдән 27 августа тиклем бында Бельская урамынан Геофизиктар урамына сығыу юлы ла ябылды. Был Кузнецов затоны биҫтәһен һыу менән тәьмин итеүсе һыу үткәргес селтәрҙәрен һәм канализацияны үҙгәртеп ҡороу һәм ҡойма ямғырҙар һыуын ағыҙыусы канализация төҙөүгә бәйле.**

ЮХХДИ менән килешелгәнсә, юл хәрәкәтен ойошторошҙың яңы тәртибе түбәндәгесә: урау юл- Мәғариф урамы - Назар Нәжми бульвары - Бельская урамы- Пугачев урамына сығыу. Ҡала халҡы тағы ла шәхси йорттарға үтеп булмауға зарлана, сөнки уларға үтә торған юлдарҙа блоктар ята. Ҡала властары мәғлүмәттәре буйынса, ошонда йәшәүселәрҙең улар урамынан күпләп машина йөрөй башлауҙы иҫкәртеү маҡсатында үҙ теләктәре менән шулай эшләгәне аңлашылған. Өфө ҡала округы хакимиәтенән белдереүҙәренсә, автомобиль юлдар һәм үткәүелдәр дөйөм файҙаланыу биләмәләре иҫәпләнә, шунлыҡтан юлдарҙы блоктар менән ябыуҙың юридик нигеҙе юҡ. Башинформ хәбәр итеүенсә, Өфөлә дөйөм файҙаланыуҙағы юлдарҙы үҙ белдектәре менән ябыу осраҡтары элек тә булғылаңы, мәҫәлән, Глумилино биҫтәһендәге күп ҡатлы йорттарҙа йәшәүселәргә эргәнән үтеүсе машиналар тауышы ҡамасаулаған. Законға ҡаршы килгәнлектән, был юлдар полиция ярҙамында асылды.

Муниципаль хеҙмәттәр өфөләргә һәм баш ҡала ҡунаҡтарына ваҡытлыса уңайһыҙлыҡтарҙы аңлап ҡабул итеүҙе һорай. Юл эштәре өсөн йәйге айҙарҙың һайланыуы төп эштәрҙе яңы уҡыу йылына тиклем өлгөртөү маҡсатынан сығып эшләнә. Сентябргә тиклем бындағы хәрәкәт элеккесә урау юл - Геофизиктар урамы - Пугачев урамына сығыу юлы тәртибенә ҡайтасаҡ.

# СӘЛӘМӘТ ТӨБӘКТӘ ЙӘШӘЙБЕҘ

**Республика Хөкүмәте ултырышында Башҡортостанда көтөлгән ғүмер оҙайлығын арттырыу буйынса ыңғай йүнәлеш дауам итә.**

"2023 йылдың тәүге биш айында был күрһәткес 73,29 йәш тәшкил итте. Беренсе ярты йыллыҡта үлемдең дөйөм күрһәткесе былтырғы ошо осорға ҡарағанда 8 процентҡа кәмене. Ошо күрһәткес буйынса республика Волга буйы федераль округында икенсе урында килә. Абсолют һандарҙа үлеүселәр һаны 1,5 мең кешегә кәмене",- тип белдерҙе Премьер-министр Андрей Назаров.

Ултырышта билдәләнеүенсә, республикала йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренән алып тын юлдары ауырыуҙарына тиклем бөтөн төр сәбәптәрҙән дә үлем һаны кәмене. Яңы тыуған сабыйҙар үлемен дә кәметеүгә өлгәшелде, унын күрһәткесе яңы тыуған 1000 сабыйға 3,7 бала тура килә. "Әлеге ваҡытта республикала йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре асыҡланған пациенттарға диспансер күҙәтеү алып барыла, - тине БР һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин. - "Сәләмәт республика - сәләмәт төбәк" акцияһын тормошҡа ашырыу бөгөн ҡала һәм ауыл халҡын диспансерлаштырыу мөмкинлеге бирҙе. Бының өсөн "Сәләмәтлек поездары" күсмә медицина диагностикалау комплексы файҙаланыла".

Ултырыш һуңында Андрей Назаров Һаулыҡ һаҡлау министрлығына яман шеш ауырыуҙарын асыҡлау һәм дауалау буйынса эште, шулай уҡ сирҙе иҫкәртеүгә йүнәлтелгән сараларҙы көсәйтергә ҡушты, үлем күрһәткестәре юғары булған муниципалитеттарға айырым иғтибар бүлеү кәрәклеген әйтте.

# САМАҺЫҘЛЫҠҠА СИК БАР

**Рәсәйҙә коллекторҙарға ҡарата яза сараларын ҡәтғиләштереү тураһында закон ҡабул ителде.**

Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин аңлатма биреүенсә, яла яғыу, янауҙар, шантаж, милеккә зыян килтереү һәм көс ҡулланыу осраҡтарында коллекторҙарға 5 млн һум штраф йәки, әгәр енәйәт ойошҡан төркөм тарафынан эшләнһә, 10 йылға иркенән мәхрүм ителеүе ихтимал. "Был сара ауыр тормош хәлендә ҡалған беҙҙең граждандарҙы яҡлаясаҡ. Коллекторҙарҙың самаһыҙ ҡыланыуҙарына сик ҡуйылды", - тине ул. Законға ярашлы, уларға 300 меңгә 500 меңгә тиклем штраф ҡулланыласаҡ йәки улар 5 йылға тиклем мәжбүри эшкә йә булмаһа, ошо уҡ ваҡытҡа иркенән мәхрүм ителәсәк. Енәйәт төркөмөнә ҡараған кешеләрҙең алдан килешелгәнсә, көс ҡулланып, бурыслының милкенә зыян килтергәне йә юҡҡа сығарғаны өсөн, бының кеше ғүмеренә хәүеф тыуҙырмаһа ла, 3 - 7 йылға тиклем иркенән мәхрүм итеү һәм 500 мендән алып 1 миллионға тиклем штраф түләтеү ҡаралған. Ойошҡан енәйәт төркөмө тарафынан ошондай уҡ енәйәттәр ҡылынған осраҡта 5-10 йылға иркенән мәхрүм итеү һәм 1 - 5 миллионға тиклем штраф түләтеләсәк.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө хакимиәте башлығы өҫтәмә белем биреү муниципаль бюджет учреждениелары күрһәткән хеҙмәттәргә яңы тарифтар билдәләне. 2022 йылдың 1 сентябрендә индерелгән хаҡ гәмәлдән сығарылды. Яңы тарифтар буйынса, мәктәпкә әҙерлек сәғәте бер кешегә 121 һум тора. Хореография, бейеү һәм вокаль-инструменталь йүнәлештәге дәрестәр 181 һумға төшә. Биҙәү-ҡулланма йүнәлешендәге оҫталыҡ дәресе - 145 һум, компьютерҙа өйрәнеү - 242 һум. Өфөнөң өҫтәмә белем биреү системаһына ҡала балалар ижады үҙәге ҡарамағындағы тематик түңәрәктәр һәм профилле балалар белем биреү үҙәктәре ҡарай.

✓Көҙгөһөн Беларустан Башҡортостанға тағы туғыҙ зубр алып ҡайтырға йыйыналар. Был хаҡта 27 июндә Өфөлә Рәсәй һәм Беларусь төбәктәре форумының тематик секцияһында республикабыҙҙың эшҡыуарлыҡ һәм туризм министры Рөстәм Афзалов белдерҙе. Башҡортостанға килтерелгән тәүге туғыҙ зубрҙы Күгәрсен районындағы "Мораҙым тарлауығы" тәбиғәт паркы менән сиктәш Ыҡ дәүләт зоология заказнигы биләмәһенә ебәргәйнеләр. Әйткәндәй, инә зубрҙарҙың береһе быуаҙ. Башҡортостанда тыуған беренсе зубрға Башкиренок тигән исем бирергә тәҡдим итәләр.

✓Башҡортостан 2022 йыл йомғаҡтарына ярашлы тыуым күрһәткесе буйынса Волга буйы федераль округында икенсе урынды биләй. Республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығы хәбәр итеүенсә, былтыр бөтәһе 36 213 бала: 17 607 ҡыҙ һәм 18 606 малай донъяға килгән. Шулай уҡ сабыйҙар үлеме осраҡтарын 25 процентҡа кәметеүгә өлгәшелгән. Үлемдең дөйөм күрһәткесе лә 26,5 процентҡа аҙайған.

✓Башҡортостан фехтование мәктәбе вәкиле Полина Хәйертдинова Италияла донъя чемпионатында Рәсәй намыҫын яҡлай. Был хаҡта "Башинформ"ға республиканың спорт министры Руслан Хәбибовтың телеграм-каналынан билдәле булды. Донъя чемпионаты 22-30 июлдә уҙғарыла, тип хәбәр итте ул. "Полина менән бергә илебеҙҙән тағы алты көслө спортсы сығыш яһай һәм үҙҙәренең оҫталығын күрһәтә", - тип яҙҙы Руслан Хәбибов.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*✓ Һалым түләүсе үҙе өсөн генә түгел, тормош иптәшен, ата-әсәһен, 18 йәшкә тиклемге балаларын дауалаған өсөн дә һалым ҡайтармаһын алырға мөмкин. Көндөҙгө бүлектә уҡыһа, 24 йәшкә тиклемге балаһы өсөн ҡайтарма алырға була.*



ҺОРАУ-ЯУАП

# ҺАЛЫМ ҠАЙТАРМАЛАРЫ

**Дәүләт дауаланыуға һәм медикаменттар һатып алыуға, ДМС килешеүе төҙөүгә, белем алыуға, ирекле пенсия страховкалауына һәм ғүмерҙе ирекле страховкалауға, физкультура-һауыҡтырыу хеҙмәттәренә тотонолған аҡсаның бер өлөшөн кире ҡайтара ала. Мәҫәлән, һалым ҡайтармаһы үҙең һәм балаң өсөн бассейнға йәки фитнес-клубҡа абонемент һатып алған осраҡта ла ғәмәлдә.**




## Ул күпме була?

Һалым ҡайтармаһы һеҙ түләгән НДФЛ-дан сығып башҡарыла. Дауаланыу, белем алыу һәм ҡыйбатлы дауанан тыш, һанап үтелгән башҡа хеҙмәттәр өсөн йәмғеһе йылына 15 600 һум аҡсағыҙҙы кире ҡайтарыуҙары ихтимал. Йәғни, иҫәп-хисап башҡарыу өсөн билдәләнгән иң юғары 120 мең һумдың 13 проценты. Әммә Дәүләт Думаһы яңыраҡ ҡабул иткән законға ярашлы, 2024 йылдан башлап 19 500 һумға тиклем аҡсаны ҡайтартып алырға мөмкин буласаҡ. Йәғни, 150 мең һумдың 13 проценты. Тотонолған аҡсаны өс йыл дауамында юлларға мөмкин. Әгәр һеҙ бер йыл өсөн тотоп ҡалынған аҡсаны файҙалана алмайһығыҙ икән, ҡалған өлөшө киләһе йылға күсерелмәй.

2022 йылда балағыҙҙы түләүле спорт секцияһына бирһәгеҙ йәки үҙегеҙ өсөн фитнес-абонемент һатып алһағыҙ, улар өсөн һалым ҡайтармаһын юллау мөмкинлеге бар. Тотоп ҡалынған аҡсаны ҡайтартып алыу өсөн рәсми эштә эшләргә һәм килемдән һалым түләргә кәрәк. Ә спорт ойошмаһы йәки һеҙгә физкультура-һауыҡтырыу хеҙмәте күрһәткән ойошма йәки шәхси эшҡыуар Спорт министрлығы исемлегенә ингән булырға тейеш.

## Ҡайҙан алырға?

Һәр осраҡ өсөн айырым документтар исемлеге ҡаралған, уны Федераль һалым хеҙмәте сайтында табырға мөмкин. Һалым ҡайтармаһын һалым органынан йәки эш биреүсенән алырға була. Һалым органынан алырға теләһәгеҙ, ҡайтармаға ғаризаны йыл тамамланғас ҡына тапшырырға ярай. Әгәр йыл аҙағына тиклем көтөргә теләмәһәгеҙ, эш биреүсенән социаль ҡайтарма эшләтегеҙ. Был осраҡта һеҙгә тейешле аҡсаны ҡайтарып биргәнсе, эш хаҡығыҙҙан һалым тотолмаясаҡ.

## Белем алған өсөн

Үҙең белем алған өсөн дә, балаңдың, ҡәрҙәшеңдең (24 йәшкәсә), тәрбиәгә алған кешеңдең (18 йәшкәсә) уҡыуы өсөн дә тотонған аҡсаның бер өлөшөн ҡайтарырға мөмкин. Үҙең өсөн түләһәң - уҡыу формаһы мөһим түгел. Башҡалар көндөҙгө бүлектә уҡырға тейеш. Балалар баҡсаһы, юғары уҡыу йорто, автомәктәп йәки сит телдәр курсы булһынмы - иң мөһиме, учреждениеның лицензияһы булыуы мотлаҡ.

Баланы уҡытҡан өсөн аҡсаны кире ҡайтарғанда уның суммаһы үҙең өсөн йә ҡәрҙәшең өсөн алған аҡса күләменән айырыла. Был осраҡта һалым ҡайтармаһының иң ҙур күләме - йылына 6 500 һум (йәғни 50 мең һумдың 13 проценты). Ата-әсәгә бер лимит - 2024 йылдан алып сығымдар өсөн 14 300 һумға тиклем (110 мең һумдың 13 проценты).

## Дауаланған өсөн

Һалым түләүсе үҙе өсөн генә түгел, тормош иптәшен, ата-әсәһен, 18 йәшкә тиклемге балаларын дауалаған өсөн дә һалым ҡайтармаһын алырға мөмкин. Бынан тыш, көндөҙгө бүлектә уҡыһа, 24 йәшкә тиклемге балаларын дауалаған өсөн дә ҡайтарма алырға була.

Ҡиммәтле дауа өсөн лимиттар юҡ - теләһә ниндәй сумманың 13 процентын кире ҡайтаралар. Препараттар һатып алыуға тотонолған сығымды - дарыухана чектары һәм табип рецебы, медицина хеҙмәттәренә киткән сығымды клиника менән килешеү һәм касса чегы менән раҫларға кәрәк.

Бөтә төр социаль ҡайтарманың иң ҙур күләме йылына - 15 600 һум. Уны 120 мең һумдан алырға мөмкин. Мәҫәлән, медикаменттар өсөн 15 600 һумды кире ҡайтарһағыҙ, спорт һәм белем алған өсөн ҡайтарма юллап булмаясаҡ. Дауаланған һәм медикаменттар һатып алған өсөн һалым ҡайтармаһы тураһында ентеклерәк Федераль һалым хеҙмәте сайтында уҡырға була.

## Ремонт өсөн

Әгәр фатир яңы төҙөлгән йортта биҙәү эштәренән тыш һатып алынһа, проект һәм смета документацияһы төҙөтөү, биҙәү материалдары һатып алыу һәм бригаданың эшенә түләгән өсөн ҡайтарма алырға мөмкин. Бының өсөн Федераль һалым хеҙмәтенә ғариза яҙырға һәм сығымдарҙы раҫларға кәрәк. Шуға күрә, барлыҡ чектарығыҙҙы, килешеүҙәрегеҙҙе, акт һәм распискаларығыҙҙы һаҡлағыҙ. Электрон чектар ҙа ярай.

Торлаҡ һатып алған өсөн һалым ҡайтармаһы ремонт өсөн һалым ҡайтармаһы менән бергә иҫәпләнә, йәғни дөйөм сумманың 13 проценты һәм иң күбе - 260 мең һум. Иғтибар итегеҙ, әгәр фатирҙы ир менән ҡатын алһа, компенсацияны уларҙың һәр береһе алырға мөмкин. Ремонт оҙаҡҡа һуҙылһа, ҡурҡыныс түгел. Һалым ҡайтармаһына документтарҙы йыл һайын, сумма 2 миллион һумға еткәнсе тапшырырға була.

**Федераль һалым хеҙмәтенә тапшырырға кәрәкле документтар исемлеге:**

- 3-НДФЛ декларацияһы;
- килем һәм һалым күләме тураһында белешмә;
- фатирҙы эске биҙәүһеҙ һатып алыу-һатыу килешеүе (йәки өлөшләтә төҙөлөштә ҡатнашыу килешеүе);
- фатирҙы ҡабул итеү-тапшырыу акты;
- ремонтҡа сығымдарҙы раҫлаған документтар (магазин чектары, хеҙмәттәр күрһәтеүгә подрядсы менән килешеү, накладнойҙар, түләү документтары);
- фатир һатып алғанда түләүҙе раҫлаған документтар;
- Берҙәм дәүләт күсемһеҙ милек реестрынан күсермә.

Фатирҙы ремонтлаған өсөн һалым ҡайтармаһы тураһында тулыраҡ мәғлүмәтте ДОМ.РФ сайтында уҡырға була.

ҠЫҪҠАСА

## БАЛАНЫ - МӘКТӘПКӘ!

**Илебеҙҙә, шул иҫәптән Башҡортостанда, "Баланы мәктәпкә әҙерлә" акцияһы башланды. Акция барышында ишле, аҙ тәьмин ителгән, мохтаж ғаиләләрҙең балаларын уҡыу кәрәк-яраҡтары һалынған биштәрҙәр менән тәьмин итәләр.** Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың балаларына һәм яңы төбәктәрҙәге уҡыусыларға айырым иғтибар бүленә. Был хаҡта "Берҙәм Рәсәй" Башҡортостан бүлексәһенең матбуғат хеҙмәте хәбәр итә. Былтыр илдә 1 сентябргә 200 меңгә яҡын уҡыусыға ярҙам күрһәтелде. Акцияла һәр кем ҡатнашырға мөмкин. Мәктәп кәрәк-яраҡтарын ҡабул итеү өсөн төбәктәрҙә 4 меңдән ашыу махсус пункт ойоштороla. Пункттың адресын партияның төбәк бүлексәһендә йәки партияның ҡабул итеү бүлмәһендә белешергә мөмкин. Өфөлә ярҙамды Зәки Вәлиди урамындағы 1-се һәм Достоевский урамындағы 73-сө йортҡа килтереп бирергә була. Бынан тыш, "Берҙәм Рәсәй" партияһы депутаттары ата-әсәләр менән бергә мәктәп яңы биләмәләренең һәм спорт майҙансыҡтарының уҡыу йылы башланыуға әҙерлеген тикшерә.

✓ **Башҡортостан спортсыһы Артур Зөлҡәрнәев Астанала үткән билбау көрәше буйынса донъя беренселегендә етенсе тапҡыр донъя чемпионы исемен яуланы.** Был хаҡта үҙенең телеграм-каналында республиканың спорт министры Руслан Хәбибов хәбәр итте. "Классик стилдә алтын миҙал бар. Артур Зөлҡәрнәев 82 килограмға тиклемге ауырлыҡ категорияһында етенсе тапҡыр донъя чемпионы булды. Шәп һөҙөмтә", - тип билдерҙе Башҡортостандың спорт министры. Бер нисә көн элек республикабыҙ спортсылары Илфаҡ Ибәтуллин һәм Рәзил Шабиев Рәсәйҙең йыйылма командаһына ике көмөш миҙал килтерҙе. Ярыштар йомғаҡтары буйынса дөйөм команда зачетында Рәсәй Федерацияһы беренсе урында бара. Икенсе урында - Ҡаҙағстан, өсөнсөлә - Төркмәнстан. 15 июлдә билбау көрәше буйынса донъя чемпионатында Башҡортостан спортсылары биш миҙал яуланы, шуларҙың өсәүһе - алтын.

✓ **Башҡортостанда мәҙәниәт учреждениеларына академия исемен биреү тураһында яңы положение раҫланды.** Билдәле булыуынса, яңы статус алыу өсөн мәҙәниәт учреждениеһы 25 йылдан ашыу эшләргә, штатта 120-нән күберәк кеше, уларҙың 65 проценты юғары белемле булырға тейеш. Шулай уҡ исемгә дәғүә итеүсе учреждение халыҡ-ара, Рәсәй һәм республика форумдарында, фестивалдәрендә, конкурстарында, концерт эшмәкәрлегенә һәм театр сәнғәтенә булышлыҡ итеү буйынса федераль программаларҙа ҡатнашырға, төрлө кимәлдәге конкурстар һәм фестивалдәр үткәрергә, Рәсәй ҡалалары буйлап гастролдәргә сығырға, интернетта үҙҙәренең концерттарын һәм спектаклдәрен күрһәттергә, киң мәғлүмәт сараларының көн тәртибендә булырға тейеш. Был исем сикләнмәгән ваҡытта бирелә.

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Хәлһеҙлек

**Психик-эмоциональ хәлһеҙлектән түбәндәге ысулдарҙы ҡулланырға мөмкин:**

❖ Сәскә атып ултырған ҡайын еләгенең ерҙән өҫкө өлөшөн ваҡлап, 4-5 ҡалағына 1 литр ҡайнар һыу ҡойорға, 2 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан 20 минут алда стакандың өстән бер өлөшөн эсергә.

❖ 2 ҡалаҡ боланут үләненә ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, ҡайнар хәлгә еткерергә һәм уттан алып, 30 минут төнәтергә. 2-3 аҙна дауамында көнөнә 3-4 тапҡыр 1/3 стакан эсергә.

❖ 1 ҡалаҡ баҫыу ҡырҡбыуынына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, йылыға төрөп 30 минут төнәтергә һәм һөҙөргә. Организмды таҙартыу маҡсатында 2-3 аҙна дауамында көнөнә 4 тапҡыр ашарҙан алда сирек стакан эсергә.

❖ Киптереп ваҡланған 10 грамм юл япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, йылыға төрөргә һәм 30 минут төнәтеп, һөҙөргә. 2-3 аҙна дауамында көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 20 минут алда 2-шәр ҡалаҡ эсергә.

❖ Теләгән миҡдарҙа меңъяпраҡ япраҡтары һутына бал ҡушырға. Шуны 2-3 аҙна дауамында көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 20 минут алда 1-әр балғалаҡ ашарға.

### Үксә типкеһе (шпор)

❖ 1 баш һуғанды яртыға бүлеп, урталарына 1-әр тамсы деготь тамыҙырға. Шунан ошо ярты баш һуған менән ауыртҡан урынды ҡапларға.

❖ 1 картуфты йыуып, ҡабығы менән ваҡ ҡырғыстан үткәрергә. Шуны марляға һалып, ауыртҡан урынға бәйләргә һәм өҫтөнән полиэтилен ҡапларға. Быны 1 тәүлек сисмәҫкә. Шунан алмаштырырға. Дауаланыу - 1 аҙна. Ошо уҡ ысул менән сөйәлдәрҙе лә бөтөрөргә була.

❖ 1 ҡалаҡ аш содаһы һәм 8-10 тамсы йодты 3 литр эҫе һыуҙа иретергә. Һыуҙың температураһы 37 градус булырға тейеш. Шуға 10 минут аяҡтарҙы тығып ултырырға. Аҙағынан аяҡтарҙы киптереп, ауыртҡан урынға төнгөлөккә 5 процентлы йод һөртөргә.

❖ 50 мл нишатыр спиртына 1 ҡалаҡ көнбағыш майы ҡушып, шуға мамыҡты мансырға һәм көн һайын ауыртҡан үксәгә 30 минутҡа бәйләп торорға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Ҡоштар хайуандар донъяһының үҙенсәлекле бер сылбыры булып тора. Ҡоштар урманда ла, баҫыуҙарҙа ла, ҡалала ла йәшәй. Шуға ла бала саҡтан кеше уға иғтибар итә, уларҙы күҙәтә, һайрауын тыңлай. Белгестәр билдәләүенсә, ҡош һайрауы ишетеү һәләтен үҫтереүҙә ҙур роль уйнай. Шул уҡ ваҡытта беҙ ҡоштарҙы исемләп танымайбыҙ ҙа. Биология фәндәре докторҙары Мөкәмил Баянов менән Әнүәр Мәмәтов төҙөгән "Көньяҡ Урал ҡоштары" тигән хеҙмәт уҡыу йорттары өсөн генә түгел, тәбиғәт һөйөүселәр өсөн дә файҙалы буласаҡ, тип ышанабыҙ.**

### Ҡараҡ, сомғор
**(Чернозобая гагара)**

Кәүҙәһенең өҫкө яғы ялтырап торған ҡара төҫтә, елкә тирәһе, яурындарында аҡ һүрәт бар. Аҫҡы өлөшө ялтырап торған апаҡ төҫтә. Башы һәм муйыны көлһыу, тамағы һәм муйынының алғы яғы ҡара. Сукышы тура, осло. Ауыр итеп осоп китә, уға осор өсөн йүгереп, тиҙлек алырға кәрәк. Осоп барғанында тамаҡ төбө менән "га, га, га, гаррраа" тигән өн сығара.



Ҡараҡтың тормошо һыу менән бәйле. Шым ғына һыуға сума, һыу аҫтында оҙаҡ тора ала. Ваҡ һәм урта ҙурлыҡтағы балыҡ менән туҡлана. Пар ҡороп йәшәй, парҙары даими. Ояларын ярҙа, һыу эргәһендә ҡоралар.

Европаның - төньяҡ, Рәсәйҙең Азия өлөшөндә йәшәйҙәр. Көньяҡ Уралда яҙын һәм көҙөн, осоп китеп барышлай ғына осрай. Һаҡмар, Ағиҙел йылғалары, Талҡаҫ, Оло Учалы, Әргән, Яҡтыкүл, Солтанғүл, Асылыкүл, Ҡандраҡүл күлдәрендә, Павловка һәм Нөгөш һыуһаҡлағыстарында күрергә була. Әбйәлил һәм Учалы райондарында оя ҡороп йәшәгән осраҡтары бар.

"Ҡыҙыл китап"ҡа ингән. Республикала оя ҡороп йәшәргә балыҡсылар һәм һунарсылар мөмкинлек бирмәй.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*ХӘТЕРЛӘП...*

# КИНЙӘ РУХЫ ЙӘШӘЙ ҺАМАН ДА...

**Быйыл Ырымбур өлкәһе Нуғай даруғаһы Бошман-Ҡыпсаҡ улысы башҡорт старшинаһы, абыҙ, 1773-1775 йылдарҙағы Крәстиәндәр һуғышында ҡатнашыусы һәм уны Башҡортостанда ойоштороусыларҙың береһе Кинйә Арыҫлановтың тыуыуына 300 йыл тула. Ул әлеге ваҡытта Көйөргәҙе районына ҡараған Кинйә-Абыҙ ауылына нигеҙ һалыусы. Билдәле шәхестең юбилейына ҡарата һәм уның исемен мәңгеләштереү буйынса районда ниндәй эштәр башҡарыла, Кинйә абыҙ нигеҙ һалған ауыл бөгөнгө көндә нисек йәшәй? Ошондай һәм башҡа һорауҙар менән Көйөргәҙе районы хакимиәте башлығы Юлай Талха улы ИЛЬЯСОВҡа мөрәжәғәт иттек.**

**➔ Юлай Талха улы, һүҙҙе Кинйә Арыҫланов шәхесенең үҙе нигеҙ һалған ауылы, районы һәм республика өсөн әһәмиәтенән башлайыҡ.**

- Көйөргәҙеләр үҙҙәренең данлыҡлы яҡташтары иҫтәлеген хөрмәт итә һәм уның тураһындағы хәтирәләрҙе һәр саҡ күңелендә һаҡлай. Кинйә Арыҫланов Көйөргәҙе ерендә тыуып үҫкән, ошонда ул рух ныҡлығы алған, ырыуҙаштарының аҡыллы кәңәшсеһе һәм уҡытыусыһы булған, үҙ халҡының азатлығы һәм уҙаллылығын даулап көрәшкән яугирға әйләнгән.

Кинйә Арыҫланов - башҡорт халҡының геройы, беҙҙең ғорурлығыбыҙ, Көйөргәҙе районының бренды һәм, һис шикһеҙ, үҫеп килеүсе быуынға илһөйәрлек өлгөһө булған шәхес. Нәҡ ошо ерҙә, ул нигеҙ һалған ауылда, бер юлы өс Советтар Союзы Геройы - Ғәфиәтулла Арыҫланов, Сәлмән Биктимеров һәм Хәсән Ғайсин - тыуған. Улар Кинйә батыр рухы йәшәгән ерҙән көс-ғәйрәт алып, дошманды тар-мар иткән, үҙҙәренең исемен Кинйә абыҙ кеүек үк ил тарихында мәңгеләштергән. Кинйәнең рухы, исеме бөгөнгө көндә лә уның ауылын йәшәтә.

**➔ Әйткәндәй, уҙған быуаттың 80-90-сы йылдарында Кинйә-Абыҙ ауылына бөтөнләй юҡҡа сығыу хәүефе янаған бит. Шулай ҙа урындағы халыҡ "перспективаһыҙ", тигән мөһөр тағылған ауылдарын һаҡлап алып ҡалыуға өлгәшкән. Бөгөн ауыл нисек йәшәй?**

- Эйе, ундай мәлдәрҙе лә кисергән был ауыл. Ул ваҡыттарҙа Кинйә-Абыҙ бөтөнләй юҡҡа сыға яҙған булған, ауылда мәктәп тә, магазин да, етештереү биналары ла ҡалмаған, эш урындары бөткән, йәштәр ауылдан ситкә күсеп киткән. Ләкин ауылдың Ер йөҙөнән юҡҡа сығыуына юл ҡуймаған арҙаҡлы уҙамандарға рәхмәт, уларҙың тырышлығы менән Кинйә-Абыҙ бөгөн дә йәшәй, үҫә, төрлө уңыштарға өлгәшә. Мәҫәлән, ошондай кешеләрҙең береһе - Кинйә-Абыҙ ауылында тыуып үҫкән Хәлилов Ғәзиз Ислам улы был тарихи ауылды һаҡлап ҡалыу өсөн бик күп көс һала. Ҡыҙғаныҫҡа күрә, ул башланғысын аҙағына тиклем алып барып еткерә алмай, ләкин уның фиҙаҡәр эшен тыуған яҡҡа ҡарата битараф булмағандар дауам итә. Аҡназаров Зәкәриә Шәрәфетдин улының башланғысы менән Республиканың Министрҙар Советы 1980 йылда Кинйә-Абыҙ-2 ауылын тергеҙеү буйынса махсус ҡарар ҡабул итә. Уға ярашлы, ауылда 28 торлаҡ йорт күтәрелеп, мәктәп, магазин, малсылыҡ биналары төҙөлә, юл һалына. Тыуған яҡтарына ҡайтыусылар ҙа табыла. 1992 йылда ауылды комплексы төҙөү һәм 150 урынлыҡ клуб менән бергә Кинйә Арыҫлановтың музейын төҙөү тураһында Башҡортостандың Министрҙар Советы ҡарары ҡабул




ителгәс, ауыл тағы ла ныҡыраҡ йәнләнә.

Бөгөнгө көндә ауылда 20-нән ашыу ихата иҫәпләнә, 138 кеше йәшәй, ағымдағы йыл башынан 2 бала донъяға килде. Кинйә-Абыҙҙа 3 крәстиән-фермер хужалығы эшмәкәрлек алып бара, башланғыс мәктәп, музей, ауыл клубы, медпункт эшләй. Ауылға газ үткән, үҙәкләштерелгән һыу менән тәьмин ителгән, бөтә урамдарға ла асфальт түшәлгән. Ветерандар советы, "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы, ирекле халыҡ дружинаһы эшләй.

Кинйә-Абыҙҙа дуҫ, татыу, эшһөйәр халыҡ йәшәй. Уларҙың һәр береһе ауылдың үҫеше, ғаилә ҡиммәттәре, балаларҙың матур, етеш йәшәүҙәре тураһында уйлай һәм быға тик айыҡ тормош алып барғанда, матур итеп йәшәргә ынтылғанда ғына өлгәшеп була икәнен яҡшы төшөнә. Мәҫәлән, ошондай ғаиләләрҙең береһен - "Өлгөлө ғаилә" республика конкурсында "Ғаилә йолалары һәм ҡиммәттәре" номинацияһында икенсе урын яулаған Рахманғоловтарҙы миҫал итеп әйтергә була. Шуныһы ҡыуаныслы, бындай күркәм ғаиләләр күп Кинйә-Абыҙҙа.

Күптән түгел йомғаҡ яһалған "Айыҡ ауыл-2022" республика конкурсында Кинйә-Абыҙҙарҙың бәләкәй ауылдар араһында беренсе урын яулауҙары ла ошо хаҡта асыҡ һөйләй. Алдағы пландарҙа ауылды "Башҡорт оҙон ғүмерлеге" республика туристик маршрутына индереү күҙаллана, йәғни ауыл артабан да әүҙем үҫәсәк, тип ышанаслы әйтергә була.

Ауылды һаҡлап ҡалыуға һәм уның үҫешенә Кинйә-Абыҙҙа тыуып үҫкән кешеләр ҙур өлөш индерә. Улар араһында "Южуралойл" ЯСЙ етәксеһе Зиннур Исхаҡовты, Көйөргәҙе районы башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Юлай Ишмөхәмәтовты билдәләп үтергә була. "Атайсал" проекты сиктәрендә улар ауылдаштары иҫтәлегенә мәрмәр обелиск ҡуйҙы, Кинйә-Абыҙ-1 ауылына тиклем юлды төҙәкләндерҙе, Көйөргәҙе йылғаһы аша күперҙе яңыртты, иҫке зыяратты көртәләне. Бөгөнгө көндә улар шулай уҡ Кинйә Арыҫланов музейын тулыландырыу буйынса әүҙем эшмәкәрлек алып бара.

**➔ Ауылдың матур бөгөнгөһө тураһында ишетеү бик ҡыуаныслы. Киләсәге лә яҡты булһын, тип теләйбеҙ. Ә ошо ауылға нигеҙ һалыусы Кинйә Арыҫлановтың исемен мәңгеләштереү йәһәтенән ниндәй эштәр башҡарыла төбәктә?**

- Көйөргәҙе районында Кинйә Арыҫлановтың яҡты иҫтәлеген һаҡлау өсөн байтаҡ саралар үткәрелә. Ҡыҫҡаса ғына әйткәндә, районда Кинйә Арыҫланов исемен йөрөткән урамдар бар, ауылынан йыраҡ түгел Кинйә мәмерйәһе урынлашҡан, шәхестең музейы эшләй, районда бер нисә урында уның бюстары ҡуйылған. Районда Кинйә Арыҫланов исемендәге йәштәр премияһы булдырылған, биш йыл һайын уның юбилейы төрлө саралар менән киң билдәләнә, шулай уҡ башҡорт батырының 300 йыллыҡ юбилейы сиктәрендә Көйөргәҙе районы Советы тарафынан Кинйә Арыҫланов миҙалы булдырылды.

**➔ Быйыл үтәсәк юбилей сараларына ла күҙ һалайыҡ.**

- Кинйә абыҙҙың 300 йыллығына ҡарата ҙур күләмле саралар үткәреләсәк, тип күҙаллана. Мәҫәлән, 10 июнда Кинйә-Абыҙ-1 ауылында "Беҙ бөйөк Кинйә варисҭары" исемле ҙур һабантуй үтте. Августа "Кинйә йыйыны"н уҙғарыу буйынса әүҙем эш алып барыла. Йыйын сиктәрендә "Һөнәрҙәр йәйғоро" исемле Һөнәр һәм кәсеп фестивале, "Мәргән уҡсы" турниры, ҡурайсыларҙың төбәк фестивале һәм башҡа күп төрлө саралар уҙасаҡ. Шулай уҡ "Акбуҙатта ҡунаҡта" исемле VI Асыҡ балалар һәм йәштәр ижади республика фольклор фестивале үткәреү ҙә планлаштырылған.

**➔ Крәстиәндәр һуғышы башланғанға тиклем Кинйә Арыҫланов 10 йыл дауамында улыс старшинаһы вазифаһын башҡарған. Һеҙ, район башлығы булараҡ, уның ниндәй һыҙаттарын үҙегеҙ өсөн үрнәк итеп алырға теләр инегеҙ?**

- Кинйә Арыҫланов белемле, оҫта, һиҙгер, алдан күрә белгән етәксе булған, төрки, урыҫ телдәрен яҡшы белгән. Ғәҙел, намыҫлы кеше икәнлеген күреп тә Емельян Пугачев уны үҙенең көрәштәше иткән. Халҡының мәнфәғәте, уның ирке өсөн яуға күтәрелгән. Минеңсә, әгәр ҙә ул беҙҙең замандаш булһа, күп нәмәгә өйрәтеүсе, заманса ҡарашлы, шәп етәксе булыр ине. Тыуған еренә тоғролоҡ, ошо төбәктә йәшәгән күп милләтле халыҡтың мәнфәғәтен алға ҡуйып йәшәү - уның ошо сифаттарын үрнәк итеп алырға мөмкин булыр ине.

Кинйә абыҙ башҡорт халҡының милли геройы. Беҙ уның менән ғорурланабыҙ. Ул үҫеп килеүсе быуынға өлгө булырҙай, үҙ халҡына һәм тыуған еренә бөтә булмышы менән хеҙмәт иткән шәхес булараҡ быуаттар дауамында йәшәйәсәк, уның тураһындағы яҡты хәтирәләр быуындан- быуынға күсеп барасаҡ.

**Гөлназ МАНАПОВА**
**яҙып алды.**

*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Дүртенсе бүлек. Көньяҡ Урал гун эпохаһында



Тикшеренеүселәр, Геродот яҙғанса, таҙ башлы аргиппейҙарҙың ниндәйҙер ағас емешенән (бәлки, сейәләр - ?) яһалған һутты "асхи" тип атауҙарын иғтибарға алып, ошо һүҙҙе боронғо төрки сығышлы, тип фараз итә. Был һүҙ башҡортса "асы", татарса "ачы" тигән һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә тура килә. Геродоттың аргиппейҙарҙы таҙҙар (тазлар) тип атауы ла уларҙың төрки телле булыуына ишара. Хәҙерге заман лингвистары (мәҫәлән, Ж. Кейекбаев) Геродот яҙмаларындағы таҙ башлы кешеләрҙең тап тазлар этнонимына тура килеүен иғтибарға ала, ошо атама тик төрки халыҡтарына ғына хас. Сак-массагеттар дәүерендә был этнонимдың бик киң территорияла таралған булыуын хәҙерге заманда Алтайҙан Карпатҡа тиклем йәшәгән төрки сығышлы халыҡтарҙа уның бер боронғо реликт рәүешендә һаҡланып ҡалыуынан белеп була.

Боронғо төркиҙәрҙең иртә тимер быуатында уҡ Көньяҡ Уралды төйәк итеүе хаҡындағы мәсьәләне тикшергәндә 1969 йылда башҡорт халҡының этногенезы буйынса уҙғарылған бер ғилми конференциялағы сығышында тикшеренеүсе К.И. Петровтың антик авторҙар хеҙмәттәренең оригиналдарында "иирк" этнонимының булмауы, был һүҙҙең "төрөк" йә иһә "торк" атамаһының боҙоп уҡылыуы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килеүе хаҡындағы бик ҡыҙыҡлы иҫкәрмәһен иғтибарға алыу зарур. Әгәр фәндә ошо фекер ҡабул ителгән хәлдә әле һүҙ барған дәүерҙә үк боронғо төркиҙәрҙең Көньяҡ Уралда йәшәүе хаҡындағы һығымта шик тыуҙырмаясаҡ.

Моғайын, Көньяҡ Урал аргиппейҙары (тазлар, тип әйтеп була) хаҡында яҙғанда Геодоттың Ҡара диңгеҙ буйында йәшәгән скифтарҙың улар менән ете талмас, йәғни тәржемәселәр ярҙамында аралашыуы хаҡындағы мәғлүмәтен дә ошо ҡәүемдең төрки телле булыуына бер дәлил итеп килтерергә булалыр.

Көньяҡ Уралда көн иткән сак-массагет ҡәбиләләренең төрки телле булыуы хаҡындағы һығымта сак һәм скифтарҙың теле буйынса алып барылған тикшеренеүҙәр фонында тағы ла дәлиллерәк булып күҙаллана. Белгестәр фекеренсә, мәҫәлән, Ҡара диңгеҙ буйы скифтары үҙҙәренең йәшәү рәүеше буйынса тарихи төркиҙәрҙән бик аҙ ғына айырылып торған. Беҙгә билдәле булған Таргитай, Арпаксай, Липоксай һәм шуның һымаҡ башҡа скиф исемдәре дөйөм төрки һүҙҙәренә бик тә оҡшаш һәм уларҙың боронғо төрки теле менән бәйле булыуына шик ҡалмай. Мәҫәлән, Арпаксай исеменең ике өлөштән - "арпа" һәм "сай" (боронғо төркисә - йылға) һүҙҙәренән хасил булыуы мөмкин. Ошондай тикшеренеүҙәр тарих фәнендә С.Е. Маловтың скифтарҙың төрки телле булыуы хаҡындағы фекерен раҫлай.

Ошо факттар нигеҙендә иртә тимер быуатында Көньяҡ Уралда йәшәгән, малсылыҡ менән шөғөлләнгән ҡәүемдәрҙең төп, йә иһә бер өлөшөнөң боронғо төрки телендә аралашыуы хаҡында фараз итеү нигеҙле, тип раҫларға була. Уларҙан Даих - Яйыҡ, Һоҡ, Һаҡмар, Исәт топонимдары, әлеге "асы" һүҙе, "тазлар" этнонимы беҙҙең заманға тиклем һаҡланып ҡалған.

Әммә әле һүҙ барған ҡәбиләләрҙең тарихи эҙҙәре йылға исемдәрендә һәм башҡорт халҡының телендә генә һаҡланып ҡалмаған. Археологик материалдарҙы башҡорт фольклоры ҡомартҡылары менән сағыштырыу, үрҙә әйтелгәнсә, башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадының иң боронғо сюжеттарының ошо дәүерҙәрҙә Көньяҡ Уралда йәшәгән малсыларҙың ғәмәли көнкүреше менән бәйле булыуын күрһәтә. Шулай ҙа дах-массагет һәм уларға нәҫелдәш башҡа ҡәбиләләрҙең мираҫы быны менән генә сикләнмәй. Уларҙан, мәҫәлән, меңәр йылдар аша беҙҙең замандарға тиклем артыҡ үҙгәрмәйенсә тейерлек һаҡланып ҡалған башҡорт милли кейеменең бер мөһим детален, атап әйткәндә, ирҙәрҙең осло башлы кейеҙ башлығын атап китергә була. Тап ошондай башлыҡтар б.э. тиклем VII - III быуаттарҙа уҡ хәҙерге Ҡаҙағстан, Урта Азия (сактар) һәм Көнсығыш Европала йәшәгән (скифтар) ҡәбиләләрҙә ҡулланылған. Ул замандарҙа йәшәгән авторҙар яҙғанса, сактарҙың бер төркөмөн "осло башлыҡлы сактар" (сак-тиграхауда), тип атағандар. Скифтарҙың ошондай башлыҡ кейеүҙәренә ошо заманға ҡараған сәнғәт әйберҙәрендәге һүрәттәрҙе дәлил итеп килтерергә була. Ысынлап та, скифтар кейгән осло башлыҡтар барса деталдәре менән беҙҙең башҡорт ирҙәренең баш кейемдәренә оҡшаш. Күрәһең, Көньяҡ Уралдың таулы-урманлы райондарында башҡа бер ҡәүемдәрҙән быуаттар буйына айырылыбыраҡ йәшәү баш кейеменең ошо тибының башҡорттарҙа үҙгәрмәйенсә тейерлек һаҡланып ҡалыуына сәбәп булған.

Иртә тимер быуаты эпохаһында Көнсығыш һәм Үҙәк Европа, Ҡаҙағстан, Урта Азия һәм Яҡын Көнсығыш территорияһында йәшәгән боронғо төркиҙәр хаҡындағы әҙәбиәт Татарстан Фәндәр академияһы академигы, профессор-лингвист М.З. Зәкиевтың "Происхождение тюрков и татар" (М., 2003) тигән бик мөһим хеҙмәте менән тулыланды. Ошо фундаменталь хеҙмәттә әле тикшерелгән төбәктәрҙә йәшәгән халыҡтарҙың телдәре хаҡындағы барса лингвистик әҙәбиәткә профессиональ анализ менән бер рәттән, тикшерелгән проблема буйынса белдерелгән ҡараш-фекерҙәр ҙә нигеҙле аргументтар менән нығытыла. Был хеҙмәттә, тәүгеләрҙән булып, иң боронғо төрки телле ҡәбиләләр хаҡындағы лингвистик мәғлүмәттәр тулы һәм системалы рәүештә бәйән ителә. Автор күләмле миҫалдар нигеҙендә уҡыусыны скифтарҙың, сарматтарҙың, сактарҙың массагеттарҙың һәм Көньяҡ Уралдың Геродот иҫкә алған барса ҡәбиләләр массаһының (дайҙар, иирктар, исседондар, аргиппейҙар, аримасптар) боронғо төрки телдәрендә аралашыуын дәлилләп, уларҙың фарсы-иран телле булыуы хаҡындағы фекерҙең нигеҙһеҙ булыуына ышандыра. Иртә тимер быуатында дала Евразияһы халыҡтары телдәре хаҡындағы ошо дөйөмләштереүсе хеҙмәттең археологтар иғтибарынан ситтә ҡалмауына өмөт итергә генә ҡала.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**
**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

*ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ*

# ҠЫРҠ ӨЙЛӨ МЕҢЛЕЛӘР



**Ошо көндәрҙә Дәүләкән районында "Ҡырҡ өйлө меңле ырыуы йыйыны" төбәк байрамы уҙғарылды. Сара Атайсалға изге ғәмәлдәр йылы сиктәрендә халыҡ-ара дуҫлыҡ, теләктәшлек, башҡорт халҡының милли мәҙәниәтен һәм рухи ҡиммәттәрен пропагандалау, меңле ырыуы башҡорттарын берләштереү кеүек изге маҡсаттарҙа ойошторолдо.**

Йыйында ҡатнашыусылар башҡорт халыҡ милли йолалары, уйындарында, төрлө ярыштарҙа үҙен һынап ҡарай алды. Мәҫәлән, "Алпамыша" конкурсында Дәүләкән һәм Шишмә райондары командалары көс һәм отҡорлоҡҡа ярышты. Бесән төргәген этеү, таш сөйөү, бүрәнәне күтәреп шылдырыу кеүек үҙенсәлекле һынауҙарҙы уңышлы үтәп, дәүләкәндәр беренселекте бирмәне. Уҡсылар араһында ла ярыш бик ҡыҙыу барҙы: йәмғеһе 40 кеше ҡатнашты һәм улар араһында 6-11 йәшлек малай-ҡыҙҙар ҙа булыуы һөйөндөрҙө. Ә бына "Дим һылыуы" конкурсы иң матур, һәләтле һәм ҡул эштәренә, аш-һыуға оҫта ҡатын-ҡыҙҙарҙы асыҡланы. Унда Дәүләкән, Шишмә, Ауырғазы, Әлшәй райондарынан килгән биш гүзәл ҡатнашты.

Байрам йәме - бәйге, быйыл ат сабышында Шишмә районынан Фәнзил Ҡәнзәфәров еңеү яуланы. Ә инде сәсәндәр әйтеше, халыҡ йырҙарын башҡарыусылар, ҡурайсылар ярыштары йыйындағы бар ғәмде хайран итер илаһи моңға сорнаны. Һуңғыһында Дәүләкән, Шишмә, Ҡырмыҫҡалы райондары, Өфө ҡалаһынан килгән ҡурайсылар сығыш яһаны.

Был матур байрамды Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, Дәүләкән районы хакимиәте, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, "Мең ырыуы" төбәк йәмәғәт ойошмаһы, Башҡортостан Республикаһының спорт көрәше һәм көрәш федерацияһы ойошторҙо.

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Калинковичи-Мозырь һөжүм итеү операцияһы. Мозырь рейды

Ремезы һәм Мелешковичи ауылдары районында дошман көслө ҡаршылыҡ күрһәтә, сөнки уларҙың командованиеһы ла бындағы частарына, ошо ауылдарҙы ҡалдырып, сигенеп китеүҙе ҡәтғи тыйған була. Әммә беҙҙең яугирҙарыбыҙ күңелендә дошманды еңеү, белорус халҡына килтергән иҫ киткес яуызлыҡтары өсөн ҡон ҡайтарыу тойғоһо шул тиклем ҡеүәтле була - уларҙы изге һуғыш юлдарында туҡтатырлыҡ башҡа бер көстөң табылыуы ла мөмкин булмай ошо алыштарҙа. 16-сы гвардия атлы дивизияһының 58-се гв. атлы полкы, 14-се гвардия атлы дивизияһының 56-сы гв. атлы полкы һәм 415-се уҡсылар дивизияһының бер полкы, ҡеүәтле атакаға күтәрелеп, Ремезы ауылына бәреп инә, байтаҡ ҡына дошман һалдатын әсиргә ала, байтаҡ ҡына трофейҙар алына. 1945 йылда Мәскәү ҡалаһында нәшер ителгән "Кавалерия в Отечественной войне" исемле китапта ошо операция барышында Ремезы ауылын азат итеү ошолай итеп баһалана: "...Ремезыны алыу менән 7-се гвардия кавкорпусы частары Ельск ҡаршылыҡ итеү үҙәгенең флангыһына һәм тылына сыҡты, уны немецтар үҙҙәренең уң флангыһындағы ҡәлғә кеүек итеп иҫәпләп, ҙур өмөттәр бағлай ине".

Беҙҙең частар Мелешковичи рубежына сыҡҡас, корпус командиры дивизияларға яңы бойороҡ еткерә: Романовка һәм Слобода ауылдарындағы дошман гарнизондарын тар-мар итергә, Мозырь - Скрыгалово шоссе юлын киҫеп, дошмандың Мозырь төркөмөнөң төп көстәре өсөн хәүефле хәл тыуҙырырға.

9 ғинуарҙа 16-сы гв. атлы дивизияһы частары "138,8 билдәһе - Мелешковичи - Горобово - Красное - Поддубнице - Романовка" маршруты буйынса алға ҡуҙғала. Алға барыу тағы ла ауырыраҡ була башлай, етмәһә, бер туҡтауһыҙ еүеш ҡар яуа. Гвардия өлкән лейтенанты Хәниф Әминев командалыҡ иткән саперҙар эскадроны, арыу-талыуға ҡарамай, кисеү урындарын ипкә килтерә, һаҙлыҡтар аша бүрәнәләрҙән түшәм һала. Бына яугир фиҙаҡәрлеген күрһәткән бәғзе бер саперҙарҙың исем-шәрифтәре: рядовойҙар Хөснөтдин Һатлыҡов, Ғаян Йомаҙилов, Зәбих Ғәйнизаров, Мөхәмәтйән Илтенбаев, Моталлап Күзбәков, Фитрат Латыпов. Уларға корпустың саперҙар эскадроны ярҙам итә.

Дивизия командиры полктар һәм 20-се айырым гв. ПВО дивизионы алдында аныҡ бурыстар ҡуя. Дивизия 9 ғинуар кисенә Романовка һәм Моисеевка ауылдарын алырға, Слобода ауылына яҡынлашып, уға илтеүсе юлдарҙы киҫергә тейеш була. Авангардта барған 58-се гвардия атлы полкы Мелешковичи һәм Романовка ауылдарын ала. Дивизия штабы һәм 60-сы гв. атлы полкы, Лукашевка ауылы йүнәлешендә хәрәкәт итеп, юлдарҙы төҙөкләндерә, кисеүҙәрҙе ремонтлай, пулемет тачанкаларын, орудиеларҙы, йөклө арбаларҙы йылғалар аша сығара.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*✓ Сибай институты Урал аръяғының үҫеше өсөн ҙур миссияға торошло уҡыу йорто, уның булмауын хәҙер күҙ алдына ла килтерерлек түгел. Ул асылған ваҡытта милли кадрҙарға ихтыяж шул тиклем ҙур ине.*



# ЯҘМЫШЫНА ЛА, ОСТАЗДАРЫНА ЛА...

## рәхмәтле булып йәшәй ул

**Етәкселәрҙең вазифаһы юғарыраҡ булған һайын, беҙ уларҙың шәхси тормошо тураһында аҙыраҡ беләбеҙ. Быының артыҡ зыяны ла юҡтыр, бәлки, ә бына уларҙың шәхсән фекерҙәрен, уй-хистәрен белеү араларҙы яҡынайта, төрлө уйҙырмаларҙан, имеш-мимештәрҙән ҡурсалай түгелме? Ни тиһәң дә, тышҡы ҡиәфәт, йөмәгәт урындарында кешенең үҙен нисек тотоуы уның эске донъяһына, кисерештәренә бөтөнләй тап килмәҫкә лә мөмкин. Сибай институты директоры Илдар Сәлихйән улы ХӘМИТОВ менән булған һөйләшеүҙә уның тураһында күп нәмәләр белдем һәм әңгәмәсемдең ябайлығына һәм ихласлығына хайран ҡалдым.**

### Уҡытыусыларымды иҫләйем

Мин 1978 йылда Баймаҡ районы Йәнйегет ауылында тыуғанмын. Бер йәшем тулғанда атай-әсәйемдәр Сибайға күскән. Беренсе класҡа Горный урамындағы 5-се мәктәпкә уҡырға барҙым. Ике ҡатлы яңы мәктәп әле төҙөлөп бөтмәгәйне, бер йыл иҫке мәктәптә уҡыныҡ. Сығышы менән Баймаҡ районынан булған директорыбыҙ Чернов Семен Николаевич ихласлап башҡортса һөйләшә ине. Аҙаҡ ул оҙаҡ йылдар институтта Зиннур Ғәбәйҙулла улы Йәрмөхәмәтовтың урынбаҫары булып эшләне. Ул осорҙа кластағы балалар һаны ла күп була торғайны: беренсе класҡа 27 уҡыусы барҙыҡ. Тәүге уҡытыусым Алһыу Мирза ҡыҙы Абдулованы, ул осорҙағы уҡытыу ысулдарын йыш ҡына һағынып иҫкә алам. Элек, күрәһең, уҡыуға иғтибар күберәк бүленгән, кластан класҡа ябай ғына, бер ниндәй байрамһыҙ, тантанаһыҙ күсә лә ултыра инек. Беҙ урта белемдең 11 йыллыҡҡа күскән осорона тура килдек, шуға бишенсе класты уҡымай, алтынсы класҡа күстек. Ике кластың программаһын ҡушып уҡыһаҡ та, ауырлығын тоймаҡыҡ. 9-сы класты тамамлағас, беренсе кластан бергә уҡыған иптәшем менән Сибай педагогия училищеһына уҡырға индек. Һайлаған һөнәребеҙ - хеҙмәт һәм черчение уҡытыусыһы. Биш йыл уҡығандан һуң өҫтәлмә рәүештә физкультура уҡытыусыһы танытмаһы ла бирҙеләр. Беҙ уҡый башлағанда ул уҡыу йорто Сибай юғары педагогия училищеһы тип атала ине, өсөнсө курста уҡығанда педколледж тип үҙгәрттеләр.

Колледжда уҡыған студент йылдары ғүмеремдең яҡты бер мәле булып иҫтә ҡалған. Көслө уҡытыусылар ҡулына эләктек, уларҙың яртыһынан күбеһе атҡаҙанған уҡытыусылар ине, колледжға мәктәптәрҙән иң яҡшы уҡытыусыларҙы һайлап эшкә ала торғайнылар. Студенттар ҙа илебеҙҙең төрлө яҡтарынан йыйылғайны, хатта Өфөнән килә торғайнылар, Питерҙан килгәндәр ҙә бар ине. Хеҙмәт бүлегендә 25 егет һәм 25 ҡыҙ айырым ике төркөмгә бүленеп уҡыныҡ: ҡыҙҙар - хеҙмәтләндереү, егеттәр техник хеҙмәт буйынса. Педколледжда уҡыһам да уҡытыусы буласағымды әле күҙ алдына килтермәй инем, уҡыуҙы артабан дауам итеү теләге лә бар ине. Шул осорҙа Урал аръяғының мәғарифына ҙур өлөш индергән Хәснитдин Хәйбулла улы Хәмитовтың йоғонтоһон тойоп йәшәнем, нәҡ ул Сибайҙа асылған институттың техник факультетына уҡырға инергә тәҡдим итте. Кеше булараҡ та, уҡытыусы булараҡ та Хәснитдин Хәйбуллович оло шәхес булды. Педколледждан нимә иҫтә ҡалды, тиһәләр, уҡытыусыларыбыҙ, тип яуап бирәм.

Уҡытыусылар көслө булғанғалыр, уҡыу еңел бирелде. Төркөмдә күпселеге егеттәр булғас, спорт менән шөғөлләндек, төрлө сараларҙа ҡатнашып, күңелле йәшәнек.

### Ғилми дәрәжә

Ул осорҙа Сибайҙа ике юғары уҡыу йорто - Башҡорт дәүләт педагогия институты менән Башҡорт дәүләт университеты филиалдары эшләй ине. 1998 йылда улар бергә ҡушылып, әлеге Сибай институты барлыҡҡа килде. Унан тыш, Магнитогорск педагогия институты технология факультетының Сибай филиалы асылды. Беҙ колледждан һуң шунда уҡырға инеп, йыл ярым ғына уҡып ҡалдыҡ, сит регион булғанға, финанслау мәсьәләһендә ҡытыршылыҡтар килеп сығып, ябылыу хәлендә ҡалғас, ул филиалды ла СиБГУ-ға ҡуштылар һәм беҙ яңы уҡыу йортоноң студенттары булып киттек. Институтты ҡыҙыл диплом менән тамамланым. Психологиянан уҡытҡан Тамара Михайловна исемле уҡытыусыбыҙ курс эштәре, төрлө проекттар яҙыуға ҡыҙыҡһындыра торғайны, фәнгә ынтылышым шулай башланды. Институтты тамамлаған 2001 йылда тәбиғи математика факультетында дөйөм техник дисциплина кафедраһы асылды. Кафедра мөдире Азат Сәлимйән улы Вәлиев мине шунда эшкә ҡалдырҙы. Диссертацияға тема һайларға тәҡдим иткәс, нимәнән башларға ла белмәй инем әле. 2002 йылда беҙгә Гөлназ Салауат ҡыҙы Ғүмәрова эшкә килде. Уны Азат Сәлимйән улы Мәскәүҙән саҡырып ҡайтарғайны. Йәш уҡытыусы яңы ғына диссертация яҡлағайны. Гөлназ Салауат ҡыҙы технология буйынса күп китаптар авторы Хотунцев Юрий Леонтьевич менән танышырға тәҡдим итте. 2003 йылда Мәскәүгә конференцияға барғанда Хотунцев менән күрешеп, диссертация темаһы тураһында һөйләштек. Ул, беҙҙә технология менән мәҙәниәт төшөнсәләре икеһе айырым йәшәй, әйҙә, технологик мәҙәниәт тигән төшөнсә уйлап табайыҡ, тип тәҡдим итте. Был фекер бик ҡыҙыҡ тойолдо һәм "Уҡыусыларҙа технологик мәҙәниәт формалаштырыу" тигән диссертация темаһы барлыҡҡа килде, башҡөллө фәнни эшкә сумдым, бер үк ваҡытта үҙебеҙҙең институтта уҡытып, аспирантурала уҡып, 2007 йылдың майында диссертациямды яҡланым. Азат Сәлимйән улы менән Гөлназ Салауат ҡыҙына рәхмәтлемен, улар тормошомдоң ошо осоронда ныҡ терәк булдылар. Ғилми дәрәжәм булғас, доцент, аҙаҡ кафедра мөдире итеп тәғәйенләнеләр.



### Педколледж

2017 йылда, институт директоры Зиннур Ғәбәйҙулла улы Йәрмөхәмәтовтың фән эштәре буйынса урынбаҫары булып эшләгәндә, отпуск алдынан Өфөгә мәғариф министрлығына саҡырылдым. Ул саҡтағы министр Гөлназ Радмил ҡыҙы Шафиҡова, Сибай педагогия колледжына директор булып бар, тип, тәҡдим итте, ваҡытында Хәмитов 26 йыл директор булды, икенсе Хәмитов дауам итһен, тип шаярта биреберәк өҫтәп ҡуйҙы. Институтҡа хәбәр иттем дә, ризалаштым һәм 30 августа яңы вазифала эш башланым. Коллектив яҡшы ҡабул итте, шуға еңел генә эшләп киттем. Өс йыл ярым эшләнем унда, үҙем өсөн ҙур тәжрибә тупланым. Бында ла фәнгә иғтибар йүнәлттем, бигерәк тә уҡытыусыларҙың өҫтәлмә белем биреү курсарына иғтибар артты, төрлө конкурстарҙа йышыраҡ ҡатнаша башланыҡ.

Шулай педколледжда эшләп йөрөгәндә, БДУ ректоры Морозкин Николай Данилович саҡыртты һәм Сибай институты директоры вазифаһына тәғәйенләнә. Мин колледжға күскән йылда Зиннур Ғәбәйҙулла улы институттан киткәйне, уның урынында Вәлиев Азат Сәлимйән улы ҡалғайны. Таныш коллективыма кире ҡайттым, 2021 йылдың 20 февралендә яңы вазифала эш башланым. Яҙмышыма, белмәйем, карьерам шулай тиҙ үҫте.

### Институт

Тормошомдоң шулай барыуына ҡыуанам, яҙмышыма рәхмәтлемен. Ҡурҡыу тойғоһо ят миңә. Кәрәкле ваҡытта ҡайҙа эшләргә тәғәйенләйҙәр, шунда ҡурҡмай эшләргә кәрәк. Ҡайҙа эшләһәм дә, һәр эште төплө итеп, урынына еткереп эшләргә тырышам, сөнки тырышлыҡ һәр ерҙә кәрәк. Шундай вазифалы урындарҙы ышанып тапшырғандарға рәхмәтлемен. Тағы яҙмышымды яҡтыртыусы өс остазыма - Хәснитдин Хәйбулла улы Хәмитовҡа, Азат Сәлимйән улы Вәлиевҡа һәм Зиннур Ғәбәйҙулла улы Йәрмөхәмәтовҡа рәхмәтлемен. Ошо өс кеше тормошома ҙур йоғонто яһанылар. Директорҙың уҡыу буйынса урынбаҫары Вәкил Исмәғил улы Хажиндың да ваҡытында ярҙамы ҙур булды.

Сибай институты Урал аръяғының үҫеше өсөн ҙур миссияға торошло уҡыу йорто, уның булмауын хәҙер күҙ алдына ла килтерерлек түгел. Ул асылған ваҡытта милли кадрҙарға ихтыяж шул тиклем ҙур ине. Башта шундай оло вазифаға тәғәйенләүҙәренә аптыраным, әммә әҙер инем, сөнки алты йыл урынбаҫар булып эшләүем күп нәмәгә өйрәтте: коллективты беләм, маҡсаттар аныҡ, контингент бар, нимә эшләргә икәнен дә күҙаллайбыҙ, ҡурҡмай, башланған юлды яңы шарттарҙа дауам итергә кәрәк. Бигерәк тә фән өлкәһенә ҡағыла был йүнәлеш. Әле нейропсихология һәм нейропедагогика лабораториялары булдырҙыҡ. Сибай институты коллективы шул хәтлем татыу ойошма, бында уҡытыу менән бер рәттән, тәрбиә эшенә лә ҙур иғтибар бүленә, беҙ бер ғаилә һымаҡ туплангһыбыҙ. Беҙҙә бит уҡытыусылар институтҡа килеп уҡытты ла ҡайтты түгел, улар студенттар менән төрлө сараларҙа ла ҡатнашалар, спартакиада, конференцияларҙы бергәләп әҙерләйҙәр. Ғаилә принцибы юғары уҡыу йортон тотороҡло итә. Ҙур юғары уҡыу йорттарында былай эшләп тә булмайҙыр, ҙурыраҡ булһаҡ, кем белә, бәлки, беҙ ҙә шулай бер ҡалыпта булыр инек, һәр студентҡа иғтибар бүлеп өлгөрөп булмаҫ ине. Беҙҙә, мәҫәлән, студенттарҙың дәрес ҡалдырмай уҡыуына ҙур иғтибар бүленә. Үҙ-ара һаулыҡ һорашыу институтта ныҡ ғына матур йола булып һанала, ситтән килгәндәр быға шунда уҡ иғтибар итә. Шуныһы ҡыуаныслы, уҡып бөткәс, бөтәһе лә рәхмәт әйтә, 5-10 йылдан осрашыуға килгәндәрендә хөрмәтләп иҫкә алалар - беҙҙә мөнәсәбәттәр шулай ҡоролған.

✓ *Берәй проблема сыҡһа, эше алға китмәһә, әллә атайҙың үсен алып, әллә башҡа сәбәптән, әсәйем беҙҙе һыҙыра, унан да яманы: "Ҡороғорҙар, йәлсемәгерҙәр, фәлән-фәләндең (атайымдың инде) эшкинмәгән көсөктәре" - ти.*





## Эштең еңеле булмай

Һәр кемгә кешелекле булырға тырышам, тормошта бит төрлө хәлдәр була. Мәҫәлән, имтихандарҙы өнәп етмәйем, сөнки баһалағанда йәлләү тойғоһонан һаман ҡотола алмайым. Студентты баһалағанда, директор булараҡ, уҡыу йортон да баһалаған һымаҡ килеп сыға бит. Ә мин институттағы һәр кемде белергә, улар менән яҡшы мөғәмәләлә булырға тейеш: студентмы ул, уҡытыусымы, слесарь булһынмы. Ситтән килгәндәрҙе ҡунаҡ итеп хөрмәтләп йылы ҡабул итергә тейешмен. Дөрөҫөндә, директор вазифа ғына - ул бөгөн бар, иртәгә - юҡ. Күпме йәшәребеҙҙе алдан белмәйбеҙ, шул тормошобоҙҙа кеше булып ҡалырға тейешбеҙ. Бөгөнгө ваҡыт ҡыҫымында бигерәк тә һәр минуттың ҡәҙерен белергә тейешбеҙ.

Йәш быуынды тәңкитләргә яраталар, юҡсы, бик тә үҙенсәлекле быуын үҫә. Тормоштағы ваҡиғалар үҫеше шәхсән һәр кемдең үҙенән тора. Директор булһам да, дәрестәр ҙә алып барам, сөнки студенттар менән эшләргә яратам. Ситтән тороп уҡыған өлкән ағайҙар менән аралашыуҙы ла яҡын ҡабул итәм, теләк менән уҡытам. Спортты яратам, волейбол, теннисҡа өҫтөнлөк бирәм. Ғаиләбеҙ менән өй төҙөйбөҙ, ул да ваҡытты күп ала. Вазифалы урында эшләгәс, көнөтөнө бәйләнештә булырға тейешмен, яуаплы эштән ҡасырға ярамай. Ғөмүмән, еңел эш бармы икән? Ҡапҡа төбөндәге һаҡсыны, көнө буйы буш ултыра, тиҙәр. Хәләндән килһә, шулай ултырып ҡара, аҙаҡ әйтерһең...

## Ғаиләм - ҡәлғәм

Мин педколледжды тамамлаған йылда 20 йәшемдә өйләндем. Әле улыбыҙға 23, ҡыҙыбыҙға 15 йәш. Ҡатыным һөнәре буйынса башланғыс кластар уҡытыусыһы, бөгөнгө көндә педколледжда уҡыта. Улыбыҙ Өфөлә БДУ-ны тамамлап, инженер-механик һөнәрен үҙләштерҙе, заводта эшләй, магистратурала уҡый, ҡыҙыбыҙ мәктәптә уҡыусы. Ғаиләмә, ҡатыныма рәхмәтлемен, өс йыл буйы аспирантурала уҡыуымды тыныс кисерҙеләр.

Ҡайҙа эшләһәм дә, урам һепереүсеме һин, уҡытыусымы, эштән һуң ғаиләңә ҡайтаһың. Был тормошта иң мөһиме - ғаилә. Ғаиләм булғанға ла тормошомдан ҡәнәғәтмен, шуға күрә ҡыуанып яратҡан эшемә барам, ғаиләмде һағынып ҡайтам. Был бурыс түгел, ә күпкә юғары күңел торошо. Ошо институтта уҡыным, үҫтем, күп кенә класташтарым, төркөмдәштәрем бында эшләй. Сибайҙы, Башҡортостанды күтәрәбеҙ тип тырышабыҙ - был матур һүҙҙәр һөйләү түгел, иң мөһиме - илһөйәр булып, тыуған еренә тоғро булып тырышып эшләргә кәрәк, сит ерҙәрҙә эшләүселәр табылыр. Бәлки, былар бөтәбеҙ өсөн дә билдәле нәмәләрҙер, әммә әҙерге-бәҙер, алма беш, ауыҙыма төш, тип йәшәргә ярамай. Мәҫәлән, беҙ студенттар өсөн уҡырға бөтөн шарттар булһын тип тырышабыҙ - улар ғаиләләренән сығып киткәндәр икән, беҙ уны алыштырырға тейеш!

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Илдар Сәлихйән улы һөйләшкән ваҡытта "беҙ" тигән зат алмашын йыш ҡуллана. Бәлки, шуғалыр, эш урынында ла, ғаиләһендә лә, ғөмүмән, тормошонда уңыштар уның артынан ҡалмай эйәреп йөрөй. "Мин", тип йәшәһә, төрлө юлдар менән уңыш артынан үҙе йүгереп йөрөр ине...**

Радик ӨМӨТҠУЖИН яҙып алды.

# ҺОРАЙ БЕЛ

**Өләсәйем әйтер ине: "Аллаһтан һәр нәмәнең хәйерлеһен, файҙалыһын, бәрәкәтлеһен, шифалыһын һорағыҙ... Шул-шул нәмәнең башы ла, уртаһы ла, ахыры ла хәйерле булһын, тип һорағыҙ, ялбарығыҙ..." - тиер ине. Бала аҡылы был доға-теләктең төбөндә ниндәй фәлсәфә ятҡанын аңлар хәлдә булмаған, күрәһең...**

Йәшәйештең асылын, ғүмерҙәрҙең аҫыл икәнен йәшәй-йәшәй аңлайбыҙ. Дини ғилемебеҙ юҡлығы ла бәкәлгә һуға. Яңыраҡ Бөрйәндә яуып үткән борсаҡ һәм тауҙарҙан тупраҡ йыуып төшөргән (көрән ағыу) иҫ китмәле ямғырҙың сәбәпсеһе лә беҙ, кешеләр, түгелме? "Ямғыр юҡ, ямғыр яумай, нығ итеп яуһын ине..."- тинек тә йөрөнөк. Ишетте. Бирҙе ямғырын. Нығ итеп. Ауыҙҙы йырғансы, ағыҙғансы.

Бөгөн һүҙ, йәғни мәғлүмәт заманында йәшәйбеҙ. Ауыҙҙан сыҡҡан һүҙгә лә, теләгән доғаға ла иғтибар юҡ. Уйламай һөйләгән - ауырымай үлгән, тигән әйтем тап беҙҙең хаҡта шул.

Теге мәл бер ҡатын менән һөйләшеп торҙом: "Һүҙ һөйләгәндә лә иғтибарлы булыр кәрәк икән, отпуск алып, ғүмерҙә күрмәгән берәй ҡалаға барыр кәрәк ине, тип һөйләнә лә йөрөй инем. Быйыл отпуск мәлендә армияла йәрәхәт алған улым эргәһенә барып ҡайтырға тура килде", - ти.

Тағы бер осраҡ: беҙҙең ауылдан бер ҡыҙ "Өфөләге Салауат Юлаев һәйкәлен бер күҙем менән генә күрһәм дә риза булыр инем", тип хыяллана. Хыялы тормошҡа аша - Өфөгә барғанда ҡышҡы сатлама һыуыҡ була, машина тәҙрәһен бармағын баҫып ҡына иретеп, Салауат Юлаев һәйкәлен һыңар күҙе менән генә ҡарап үтә ала...

Иҫке Собханғолға күсеп килгәс, фатирҙан фатирға күстек. Намаҙҙан һуң гел: "Эй, Аллам, минең бәләкәй генә ерем менән бәләкәй генә өйөм булһын ине ошонда", - тип теләнем. Теләгәнемде бирҙе Аллам - 4 сутый ғына ере менән 5х5 өй һатып алдым, әле йәшәгән өй һуңынан һалынды...

Ҡыҫҡаһы, теләк теләгәндә, доға ҡылғанда, бик иғтибарлы булырға кәрәк - Ишетеүсе, Ҡабул ҡылыусы, Яҙмыштарҙы хәл итеүсе бар доғаны ишетә! Һәр уй материалләшә, уйнап һөйләһәң дә, уйлап һөйлә, ти халыҡ.

# АҠЫЛ - АЛДАН...

**Бер ғибрәтле хәлде бәйән итмәксемен. Бынан бер нисә йыл элек бер апай һөйләне, гәзит кешеһенең, бәлки, кәрәк булыр, тине. Балаларын яңғыҙ тәрбиәләгән бер ябай ауыл ҡатынының ҡыҙы ине ул. Үҙенең яҙмышын бәйән итте. Ғибрәтле, хатта аяныс ине уға насип тәҡдир.**

"Атайым беҙҙе, 4 балаһын ташлап, икенсе ҡатын менән сығып киткәс, әсәйем бөтә донъяның асыуын беҙгә төшөрҙө, ахыры. Көндәше менән ярышып, уғата сәмләнеп донъя көттө, - тип һөйләп китте апай. - Уға ла рәхмәт - бирешмәне, һынманы, яҙмыш һынауҙары алдында һығылып төшмәне. Беҙҙе кеше итергә, уҡытырға тырышты. Эш тураһында әйтеп тораһы ла түгел - беҙ эшләмәгән эш ҡалманы. Иң аянслыһы, атай тигән кеше икенсе ҡатынына шул хәтлем әүрәне - донъяла 4 балаһы бар икәнлекте бөтөнләй онотто. Уның өсөн ят бауыр булдыҡ та ҡуйҙыҡ.

Билдәле, донъя булғас, төрлө хәлдәр була. Берәй проблема сыҡһа, эше алға китмәһә, әллә атайҙың үсен алып, әллә башҡа сәбәптән, әсәйем беҙҙе һыҙыра, унан да яманы: "Ҡороғорҙар, йәлсемәгерҙәр, фәлән-фәләндең (атайымдың инде) эшкинмәгән көсөктәре", - тип әрләй-ҡарғай ине.

Ыҙалаһаҡ та, беҙ ҙә ҙурайҙыҡ. Тик әсәйҙең әр-ҡарғыштары төштө - ғаиләләге бер бала ла уңманы. Ҡустыбыҙ эсеп үлде, ағай ҡатынын айырып, яңғыҙ ҡартайҙы, ике балаһын үҙенән алда ер ҡуйынына һалды. Беҙ, ике ҡыҙ ҙа, уңманыҡ - икебеҙҙең дә ирҙәр эсә, болара, тормошобоҙ, күпме тырышһаҡ та, алға бармай. Әсәйҙең доғаһы ҡабул булды - ҡороноҡ, йәлсемәнек. Һин бит гәзиткә яҙаһың, ошо беҙҙең хәлде яҙ әле, бәлки, башҡа әсәйҙәргә ғибрәт булыр. Ғөмүмән, кешеләр кешене ҡарғамаһын, бәддоға ҡылмаһын..." - тип һүҙен тамамланы апай.

Был серҙе әсемдә оҙаҡ ҡына йөрөттөм. Бөгөн килеп мөҙҙәте тулды - һеҙгә бәйән иттем.

Билдәле, бала - ата-әсә мөнәсәбәттәре һәр заманда ҡатмарлы булып ҡала килә. Бушҡа халыҡ "Ата - улын, инә ҡыҙын танымаҫ", тип мәҡәл ижад итмәгән. Бәгзе саҡ ҡыҙып китеп балаларыбыҙға әллә ниндәй һүҙҙәр әйтеп ташлайбыҙ. Ошо асыулы саҡтағы һүҙҙәребеҙ, доға булараҡ, Аллаһ тарафынан ҡабул ителергә мөмкин. "Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ", тигән мәҡәл дә ошоға ишара. Һүҙгә, ауыҙың эсендә саҡта, һин хужа, ауыҙыңдан сыға икән, ул һиңә хужа.

Ата-әсә өсөн иң ҙур ҡайғы - бала ҡайғыһы. Бәгзе саҡ, үҙҙәре лә һиҙмәҫтән, ата-әсә үҙ балаһына насар яҙмыш юрай. Ата-әсә доғаһы ла, бәддоғаһы ла (ҡарғышы) уның балаһының артабанғы яҙмышына ҙур йоғонто яһай ала.

Риүәйәттәр нимә ти? Бер хажи Ҡәғбәтулланың һаҡсыһы менән танышып китә. "Һин нисек Ҡәғбәнең һаҡсыһы булып киттең?" - тип һорай тегенән.

"Әсәйем миңә асыуланғанында һәр саҡ: "Аллаһ һинән Ҡәғбәтулланың һаҡсыһы яһаһын", - ти ине, ти һаҡсы. - Йылдар үткәс, яҙмыш ҡушыуы буйынса, мин Ҡәғбәтулланың һаҡсыһы булып киттем".

Балаларға яҡшы доға - Бәйғәмбәребеҙ сөннәте. Беҙҙең матур доғаларыбыҙ балаларыбыҙҙы бәхетле итеүгә һәләтле. Балаларыбыҙ беҙгә ҡарата һәр саҡ ягымлы, итәғәтле булмай китһә лә, әр һүҙҙәре урынына матур доға яуҙырайыҡ уларға. Ул саҡта Аллаһ рәхмәте менән уларҙың холҡо ла ыңғай яҡҡа үҙгәрер.

Бәйғәмбәребеҙ, саллал-лаһу ғәләйһи үә сәлләм: "Ата-әсәһенән ризалыҡ алмаған Аллаһ ризалығына ирешмәҫ", - тигән.

Риүәйәттәр буйынса, бөйөк ғалим һәм хәҙистәр белгесе Тирмизи йәш сағында тыуған яҡтарынан ситкә китеп ғилем алырға теләгән. Әммә әсәһе уны ебәрмәгән: "Эй, улым, мин яңғыҙ, ауырыу, һин бит минең ярҙамсым, мине кемгә ҡалдырып китәһең һуң?" - тигән. Тирмизи әсәһен ҡалдырып китә алмаған. Хыялын бойомға ашыра алмағанына нығ ҡайғырған ул. Бер мәл уға бер ҡарт осрап, уны уҡытырға теләүен белдергән. Егет риза булған һәм тиҙҙән үҙен Хызыр Ильяс уҡытыуын аңлаған. Ҡарт Тирмизи менән өс йыл буйы шөғөлләнгән. Өсөнсө йылына Тирмизи: "Был бөйөк рәхмәт миңә әсәйемдең доғаһы арҡылы килде", - тигән. Бәйғәмбәребеҙ әйткән: "Өс кешенең доғаһы ҡабул булыуға шик юҡ: ҡыйырһытылған (рәнйетелгән) кешенең, юлсының (мосафирҙың) һәм ата-әсәнең балаһына ҡылған доғаһының".

Риүәйәттән билдәле булыуынса, тәфсир белгесе Замахшари һыңар аяҡҡа сатан була. "Ни өсөн был хәлгә ҡалдың?", - тип һорағастары, ул былай ти: "Бала саҡта мин турғайҙы тотоп алып, уның тәпәйенә еп бәйләп уйнаттым. Бер мәл турғай ярыҡҡа инеп китте. Унан сығарам тип, мин уның тәпәйен өҙөп алдым. Ошоно күргән әсәйем: "Һин ошо ҡошто аяҡһыҙ ҡалдырған кеүек, Аллаһ һине лә аяҡһыҙ ҡалдырһын", - тине. Уҡырға китеп барғанда аттан ҡолап, мин аяҡты һындырҙым", - ти.

Асыуҙан алда аҡылың йөрөһөн, тигән боронғолар. Ошоно тотоп, балаларыбыҙға күпме генә йән көйгән саҡта ла уларға бәддоға түгел, матур, йөкмәткеле доға ҡылайыҡ. Үҙебеҙ ҙә бала ҡайғыһынан имен булырбыҙ.

# БӨЙӨК ТӘ, КӨЙӨК ТӘ...

**Һүҙгә, һинең ауыҙыңда саҡта - һин хужа, ауыҙыңдын сыҡһа, ул һиңә хужа, тип белмәй әйтмәйҙәр инде. Ауыҙҙан яңылыш ҡына ысҡынып сыҡҡан бер һүҙең мейеңде серетер мең проблемаға әйләнергә мөмкин шул. Ә бер өндәшмәй ҡалыуың мең бәләнән аралауы ла бар...**

Кеше һүҙе кеше үлтерә, тип белмәй әйтмәгән халыҡ - бер һүҙ менән үлергә ятҡанды терелтергә лә, өмөтө һүнгәнгә йән өрөргә лә, ҡанатланып ете ҡат күктә осоп йөрөгәнде ҡолата һуғып төшөрөп, ҡанатын ҡайырырға ла була. Һүҙҙең ҡөҙрәте ҙур, мөмкинлеге ҙур шул.

Ғибрәт-фәһем бирерлек нәмәләрҙе "Аҡыл янсығы"на теркәштереп барам - һуңынан фекер әтмәләргә.

...Бииик әүәлге заманда бер бай ҡолдар баҙарында йөрөп ята икән. Бер ҡолдоң эргәһендә туҡтаған был. Тегенең хужаһы: "Ал, ал, бик шәп, егәрле ҡол, ҡулынан килмәгән эше юҡ, үҙе һауһаҡ, тик... Бер генә етешһеҙ ягы бар - ул ғәйбәтсе, ләститсе..."- тигән. "Һы, ғәйбәт тә булдымы бер нәмә, иң мөһиме, эшкә шәп булһын", - тигән дә бай, һатыусы һораған хаҡты түләп, теге ҡолдо һатып алған.

Бер мәл был ҡол яңы хужаһының ҡатыны эргәһенә барған да: " Эй, хужабикәм, һине ирең яратмай, икенсегә өйләнергә теләй. Ул һине эләккәсә кире яратһын тиһәң, төндә йоҡлағанында бысаҡ менән һаҡалынан ике-өс бөртөк йөнөн (сәсен) ҡырҡып ал", - ти. Шунан ир эргәһенә барып: "Эй, әфәндем, ҡатының һине яратмай, икенсегә ғашиҡ, ул һине төндә йоҡлағаныңда бысаҡ менән сәнсеп үлтереп, һинән ҡотолорға уйлай, һаҡ бул", - тип кәңәш итә.

Ир кеше, ҡолонон һүҙен тыңлап, төнөн йоҡлаған кеше булып ята. Бер мәл, ысынлап та, ҡулына бысаҡ тотоп эргәһенә ҡатыны килә лә... иренә эйелеп, һаҡалынан ике-өс ҡылды ҡырҡып алмаҡ була. Юрый йоҡлағанға һалышып ятҡан ир, ырғып тороп, ҡатынын бәреп үлтерә...

Кейәүҙәренең ҡыҙҙарын үлтергәнен белгән ата-әсә килеп етеп, кейәүҙәрен теге донъяға оҙата. Ырыу-ара һуғыш сығып, байтаҡ кеше ҡорбан була...

Кеше һүҙе кеше үлтерә, тип белмәй әйтмәгән халыҡ. Бохари хәҙистәр йыйынтығында Хузайфанан еткерелә: "Мин Бәйғәмбәр саллал-лаһу ғәләйһи үә сәлләмдең, ғәйбәтсе ожмахҡа инмәҫ, тигәнен ишеттем", - ти.

Бәй, баяғы бай һәм беҙҙең күптәребеҙ уйлағанса, ғәйбәт, ләстит ябай ғына гонаһ түгел икән. Бушҡа ғына телдең зыяны тураһында белгән боронғолар унан дарыу - ул өндәшмәү, тип иҫәпләмәгән тиһегеҙме?

Эйе, һүҙ көйөк тә, бөйөк тә, ыу ҙа, ағыу ҙа шул...

Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА.

*✓ Шул саҡ ҡапыл Турайғырҙың ер тетрәтеп кешнәгән тауышы барыһын да селпәрәмә килтерҙе. Илаһи серлелекте юҡҡа сығарҙы. Уңарсы булмай гөпөлдәгән тояҡ тауышы, бейәләрҙең сыңғырлағаны ҡолаҡты ярҙы. Мәхшәр ҡупты.*



Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ

# ТУРАЙҒЫР ҺАБАҒЫ

(Хикәйә)



Иршат менән Зәлиә Садикҡа бер яҡтан һоҡланып, икенсе яҡтан көнләшеп ҡараны. Быны һиңә йәйләүҙә йәшәүсе Садиҡ тигән малай. "Глонас", "ЖПС" тигән программаларҙы яп-ябай һәм дөрөҫ итеп аңлатты ла бирҙе. Быны һиңә йәйләү малайы, хатта иң һуңғы Интернет программалар хаҡында ла белә, белә генә түгел, улар менән һин дә мин эш итә. Ябай рогатка кеүек. Нисек инде уға көнләшмәҫһең.

Садиҡ күҙҙән юғалғас ҡына егет менән ҡыҙ үҙҙәренең эшһеҙ тороуын аңланы. Уңайһыҙланып киттеләр. Зәлиә егетен ҡулынан тартып ялан кәртә яғына ыңғайланы. "Әйҙә, барайыҡ, ярҙамлашайыҡ" тигән ишараһы ла ошо ине. Улар тәүҙә ҡолоҡастар торған кәртә янына килеп барыһы ла тиерлек ҡола төҫтәге кескәй заттарға һоҡланып ҡарап торҙо. Барыһы ла бер атанан, бер әсәнән кеүектәр. Ара-тирә һикерәндәп, уйнап та алалар. Ҡайһылары ҡойроҡ сәнсеп сәнскәкләп, ауан-теүән ырғаңлап та ҡуя. Мәҙәк кенәләр. Шунан Зәлиә Сәлимә янына ярҙамлашырға тип китте.

Иршат Насибулла мулла янына килде. Ҡарт иһә башҡаларҙан айырып бикләп ҡуйылған ҡолоҡастар янындағы бүлемдә торған өс баш йылҡы араһындағы кәртәнең һайғауҙарын тимер сымдар менән нығытып бәйләй ине. Унда ҙур ҡола бейә, ике йәшлек ҡола тай һәм ерән төҫтәге ҡолон тора. Иршат бер ни булмағандай, ҡарт янына килеп һайғауҙарҙы тотошоп ярҙамлаша башланы. Үҙе эйәге менән аттарға ишаралап.

- Олатай, ә нишләп уларҙы айырып бикләп ҡуйҙығыҙ ул? - тип һорап ҡуйҙы.

Ҡартҡа уның һорауы көтөлмәгәндәй булып тойолдо. Ул эшенән туҡтап, һорау биреүсене күҙ һынауы аша үткәрҙе лә:

- Шулай кәрәк булды, улым, ә нишләп был һорауҙы бирергә булдың әле миңә? - тине.

- Әллә, минеңсә, бейә менән тай оло өйөр араһында йөрөһә, ҡолоҡас үҙенең тиҫтерҙәре араһына ҡушылһа, яҡшыраҡ булыр ине тигәйнем дә...

- Мәйелең, кискә тиклем ошонда торһондар ҙа, шунан ҡушырбыҙ... - Насибулла мулла егеткә ниндәйҙер серле мәғәнә менән ҡарап ҡуйҙы. Йылмайҙы.

* * *

Киске һауындан һуң Насибулла ҡарттың тәҡдиме буйынса улы Әнүәр, килене Сәлимә һәм ейәне Садиҡ Ҡаҙыршаға ҡайтып китте. Йәйләүҙә ике екке ат, ике арба, ике пар ҡамытыңғырсаҡ. Ҡайтыусылар туры атты екте. Ҡунаҡтар килгәндән алып аласығында шымып ятҡан Етебал да уларға эйәрҙе. Алып ҡалырға теләгәйнеләр, тотторманы.

Ҡайтыу хаҡында һүҙ сыҡҡас, тәүҙә был өсәү риза түгелдәр ине, әммә мулланың: "Әсәң мунса яғып ҡуйырмын, ҡайтып төшөп китһендәр", - тигән һүҙенән һуң шатланып риза булдылар. Ҡайтыр саҡта Садиҡ "электрон көтөүсе" сыбыртҡыһын - кеҫә телефонын ҡартатаһына тапшырҙы. Ҡарт иһә хикмәтле ҡоралды Иршатҡа тотторҙо.

Шулай итеп, егет менән ҡыҙ күҙ менән ҡаш араһында бер илегә үҫеп киткәндәй булды. Сөнки улар хәҙер йәйләүҙә үҙ кеше. Хикмәтле "көтөүсе сыбыртҡыһы" уларҙың ҡулында. Зәлиә үҙенә ҙурыраҡ булһа ла, йәйләү хужабикәһе Сәлимәнең аҡ халатын кейеп алып, башына килешле итеп яулыҡ ябынды. Уның урыны билдәле инде ҡашығаяҡ тирәһендә.

Әнүәрҙәр ҡайтып киткәс күп тә үтмәне, улар өйөрҙө асып көтөүгә сығарып ебәрҙе. Иршат Насибулла ҡарттың айырым кәртәгә бикләнгән теге өс баш йылҡының икәүһен өйөргә ҡушып сығарғанын көттө. Ҡарт иһә был хаҡта уйламаны ла шикелле. Әллә оноттомо икән? Иҫенә төшөрөргә кәрәк.

- Насибулла олатай, һин кис был өс башты өйөргә ҡушырбыҙ, тигәйнең, әйҙә, уларҙы ла асып сығарайыҡ... - Иршат мөһим эш башҡарған кешеләй, кәртәнең ҡапҡаһын асырға кереште. Насибулла мулла уның ҡулынан тотто.

- Ҡабаланма, улым, өлгөрөрбөҙ. Өйөр ике-өс сәғәт утлағас, кире кәртәгә ҡыуырбыҙ. Шунда быларын да ҡушырбыҙ...

Күп тә үтмәне уларҙы яңы хужабикә самауыр сәйенә саҡырҙы. Өҫтәл артына ултырыуҙары булды, йәйләү янына бортлы "Газель" машинаһы килеп туҡтаны.

- Сибайҙағы супермаркеттан ҡымыҙ алырға килделәр, - тине лә Насибулла ҡарт, машинанан төшөүсе ике ир менән һаулыҡ һорашҡандан һуң йорт артындағы ҡымыҙ бешеү аласығына инеп китте. Өлкән кеше өҫтәл артынан тороп киткәндә ултырып ҡалыуҙы хуп күрмәне Иршат. Ҡартҡа эйәрҙе. Гел тышта барған ваҡиғаларға иғтибар итеп, Иршат менән Зәлиә аласыҡ эсендәге ҡоролмаға күҙ һалырға ла онотҡан икән. Унда ҡымыҙ бешә торған һәм литр ярымлыҡ пластик һауыттарға эсемлек тултырып этикетҡа йәбештерә торған махсус ҡоролма ла ҡуйылған. Шешәләргә йәбештерелгән ҡағыҙҙарға "Насибулла йәйләүе" тип яҙылған. Ике көн эсендә байтаҡ ҡына ҡымыҙ әҙерләнгән. Килеүселәр уларҙы тейәгән арала Насибулла ҡарт йөҙ ҙә егерме һауыт һананы. Тейәргә Иршат та ярҙамлашты. Һауыттар тейәлеп бөткәс, килеүселәрҙең береһе, ҡара мыйыҡлыһы:

- Ярар, олатай, иҫәпләшеү һәр ваҡыттағыса. Аҡсаны һеҙҙең иҫәпкә иртәгә үк күсерербеҙ, - тип ҡарттың ҡулындағы тауар алыуы хаҡындағы накладнойҙы күлдәк кеҫәһенә тыҡты ла, машина нисек килеп туҡтаған булһа, шундай уҡ тиҙлектә китеп тә барҙы.

Эңер төшөр алдынан ир-аттар ҡолоҡастарға бесән сабып алып килергә булды. Насибулла мулла ағас араһындағы әүрәүҙе сапты, Иршат арбаға бесән тейәне. Эш араһында бындай бесәндең ни өсөн "әүрәү" тип аталғанын да белде егет. Баҡтиһәң, ағастар араһында кешене "әүрәтеп" саптырғаны өсөн дә бесән шулай атала икән. "Яланда үҫкән ҡауланға, ҡылғанға бер ни етмәй. Әүрәү бесән кипһә, онталып юҡҡа сыға ла ҡуя. Әүәле ҡарттар "ҡауландан ҡалма, әүрәүгә әүрәмә" тип әйтә торғайны..." тип әүрәү бесән хаҡындағы һүҙен тамамлап ҡуйҙы Насибулла ҡарт. Үҙе ыңғайы бер Иршатҡа күҙ ҡыҫып та ҡуйҙы. Белеп ҡуй, йәнәһе.

Насибулла мулланың һәр һүҙе, һәр ғәмәле хикмәт менән тулы ине. Тик аңлай ғына бел. Иршатмы инде ундай ярым ым-ишараларға иғтибар итерлек егет. Етмәһә, кеҫәһендә шундайын хикмәтле ҡорал барҙа. Ул ҡарт биргән кеҫә телефонына ураған һайын ҡараш ташлап ҡына йөрөнө. Йәнәһе, смс-хәбәр килеп тә, ул күрмәй ҡалмағанмы, өйөр биләмәһенән ситкә китмәгәнме. Уның шулай йыш-йыш телефонға күҙ һалғанын һынап-күҙәтеп йөрөгән мулла, әүрәү сабыуынан туҡтап салғыһына таянды ла:

- Ул тиклем борсолма, улым. Турайғыр шәп беҙҙең. Эңерҙә өйөрҙө әллә ни ситкә алып китмәй, яҡын арала ғына йөрөтә. Эт-ҡоштан аралай, - тип тағы ла һелтәнеүен дауам итте.

Сабып килтергән бесәнде бушатып торманылар. Арбаһын ҡолоҡастар янында ғына туғарғас, уларға һәм айырым торған аттарға бер аҙ бесән ырғыттылар. Шул арала ҡараңғы ла төштө. Насибулла ҡарт йорт янында ашһыу әҙерләй торған тағанлыҡта янған усаҡҡа утын өҫтәне лә, бүкәнгә сүкәйеп ултырып тын ҡалды. Ҡараштары ут ялҡынында. Ул йәштәргә ҡарап бер нәмә лә өндәшмәне. Был хәләте булмышына тағы ла серлерәк мәғәнә өҫтәй. Бына-бына, хәҙер-хәҙер ул ҡунаҡтарына боролоп, ниҙер әйтер ҙә, тағы ла ниндәйҙер хикмәте менән таң ҡалдырыр һымаҡ.

Иршат менән Зәлиә иһә усаҡтан төшкән яҡтылыҡ еткән ерҙә йәйләү тирәһен ҡыҙырҙы. Иршатҡа йорт янынан алыҫ китергә ярамай, сөнки теге электрон көтөүсенең хикмәтле сыбыртҡыһы - кәрәҙле телефон уның кеҫәһендә. Шул ғына тотто уны, юғиһә бер-береһе өсөн йән атҡан ғашиҡтар йәй башында ғына була торған йылы төн ҡуйынына әллә ҡасан олағырҙар ине. Олағырҙар ҙа, үҙҙәре күптән ашҡынып йөрөгән мәлде яҡынайтырҙар ине. Тик әлегә саҡ-саҡ иртәрәк...

Бөгөн уларҙың айырыуса бәхетле көнө. Берҙән, ата-әсәләренең ҡаҡшамаҫ булып тойолған ҡаршылығы емерелде, икенсенән, фәҡәт ошо йәйләүгә килгәндән һуң уларға донъя бөтөнләй икенсе яғы менән асылған кеүек. Насибулла ҡарттың ғына өндәшмәйерәк йөрөүе аңлашылып етмәй. Егет менән ҡыҙ етәкләшеп йөрөй торғас, һиҙмәй ҙә ҡалғандар. Баҡтиһәң, йәйләү йортонан алыҫлашып та өлгөргәндәр. Ай ҡалҡты. Төн ҡояшы сыҡты. Донъя яҡтырып китте. Тап шуның өсөн дә йәштәр йорт янынан алыҫлашып өлгөргән икән.

Туҡта, Насибулла ҡарт уларҙы саҡыра түгелме? Тап үҙе.

- Балалар, ҡайтығыҙ, ҡайтығыҙ, тим. Ҡайҙа киттегеҙ ул?...

Йүгереп барҙылар. Бәй, мулла атҡа менеп тә алған. Өйөрҙө алып килергә бармаҡсы.

- Олатай, мин дә барышырмын тигәйнем. Мөмкинме? - Иршат ҡарт юлланырға ниәтләнгән тарафҡа ыңғайлай ҙа башланы.

- Ярар, Иршат улым, өйөр мынауында яҡында ғына йөрөй. Үҙем апҡайтам. Һеҙ ана ҡыҙым менән оло кәртәнең ҡапҡаһын асып, мине бында көтөгөҙ. Өйөрҙө ҡайырышып индерешерһегеҙ...

Ысынлап та, ун минут самаһы ваҡыт та үтмәне, олаталары өйөрҙө дыһырлатып ҡыуып алып килеп ялан кәртәгә индереп бикләп тә ҡуйҙы. Теге айырым бикле торған өс башты ла өйөргә ҡушырға онотманы. Тик ҡолоҡасты ғына ниңәлер башҡа ҡолондар янына индермәне. Һәр хәлдә, Иршат шуға иғтибар итеп өлгөрҙө.

- Олатай, ҡолоҡасты үҙенең тиҫтерҙәре янына индермәйекме ни? - тине егет кәртә эсендәге башҡа ҙур аттар араһына инеп юғалған ҡолондо күҙҙән ысҡындырып.

- Эй, әттәгенәһе, ярар, иртәнсәк айырырбыҙ. Ярай, балалар, хәҙер әҙерәк серем итеп алайыҡ, булмаһа. Ҡыҙым, һин йорттоң төпкө бүлмәһенә инеп ят. Беҙ Иршат улым менән алғы яҡта баш терәрбеҙ. Таңдан тороп Сәлимә килен тәүге һауынды башлағансы өйөрҙө берәр сәғәткә сығып утлатып та индерергә кәрәк.

Баҡтиһәң, Зәлиә барыһын да алдан хәстәрләп, төпкө һәм алғы яҡҡа урындар йәйеп тә өлгөргән булған. Насибулла мулла тәһәрәтләнеп намаҙын уҡып алды.

- Һай, Зәлиә ҡыҙым, ҡайһылай уңғанһың. Инәйеңдең аҡ һөтөн эскәнһең икән, балам... - Утты һүндереп ятҡас та, шуны ла әйтеп ҡуйҙы Насибулла мулла. - Йоҡлап ҡалырға тырышығыҙ. Мин һеҙҙе таң һарыһында уятырмын.

* * *

Йәштәрҙең икеһен ике бүлмәлә ҡалдырып, уларҙың ниәтенә ҡаршы төшөргә тырышҡан Насибулла мулла яңылышты буғай. Хистәрҙе был ысул менән генә тыйып, нурҙы төн ҡараңғылығына бикләп ҡуйып буламы икән? Уның тыш алышынан йоҡлап киткәнен аңлаған Иршат һурылып ҡына тышҡа сыҡты. Һөйгәне ҡалған бүлмәнең асылмалы тәҙрәһе барлығын көндөҙ үк абайлап ҡуйғайны. Тырнаҡ осо менән генә сиртеүе булды, уның килерен тын алырға онотоп көтөп ятҡан ҡыҙ тәҙрәне асып һөйгәненең ҡосағына ташланды...

Төнгө һауаның йылылығы... Балҡыған йондоҙҙарҙың күплеге... Өнһөҙ серлелек... Телһеҙ илаһилыҡ... Егет менән ҡыҙ етәкләшеп алдылар ҙа, тиҙерәк төндөң ҡараңғылығында юғалырға теләгәндәй, болон буйлап ағастар араһына йүгерҙеләр. Тәүге ағаслыҡ, тәүге ауҡанлыҡ, тәүге йәшел түшәк уларҙыҡы. Хәҙер... хәҙер тап шундай урынға барып етеп тәгәрәйәсәктәр ҙә, онотоласаҡтар. Тап унда уларға бер кем дә ҡамасауламаясаҡ...

Бына улар тәғәйен урынға барып та етте. Тәгәрәнеләр. Тәүҙә йыш-йыш тын алып, күктәге йондоҙҙарға ҡарап, төндөң өнһөҙлөгөн тыңлап яттылар. Иршат һаҡ ҡына һөйгәненең йылы усын ҡыҫып, ҡабырғаһына ятты һәм утлы ирендәрен Зәлиәнең наҙға сарсаған ирендәренә терәне... Шул саҡ ҡапыл Турайғырҙың ер тетрәтеп кешнәгән тауышы барыһын да селпәрәмә килтерҙе. Илаһи серлелекте юҡҡа сығарҙы. Уңарсы булмай гөпөлдәгән тояҡ тауышы, бейәләрҙең сыңғырлағаны ҡолаҡты ярҙы. Мәхшәр ҡупты. Яңы ғына наҙҙа ойоған егет менән ҡыҙ йәшен тиҙлегендә һикереп баҫты. Йәйләү яғынан Насибулла мулланың ҡысҡырған тауышы ишетелде:

- Балалар, тороғоҙ, тиҙерәк. Турайғыр болара...

Иршат менән Зәлиә йән-фарманға йәйләү яғына ҡарай сапты. Улар кәртә янына килеп етте. Ай яҡтыһында кәртә эсендәге хәлде күреп ҡоттары алынды. Өйөр ялан кәртәнең бер яҡ мөйөшөнә һерлеккән. Урталыҡта ҡанһыраған ерән ҡолон ята. Унан саҡ ҡына һулдараҡ ҡола тай өйгәҙәгән. Әллә алғы ҡулы, әллә аяғы һынған, торорға ынтылып-ынтылып ҡарай ҙа, кире ята. Кәртәнең икенсе яғында ярһыған турайғыр ҡола бейәне талай, тешләй, тибә, уныһы арты менән боролоп ике аяҡлап айғырҙың түшен тызый. Был хәл айғырҙы оторо ярһыта ғына. Насибулла ҡарт уларҙы айырырға итә, әммә күҙенә аҡҡара күренмәгән Турайғыр хатта хужаһына ҡарап ажғырырға ла тартынмай. Яҡын да ебәрмәй.

- Иршат, Иршат улым. Ҡапҡаны, ҡапҡаны ас... - Ҡарт өҫтөнә менеп килгән айғырҙан тайшанып кәртә һайғауына уҡ һикереп ултырҙы. - Зәлиә ҡыҙым, йорт

✓ **Яңы сабылған бесәнгә йәйелеп ултырып алған Вәлимә апайға ни рәхәт, донъяһы теүәл, үҙе минең яҡҡа ҡарап тутыйғоштай өҙлөкһөҙ бер үк һүҙҙәрҙе тыҡый: "Сыҙа, малай, тормош шулай башлана!"**



солансаһында элеүле сыбыртҡыны алып кил...

Ҡыҙ менән егет ике тарафҡа уҡтай атылды.

Ҡапҡалар шар асылды. Сыбыртҡы шартлауға тәүҙә башын юғары сөйгән Турайғыр, артынан өйөрө эйәреп сыҡты. Турайғыр кәртәнән ситкәрәк китеп бара бирҙе лә, ҡапыл ер тетрәтеп кешнәп ебәрҙе. Шунан урман яғына табан еңел генә юртып китте. Өйөр уның артынан эркелде.

Ялан кәртәлә тороп ҡалған ҡола бейә тәүҙә йәнһеҙ ятҡан ҡолонон еҫкәп ҡараны ла, шунан өйгәҙеп ятҡан тай янына килде. Уны аяғына баҫырға ярҙам итә алмағас, ҡалайтһын, берсә ҡолоно, берсә тайы янында юртып сабауылланы. Насибулла ҡарт ерҙә ауынаған малҡайҙар янына барҙы. Йөҙө һыҙланыулы ине ҡарттың. Ҡарт берсә ҡолоҡасты, берсә тайҙы тотоп ҡараны ла, кәртә ситендә ҡото алынып ҡатҡан йәштәр янына килде. Ҡола бейә уның артынан эйәрә биреберәк килде лә, ҡолоҡас менән тай янына тағы боролдо. Балаларын аяҡҡа баҫтырырға ярҙам итеүен үтенгәндәр меҫкен әсәй.

- Ай, әттәгенәһе, ҡолоҡас үлгән, тайҙың алғы ҡулын Турайғыр һындыра типкән. Мандымаясаҡ, салып алырға тура киләсәк. Ай, әттәгенәһе, - ҡарт тағы ла ауыҙы эсенән доғамынизер мығырҙап уҡыны ла, - Иршат улым, теге нәмәне, телефонды бир әле...

Бына ул телефондың үҙенә кәрәкле төймәһенә баҫты ла:

- Алло, Әнүәр балам, ҡола бейәнең ҡыҙы ҡаҙаланып ҡуйҙы. Турайғыр ҡолоҡасты тәки талап үлтерҙе. Килеп етмәһәгеҙ булмаҫ, - тине.

Насибулла ҡарттың телефон аша улына әйткән һүҙен ишеткәндән һуң ғына Иршат менән Зәлиә әле генә булған ваҡиғаның фажиғәле асылын аңлай алды. Үҙ күҙҙәре менән күргәндәре сәстәре үрә торорлоҡ булһа, һуңынан, усаҡ янында Насибулла мулланың дауам иткән әңгәмәһе уларҙы тетрәндерҙе:

- Бында айғырҙың һис кенә лә ғәйебе юҡ, балалар. Уның тәбиғәте шундай. Тоҡомоноң таҙа ҡанлылығын һаҡлап ҡалыу өсөн тырыша ул. Һәләк булған ерән ҡолоҡасты ҡола бейә икенсе бер айғырҙан тапты. Шуны Турайғыр еҫкәй торғас тәки үҙенән түгеллеген белеп талай башланы. Башҡорт тоҡомло аттар өйөрөндә тыумаларға урын юҡ. Шуға өйөрҙән айырып ҡуйғайныҡ...

Ошо һүҙҙәрҙе әйтте лә, ҡарт ҡапыл туктап ҡалды. Күҙҙәре йәшкәҙәне. Йәштәр уның артабанғы һүҙҙәрен түҙемһеҙләнеп көттө. Паузаны Иршат боҙҙо:

- Олатай, ә нишләп Турайғыр үҙенең ҡыҙын талай һуң, атаһы була тороп...

- Бына был һорауың дөрөҫ, Иршат улым. Сөнки ҡыҙы ҡонаҡын йәшенә сығып бара. Тиҙҙән ул айғырға ятырға тейеш. Өйөрҙәге башҡа бейәләргә эйәреп кешнәй башлаһа, өйөр башы булған атаһы уға һикерергә тейеш була бит инде. Шуның өсөн дә Турайғыр торғоу мәленән күпкә алда үҙенең ҡыҙын өйөрҙән ҡыуып ебәрә. Китмәһә, талай, хатта үлтерә...

- Үлтерә? - Был һүҙҙәрҙе күҙҙәренә йәш эркелгән Зәлиә әйтте. - Ҡыҙы була тороп үлтерәме ни, олатай?

- Эйе, ҡыҙым...

- Нишләп, олатай? - Зәлиә хәҙер инде һулҡылдауға күсте.

- Тәбиғәте шулай ҡуша. Бер үк төрлө ҡанды йөрөткән туғандар никахлашыуынан зәғиф балалар тыуа. Әүәле беҙҙең атай-олатайҙар дүнәженден тап ошо миҙгелендә уны атаһы-айғырҙан талатмаҫ өсөн икенсе бер өйөрҙәге шундай уҡ йәштәге атҡа алыштырып алып һаҡлап ҡалған. Беҙҙең ундай мөмкинлегебеҙ юҡ, шуға айырып ҡуябыҙ инде...

Шул саҡ һыҙылып ҡына таң беләнә башланы. Насибулла мулланың әңгәмәһе тамам булыуын ғына көткәндәй йорт янына енел машина килеп туҡтаны. Әнүәр, Сәлимә һәм Садиҡ икән. Тиҙ килергә кәрәк булғас, ат егеп тормағандар. Ирҙәр ҡолоҡасты арбаға тейәп күмеп килгәндән һуң ҡаҙаланған дүнәженде бисмиллалап салып тиреһен дә һыҙыра башланы. Садиҡ өйөрҙө иртәнге һауынға алып килергә китте. Сәлимә эсәк йыуырға, ҡаҙылыҡ тултырырға һауыт-һаба әҙерләне. Аратирә мал һуйыу менән булышҡан ирҙәрҙең ҡулдарына йылы һыу ҡойоп китте.

Улар бар эште лә үҙҙәре өйрәнгән ритмда, тиҙ, аныҡ һәм сифатлы итеп башҡара. Ҡолоҡастың һәләк булыуына ла, дүнәженден ҡаҙаланыуына ла өйрәнеп бөткән улар. Улар өсөн хатта төнгө мәхшәр ҙә булмаған төҫлө. Һин дә мин йөрөйҙәр. Хатта берберенә шаярышып һүҙ ҡушып, көлөшөп тә алалар.

Улар хатта Иршат менән Зәлиәгә лә иғтибар итмәйҙәр кеүек. Бындай урында Иршат менән Зәлиә бер генә минут та ҡала алмай. Егет менән ҡыҙ йәйләү хужаларының эш менән мәшғүл булыуынан файҙаланып ҡапыл ғына юҡҡа сыҡты. Турайғыр биргән һабаҡтан һуң ер тишегенә инерҙәй булып оялғайны улар. Ни өсөн уларҙы мулла фәҡәт йәйләүгә саҡырғанын, ни өсөн төнгөләккә айырып ҡуйған өс баш йылҡының өйөргә ҡушылғанын да бер юлы аңлауҙан тетрәнгәйне улар. Үҙ тормоштарында башҡа төрлө тетрәнеүҙәрҙән азат булыр өсөн улар тәүҙә ошо яһай яҙған хаталы аҙымынан тәүбәгә килергә бурыслы. Турайғыр биргән һабаҡ уларҙы гүмер буйы һиҫкәндереп торасаҡ әле.

Йәштәрҙең юҡҡа сыҡҡанын бер сәғәт үткәс кенә аңғарҙы йәйләү хужалары. Насибулла мулла иркен һулыш алды. Әмәле барып сыҡты. Малға килгәндә, ул ҡаҙаланмай тормай, тик әҙәм балаһы ғына бындай ҡазаларҙан алыҫыраҡ йәшәһен. Ҡаҙа тигәндән, мулла таңғы мәхшәр менән онотолоп торған иртәнге намаҙын ҡаза килтереп булһа ла уҡып ҡуйҙы. Ниәт-теләктәр әйткәндә Иршат менән Зәлиәгә лә зиһен яҡтылығы, аҡыл камиллығы теләне.

* * *

Был ваҡытта инде Иршат менән Зәлиә бер-береһенә һүҙ ҡушырға ла тартынып, ауылға табан баралар ине. Ҡыҙ алдан атланы, егет уға эйәрҙе. Ҡайтыу юлының һәр үре, һәр ҡыуағы, һәр йылғаһы таныш уларға. Шулай булмай ни, тап ошо юл менән йәйләүгә барған саҡта Насибулла олаталары уларҙы һағышҡа һалып йырлап барғайны бит. Көҙгә Иршат әрме сафына алынғас, олатаһының "Әрме" йырындағы һағышты тағы ла тәрәнерәк аңлар, ағас араһында үҫкән әрәү бесәнден дә ни өсөн һутһыҙ икәнлеген төшөнөр, ә Зәлиә иһә ҡалалағы институтта уҡый башлағас, үҫмер саҡтағы аңһыҙ һөйөүенән оялып, ауылдағы туғандарына ла күренергә тартынып, йырҙағы "Зәлхизә" һағышына тарыр. Бер төн эсендә тотош быуатҡа олоғайғайны улар.

**(Аҙағы. Башы 26-27-се һандарҙа).**

## УЙМАҠ ХИКӘЙӘЛӘР

*Хәйҙәр ТАПАҠОВ*

# ҠУРСЫУ



Әсәйем ҡаты сирләп киткәс, дарыуҙар һатып алыу маҡсатында бер йәшлек үгеҙебеҙҙе колхозға тапшырырға булып киттек. Тик бәлә шунда: малды беҙҙә түгел, ауылыбыҙҙан 25-30 саҡрымдар самаһы ситтә ятҡан Бараҡал фермаһында ҡабул итәләр икән дәбаһа. Әсәйем түшәгенән ҡалҡып ултырып мине янына саҡырҙы:

- Балам, һин хәҙер үҫкәнһең, башыңа аҡыл да ингән, әллә иртәгә таң менән үр оста йәшәгән Вәлимә апайың менән Бараҡалға барып ҡайтаһығыҙмы? Әле генә ул инеп шул хаҡта тумбытып сыҡты, һыйырын апарып тапшырыу өсөн атын да, оҙон арбаһын да йүнләгән. Тәртәнең бер яғына һыйырҙы, икенсе яғына беҙҙең үгеҙҙе тағырһығыҙ ҙа юлланырһығыҙ. Аҡсаны шунда уҡ ҡулға бирмәйҙәр икән, һуңғараҡ һаҡлыҡ кенәгәһенә күсерәләр, йәнәһе лә. Билдәле, унда ни йүнле аҡса юҡ, тиндәр генә. Ныҡ алыҫ ара түгел, тәүәккәлләп барып киләһеңме әллә, балам, ә?

Үҫкән, башыма аҡыл ингән кеше булараҡ, баш тартманым, ризалашмай ни хәл итәһең, хәҙер инде сирләп киткән әсәйем, өләсәйем, кесе апайым, кәртә-ҡура тирәһендәге һыйыр, үгеҙ, әтәсен ҡушып хисаплағанда ун ике бөртөк тауыҡ, аталығы менән һигеҙ оя ҡаҙ, этебеҙ Алғыр, бесәйебеҙ Ҡупшыҡай, һалам ҡыйыҡлы өйөбөҙ башындағы арҡыры һайғауға көнө ҡоро түгел теҙелеп ҡунған күгәрсендәр, турғайҙар минең ҡулға ғына ҡарап торалар.

Иртә таң менән көтөү ҡыуырҙан алда Вәлимә апай аты менән беҙҙең өй янына килеп туҡтаны ла бойороулы һөрәнләп тә ебәрҙе:

- Апсығып тәртәгә бәйлә үгеҙеңде, бара һалайыҡ, бөгөн борологоҙ тине ат хужаһы Әбдерәхмән!

Күрше Ғизелхаҡ, Рифмир ағайҙар менән тиҫкәре үгеҙҙе илла-аллаға алып сығып, атҡа мисәп бәйләнек.

Ҡуҙғалып киттек. Вәлимә апай дилбегә тотҡан, минең төп бурыс - алмашлап, үгерә-атлай арбаның ике яғына сығып, һыйыр менән үгеҙҙе сыбыҡлап ҡыуыу. Ылдый атлаған һыйырҙы сәбәпһеҙгә, эсемдә ҡайнаған асыуымды уға ғына төшөрөп һуҡҡылап алам, тиҫкәре үгеҙгә ҡағылырға ҡул бармай, яҡшымы-яманмы, ни тиһәң дә, үҙебеҙҙеке бит! Оҙаҡ барҙыҡ, бик оҙаҡ, минә ҡалһа, яҡты донъяға ошо арбалы алаша, өҙлөкһөҙ дилбегә ҡаҡҡан Вәлимә апай, һыйыр-үгеҙ менән теҙәктән, бер-бер артлы килеп тыуғанбыҙ ҙа ыҙалай-йонсой билдәһеҙлеккә йүнәлеп, мәңгелеккә тоҫмаллап китеп барабыҙ һымаҡ. Арҡам буйынан шыбырлап тирҙәрем аға, биттәрем эт ҡарағыһыҙ булып юл туҙанына буялып бөттө, иҫке, морондары тишек сандалийҙарымдың эсенә тулған ҡырсынташ табандарымды дыулата.

Яңы сабылған бесәнгә йәйелеп ултырып алған Вәлимә апайға ни рәхәт, донъяһы теүәл, үҙе минең яҡҡа ҡарап тутыйғоштай өҙлөкһөҙ бер үк һүҙҙәрҙе тыҡый:

- Сыҙа, малай, тормош шулай башлана!

Төш ауыуға Бараҡалға барып еттек, мал ҡабул итеү пунктын эҙләп таптыҡ. Төп ауырлыҡты атҡарған кеше булараҡ, беренсе булырға ынтылып йүгерә-атлай үгеҙемдең арҡанына барып йәбештем. Мал ҡабул итеүсе һарыһына ҡатҡан өлкән йәштәге урыҫ менән үгеҙҙе ҡыуалап индереп, тирәяғы ҡамалған ҙур үлсәгес артына баҫтырҙыҡ. Малымды ҡулай үткәреү маҡсатында ыңғайлы бер хәбәремде һөйләп торам:

- Наш бышук, килеп тороп кәр, жирный!

- Что ты сказал, пацан?

- Харуший гавару, прәме түп-түнәрәк, круглый!

- Не учи, не подсказывай, вижу!

- Нит ты, внимателне, харашо пасматри!

- Отстань, говорю, торгаш несчастный!

Мал ҡабул итеүсе төп шөгөлөн тамамлағас, яҙырға керешеп китте. Мин дә башыма аҡыл ингән кеше булараҡ, үлсәгестәге һандарға ҡарап тексәйҙем.

- Ты что, мне не доверяешь?

- Дәвирәй, но проверәй! Килаграм вижу, скулько грам?

- Ну ты, мелочная душа, зачем тебе деньги?

- Мама хварает, личит ево наҙы!

- Теперь все понятно! - Мал ҡабул итеүсе мине аңлағандай итеп яратып ҡараны. - Давай мы с тобой эти граммы округлим и напишем килограмм, согласен! - Яҙып бөткәс, иң аҙаҡтан миңә ҡарап ҡулын һондо. - Сберегательную книжку привез, вернее принес? Давай сюда! - Кенәгәләге яҙыуға ҡарағас, йәнә өҫтәп ҡуйҙы. - Оказывается ты очень богат-ый человек!

- Шибке богатый! - тип яуапланым.

Эшебеҙҙе осланыҡ та ир кеше булараҡ дилбегәне тотоп, Вәлимә апай арҭҡараҡ ултырып ҡайтырға сыҡтыҡ. Теге, үгеҙ хаҡына торошло ҡиммәтле яҙыулы ҡағыҙҙы башыма кейгән фуражкамдың эсенә һалғанмын да өҙлөкһөҙ алып ҡарап, уның теүәллеген тикшерәм.

Вәлимә апай йылмайып ҡуя:

- Төшөп ҡалмағанмы?

- Юҡ, урынында! - тим.

Шул малайҙың ҡылыҡ-фиғеле, сәстәремә сал ҡунғас та үҙгәрешһеҙ ҡалды - барлыҡ туғандарымды, яҡындарымды күңелемдең түренә һалғанмын да ҡайта-ҡайта уларҙың имен-аманлыҡтарын тикшерәм, шул рәүешле уларҙы ҡурсыйым, һаҡлайым. Әүҙемсе? Уныһы мөһим түгел, теге саҡ Вәлимә апай әйтмешләй, тормош шулай ғына башланмай, әле лә, элеккесә дауам итә!

# ҠАРА ИКМӘК



Ҡайтышлай тауҙар ҡуйынына һыйынып ятҡан бәләкәй генә ауылда туҡталдыҡ. Танышыбыҙ ҡаршы алып, хәл-әхүәл белешкәс, ҡатыны менән шыш та быш килеп ҡабалан ғына һөйләште лә шунда уҡ сығып та юғалды. Хужабикә матур өҫтәл хәстәрләне лә, көтөп-көтөп тә тегеһе күренмәгәс, аҡланғандай әйтеп ҡуйҙы:

- Беҙҙә бәләкәй генә кибет эшләй, шуның һатыусыһы әмәлгә баҡҡандай тауар артынан район үҙәгенә киткәйне, һаман ҡайтмағандыр...

Һуңлап ҡына ир күренде лә үртәлгәндәй ҡул һелтәне:

- Өйөбөҙҙә булмағас, ауыл буйлап йөрөп таба алманым. Һыйлап ҡайтармаҡсы инек.

- Сәй табыны артында рәхәтләнергә өлгөрҙөк, бар ниғмәттәр алдыбыҙҙа булды.

- Һыйыбыҙҙы йәмләгән нимәне өҫтәргә ине иҫәп.

- Уныһы нәмә тағы?

- Шул араҡы инде...

- Минең ул нәмәне ауыҙыма алмағаныма биш былтыр.

- Эш ундамы ни, өйрәнелгән ғәҙәт, нишләтәһең...

Ҡапҡа тышына оҙатырға сыҡҡан ир кәйефһеҙ, ҡатыны унайһыҙланған ҡиәфәттә тороп ҡалдылар.

Беҙҙең килгәнде ишеткән бер инәй юлыбыҙға арҡыры сығып, ауыл осондағы тауыҡ кәтәгелә генә торлағына бороп индерҙе. Яҡты йөҙ, йылы һүҙ менән, шартына килтереп бешергән ыумасты ашъяулыҡ йәйеп ебәреп урындыҡ уртаһына ҡуйҙы, арыш икмәген киҫте. Ят, әммә танһыҡ аш теленде йоторлоҡ тәмле ине.

Беҙҙең халыҡ әүәле эсмәгән, төптәнерәк фекер йөрөтһәң, һәммәбеҙҙә лә әпәкәй әҙәм итте, ир еткерҙе. Әнғәм ағай Атнабаев яҙғанса:

Беребеҙ ҙә ҡуктән төшмәгәнбеҙ,
Ҡара икмәк ашап үҫкәнбеҙ...

Табыныбыҙҙың түренә беҙҙең яҙмышыбыҙҙы, тормошобоҙҙо емергән араҡыны түгел, ҡәҙерләп, ҙурлап иң әүәл ана шул ризыҡты ҡуйһаҡ ине.

ИНТЕРНЕТТАН



# СЕРӘКӘЙ КЕМДЕ ЯРАТА

■ Йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре менән яфаланыусыларға йәйге эҫелә ҡәһүә эсергә кәңәш ителмәй. Был турала табип-диетолог Михаил Гинзбург белдерә. "Әгәр ҙә кешелә гипертония бар икән, тимәк, йөрәк эшмәкәрлегендә тайпылыштар бар, шуға ла был эсемлектән баш тартып тороу яҡшыраҡ, сөнки ҡәһүәнең йөрәккә тәьҫире бар", - ти ул. Ҡайнар эсемлектән һуң ҡайһы бер кешеләрҙә йылылыҡ көйләнеше боҙола, тик бында ҡәһүә генә түгел, сәй ҙә зыян итеүе бар, сөнки уны беҙ йыш һәм ҙур һауыттан эсергә күнеккәнбеҙ.

■ Психологтар кәйефең булмаһа ла, тыштан гел йылмайып торорға кәңәш итә. Йәнәһе, ауыҙ көсләп булһа ла йылмая икән, уның эске торошҡа ла яҡшы тәьҫир итеүе бар. Кеше билдәле бер эмоция кисереү менән бәйле мимик мускулына көсөргәнеш төшөрә икән, ысынлап та ошо хисте кисерә башлай тигән теория, ысынлап та, бар. Шуға хатта механик рәүештә йылмайыу кәйефте яҡшырта ала. Әммә бының да нескәлектәре бар. Стэнфорд университеты ғалимдары ошо проблемаға арналған 138 эште тикшереп, ҡайһы бер кешеләргә ыңғай тәьҫир өсөн ошоноң да етеүен билдәләгән. Тәжрибәлә 19 илдән 4 мең кеше ҡатнашҡан. Улар йылмайырға тейеш булған, тик кемдәргәләр быға өлгәшеү өсөн экранда төрлө сөжеттар күрһәткәндәр, тормоштарынан матур ваҡиғаларҙы иҫләргә кәңәш иткәндәр, кемдәрҙер ручканы ауыҙына ҡабып торған. Һуңғы вариант яһалма йылмайыу тыуҙырыу өсөн кәрәкле мускулдарҙы хәрәкәткә килтергәне өсөн иң ышаныслы вариант, әммә ҡалған ысулдарға ҡарағанда ул иң насар тәьҫир күрһәткән. Тимәк, йылмайыу кәйефте күтәреһен өсөн йылмайып ҡарау ғына ярҙам итмәй, быының өсөн дөрөҫ эмоциональ фон да кәрәк.

■ Серәкәй тешләүенә ҡайһы берәүҙәр бирешеп бармаһа ла, кемдәрҙелер ул ныҡыраҡ тешләй. Баҡтиһәң, бында кешенең тир еҫе "гәйепле" икән. Биологтар Замбияла тикшеренеүҙәр үткәреп ҡараған. Африка малярия серәкәйҙәре кемде ныҡыраҡ тешләүен асыҡларға тырыша. Махсус майҙансыҡҡа ҡоролған 6 палаткала кешеләр йоҡлай, ә уларҙың тән еҫен насос һәм трубкалар аша кеше тиреһенә оҡшатып яһалған туҡымаға тоташтырып, уны палатканың тышына сығарып ҡуялар. Серәкәйҙәрҙең иң әүҙем ваҡыты 22.00 һәм 02.00 сәғәттәргә тура килгән. Асыҡлаһыуынса, тир менән карбон кислотаһы күп бүленгән кешеләрҙе серәкәйҙәр ныҡыраҡ "ярата" икән. Шалфей менән эвкалипт еҫе сығып торусыларҙан, киреһенсә, ҡасалар. Ғалимдар был асышты репеллент яһауҙа ҡулланырға буласаҡ, тип белдерә.

■ Ҡыяр менән томаттан яһалған салат йәйге ризыҡтар араһында иң популяры. Тиҙ ҙә, йәшелсәләр ҙә күп ваҡыт. Әммә уларҙы бергә ашарға ярамай тигән фекер ҙә бар, йәнәһе, томат әсе мөхит, ә ҡыяр - һелтеле. Диетолог, гастроэнтеролог Ирина Бережная быны миф тип белдерә һәм был йәшелсәләр, киреһенсә, бер-береһенә тура килә, ти.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# ҮӘТ, АФАРИН ИНӘЙ!



**Дәүләкән районының Көрмәнкәй ауылынан Фәһимә Солтанова үҙенең УАЗ "Буханка" автомобилен махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан һалдаттарға биргән.**

"Үҙебеҙ һуғыш балалары, аслыҡты ла, яланғаслыҡты ла күп күрҙек. Балаларҙың һәр береһенең машинаһы бар, уны кем йөрөтә! Нисә йыл тик торҙо. Ауыл советы менән һөйләштек тә, СВО-лағы егеттәргә ебәрергә булдым", - ти Фәһимә инәй. Көрмәнкәй ауыл советы башлыҡы Дамир Дәүләтов әйтеүенсә, машинаны ошо ауыл егеттәре хеҙмәт иткән подразделениеға тапшырғандар.

Был район халҡының яҡташтарына берҙән-бер ярҙамы түгел. "Асылыкүл" гәзите яҙыуынса, Ҡоръятмаҫ ауылы старостаһы Фәнир Халиҡов махсус хәрби операция зонаһына ике автомобиль гуманитар ярҙам илткән. Һуңынан яугирҙар әйтеүенсә, иң тәмлеһе тыуған яҡтан ебәрелгән икмәк булған.

# ЕРӘН СӘСЛЕ МАЛАЙҘАР



**Ерән сәсле, һипкелле йәтеш кенә был малайҙарҙы Асҡарҙың "Батыр" физкультура-һауыҡтырыу комплексында уҙған мәктәп уҡыусыларының грек-рим көрәше буйынса XXV республика спартакиадаһы финалында тап иттек.**

Ағалы-ҡустылы бер туғандарҙыр тип уйлағайныҡ, икеһе ике райондан булып сыҡты. Ҡыҙыл костюмдағыһы - Айбулат Мөхәтдинов Әбйәлил районы Дәүләт ауылынан булһа, күк кейемдәге - Йәнгир Иҙрисов көс һынашырға Бөрйән районы Әтек ауылынан килгән булып сыҡты. Ут кеүек теремек бер тиҫтер малайҙар үҙ ауырлыҡ категорияларында икеһе лә икенсе урын яуланы. Әйткәндәй, статистика буйынса ерҙәге халыҡтың ни бары 2 процентын ғына ерән сәсләләр тәшкил итә һәм улар ҡыйыу, түҙемле, эшһөйәр һәм көрәшсе сифаттарына эйә кешеләр. Ҡояш та уларҙы яратып матур һипкелдәр менән бүләкләй икән. Дөйөм ҡылыҡһырлама был спортсы малайҙарға ла тура килә. Ә һеҙҙең араығыҙҙа ҡояш сәсле, һипкеллекәйҙәр бармы?

# ЙӨҘ ЙӘШКӘ ЕТТЕ



**Башҡортостанда Фәтхулла Әһлиулла улы Юламанов бер быуатлыҡ юбилейын билдәләне. Был хаҡта Хәйбулла районы хакимиәте башлығы Рөстәм Шәрипов хәбәр итте.**

Фәтхулла Әһлиулла улы 1923 йылдың 15 июлендә Аҡъяр ауылында күп балалы ғаиләлә тыуған. 1942 йылдың 5 мартында фронтҡа алынған. Сталинградҡа йәйәү барған, Донды аша сыҡҡан, ҡаты алыштарҙың береһендә аяғы яраланған, башына ла бомба ярсыҡы тейгән. Оҙаҡ ҡына госпиталдә дауаланған. Тыуған Аҡъярына ул 1954 йылда ғына ҡайтҡан. Ошо уҡ йылда Гәүһәр Абдулла ҡыҙы менән ғаилә ҡорған. Улар 58 йыл бергә татыу ғүмер кисергән, биш бала тәрбиәләп үҫтергән. Бөгөн ветерандың һигеҙ ейәне һәм биш бүләһе бар. Хаҡлы ялға тиклем Фәтхулла Әһлиулла улы ауыл хужалығы тармағында эшләгән. "Беҙҙең юбилярға рух ныҡлығы, оптимизм, алсаҡлыҡ һәм ауырлыҡтарға сыҙамлылыҡ хас. Ҡаты һуғыш һәм һуғыштан һуңғы йылдар уны сыныҡтырған, ғүмерен һәм һаулығын ҡәҙерләргә өйрәткән. Әйткәндәй, Фәтхулла Әһлиулла улы - Хәйбулла районының иң өлкән кешеһе", - тип яҙҙы район башлығы.

# АҒИҘЕЛ ТӨБӨНДӘ ТАБЫЛҒАН!



**Өфө ҡотҡарыусылары Ағиҙел йылғаһында тарихи артефакт тапҡан. Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, һыу төбөнән сығарылған ауыр түңәрәк таш - урта быуаттарға ҡараған тирмән.**

"Әҙләү-ҡотҡарыу отряды хеҙмәткәрҙәре тарихи табылдыҡты Башҡортостандың Милли музейына тапшырырға йыйына", - тип хәбәр иттеләр ҡаланың граждандарҙы яҡлау идараларының матбуғат хеҙмәтенән, шулай уҡ ҡотҡарыусыларҙың ваҡыты-ваҡыты менән баш ҡала музейҙарын экспонаттар менән тулыландырыуы тураһында иҫкә төшөрҙәләр. Мәҫәлән, Ағиҙел йылғаһында улар бер быуатлыҡ якорь, мамонт һәм бизон һөйәктәрен, ә Ҡариҙелдә 8 мең йыл элек йәшәгән йөнтәҫ мөгөҙмороноҡ баш һөйәген тапҡайны.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ҒӘФҮ ИТӘ БЕЛӘҺЕҢМЕ?

**"Кәмселекһеҙ кеше булмай" - бөтәбеҙгә лә билдәле әйтем. "Кешегә хаталаныу хас" - был осраҡта мосолманға ла ташлама юҡ, сөнки был хәҡиҡәтте Мөхәммәт бәйғәмбәр ғәләйһис сәләм дә дәлилләгән: "Бөтә кешеләр ҙә хаталана". Аллаһ илсеһе гонаһлы булып ҡалмаҫҡа, ә тиҙерәк тәүбә итергә ҡуша: "Һеҙҙең арала хаталаныусыларҙың иң яҡшыһы - тәүбә итеүсе". Ул тәүбә итә белеүселәргә Аллаһтың рәхмәте сикһеҙ һәм ишектәре киң асыҡ икәнлеге тураһында хәбәр итә. Яҡшы мосолман үҙенең хатаһын тиҙерәк төҙәтергә ашығасаҡ. Ҡайһы берәүҙәрҙең үҙенең хатаһын күрә белмәйенсә, башҡаларҙы тикшереүе - ысын мосолманға бөтөнләй хас түгел.**

Мосолмандың мөһим сифаттарының береһе - "төҙәтә белеү". Камиллашыу юлынан атлаған саҡта ул янылыш аҙым эшләмәҫкә, әгәр ҙә эшләһә, тиҙ арала хәлде яҡшы яҡҡа үҙгәртергә тырыша. Мосолман үҙенең гонаһтарын бер ҡасан да әһәмиәтһеҙ тип һанарға тейеш түгел, сөнки Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһис сәләм әйткән: "Мосолман үҙенең гонаһтарын өҫтөнә ишелеп төшөргә торған тау кеүек күрә. Үҙенең гонаһтарына өйрәнгән кеше уны танауы осона ултырған себен кеүек күрә". Бер һүҙ менән әйткәндә, яҡшы мосолман бөтөнләй хаталанмаған кеше түгел, ә үҙенең хаталары өсөн ғәфү үтенә һәм ғәфү үтенеү юлдарын эҙләүсе.

Кеше - ул ижтимағи-мәҙәни ысынбарлыҡ. Ул бөтә нәмәгә лә тиҙ өйрәнә, йәмғиәт тормошо менән йәшәй ала, кешеләр менән яҡшы мөнәсәбәттәр ҡора ала. Ғәфү үтенә белеү тәү ҡарамаҡҡа ябай күренһә лә - кешенең мәҙәни һәм ижтимағи тормошҡа ҡарағанлығының бер күрһәткесе ул.

Түбән ҡатламда эшләүселәр генә түгел, ә бөтәһе лә, хатта дәүләт үҙе лә ғәфү үтенергә тейеш. Беҙ йыш ҡына ҡасандыр ғәҙелһеҙ рәүештә хөкөм ителгән кешеләрҙең исемдәрен, хөрмәт күрһәтеү һәм ғәфү үтенеү маҡсатында, төрлө майҙандарға, биналарға ҡушыуҙарын күрәбеҙ.

Ғәфү үтенеү - үҙендә түбән төшөрөү түгел, киреһенсә, был ғәмәл кешене юғары күтәрә һәм үҫтерә. Был осраҡта беҙгә үҙенең гонаһһыҙлығы, хаталарҙан ҡаса белеүе, кешеләргә ҡарата әҙәплелеге, иғтибарлы булыуы менән билдәле булған Бәйғәмбәребеҙ өлгө булып тора. Бер вәғәзе ваҡытында ул халыҡ төркөмөнә ҡарап, былай тип мөрәжәғәт итә: "Әгәр ҙә мин һеҙҙең кемегеҙҙе булһа ла һуҡһам - бына минең аркам, һуғығыҙ; әгәр ҙә мин кемегеҙгә булһа ла бурыслы булһам, бына минең мөлкәтем, килеп алығыҙ". Мөхәммәт бәйғәмбәр үҙенең кемгәлер ҡарата мөмкин булған иғтибарһыҙлығы өсөн шулай әҙәпле генә ғәфү үтенгән.

Шулай булғас, ғәфү үтенә белеү нимәнән ғибәрәт һуң? Был беҙҙең тормошҡа ниндәй мәғәнә бирә? Иң беренсе сиратта, был - кешенең үҙен аңлауы. Был бөтә кешеләрҙең дә, шул иҫәптән беҙҙең дә хаталаныуыбыҙ мөмкин икәнде һөйләй.

Бүтәндәрҙән үҙендә өҫтөн күреү тойғоһон кисереү яҡшы түгел. Үҙендең уйламаған аҙымын өсөн яҡынындан ғәфү үтенеп, беҙҙә киләсәктә был хатаны ҡабатламаҫҡа тигән теләк уяна. Ғәфү үтенеү ғәзел булырға, шулай уҡ башҡаларҙың ҡәҙерен бе-

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ҮТКӘН ДӘҮЕРҘӘРҘӘ...

## башҡорт өйө

**Борон-борондан һәр халыҡтың милли кейемендә, хужалыҡ итеү ысулында ғына түгел, ә йорт ҡороу, уны йыһазландырыуҙа ла үҙенсәлектәр булған. Замандар алышыныу менән был үҙенсәлектәр әкренләп юғала бара. 19-сы, 20-се быуаттарҙа башҡорт йортона хас булған әйберҙәр бөгөнгө көндә замана йыһаздары менән алыштырыла. Элекке башҡорт йортона хас атамалар ҙа әкренләп халыҡ теленән китә.**

Борон башҡорт йорто нисек булған һуң? Тарихтан билдәле булыуынса, башҡорттар өйҙә төрлө материалдан төҙөгән. Урман яҡтарында ағастан һалһалар, ялан яғында саман кирбестән (һалам ҡушып балсыҡтан эшләнгән) ҡорғандар. Ҡайһы бер урындарҙа балсыҡ менән һыланған ситән (талдан үрелгән) өйҙәр булған.

Ағас йорттарҙың төп формаһы - дүрт диуарлы өй. Уны дүрт мөйөшлө өй йәки һыңар йорт тип атағандар. Хәллерәк кешеләр һыңар йортҡа төкәтмә яһап киңәйткән. Былдай өй ҡушйорт тип атап йөрөтөлгән. Башҡорт өйөнөң эске ҡоролошона килгәндә, ул, ғәҙәттә, икегә бүленгән. Ирҙәр яғы һәм ҡатын-ҡыҙ яғы. Ғәҙәттә, өйгә ингәс тә, уң яҡта мейес, йәки сыуал торған. Эргәһендә ҡаҙан. Сыуалдың мейестән айырмалы рәүештә ауыҙы киң булған. Уны башҡорттар өйҙә йылытыу өсөн генә түгел, ә яҡтылыҡ сараһы итеп тә ҡулланған. Йәғни оҙон ҡышҡы кистәрҙә сыуалдағы ут өйҙә яҡтыртып торған. Сыуалдың янында ҡушлатып һалынған тағы бер ҡаҙанлы усаҡ булған. Бында өй хужалары аш-һыу бешергән. Усаҡ башҡорт йортонда ҙур әһәмиәткә эйә булған. Йәшәү сығанағы булараҡ уны билгән. "Өйөгөҙ ҡотло булһын. Усаҡтарығыҙ һүнмәһен", тип йорт хужаларына изге теләк әйткәндәр. Сыуал, усаҡ, мейестең алды көлдөксә тип аталған. Көлдөксәлә ҡомған, самауыр һәм башҡа кәрәк-яраҡ ҡуйылған. Сыуал мейескә ҡарағанда өйҙә тиҙ йылытҡан, бынан тыш, уның алдында кейем-һалымды тиҙ генә киптереп булған. Шулай уҡ сыуал өйҙә һәйбәт вентиляциялаған. Сыуалға оҙон утындарҙы һөйәп ҡуйып яндырып булғандар. Ауыҙы киң булыу сәбәпле, сыуал өйҙә кирбес йылыһы менән түгел, ә ялҡын



йылыһы менән йылытҡан. Шуға күрә лә бер туҡтауһыҙ уны яғып торорға кәрәк булған.

Һуңынан инде башҡорттар сыуал менән бергә мейес ҡуллана башлаған. Мейес артына юғарыға күтәреп яһаған урын һәндерә тип аталған. Уның аҫты ҡыш көнө бәрәс, быҙау өсөн, өҫтө кәрәк-яраҡ һалыу, йоҡлау өсөн ҡулланылған.

Өйҙөң төп яғында йоҡлау һәм ашау өсөн иҙәндән ҡалҡыу итеп таҡтанан йәйеп эшләнгән оҙон урын - урындыҡ торған. Урындыҡ өҫтөнә кейеҙ, кейеҙ өҫтөнә балаҫ түшәгәндәр. Урындыҡтың бер яҡ ситендә яҫтыҡ, мендәр, юрған, түшәк, кейеҙҙәр һалынған ағастан эшләнгән урын аяғы торған. Урын кәрәк-яраҡтары түшәк таҫмаһы йәки урын бауы менән стенаға беркетелеп ҡуйылған. Өйҙөң ишеккә ҡаршы төп яғы түр тип аталған. Ҡунаҡтарҙы түргә үтегеҙ, тип өйҙөң иң ҡәҙерле урынына - урындыҡҡа ултырткандар. Урындыҡтың төп (өҫкө) яғы ла түр тип аталған, йәғни урындыҡ түре. Ислам диненән килгән ҡунаҡсыллыҡ йолаһы буйынса башҡорттар ҡунаҡты түргә ултыртыр булған.

Өйҙөң ике яҡ стенаһынан түбәнән 10-20 сантиметр түбәнерәктә ике урҙа (ағас һәйғау) торған. Унда, ғәҙәттә, кейем-һалым элер булғандар. Ҡыҙ оҙатылғанда урынына еңшәйтан килмәһен тип урҙаға тәңкә йә суҡ бәйләп ҡиткән. Урҙанан бейегерәк урында ике сөй ҡатып, шунда Ҡөрьәнде һалып ҡуйыр булғандар. Сөнки дин ҡушыуы буйынса, Ҡөрьән түбән ерҙә ятмаҫҡа тейеш.

Борон стеналар аҡланмаған, стена сигеүле таҫтамалдар менән биҙәлгән. Урҙа әйтеп үткәнемсә, башҡорт йорто ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙ яғына бүленгән. Ҡатын-ҡыҙ яғында мейес, аш-һыу әҙерләү кәрәк-ярағы булһа, ир-ат яғында ҡунаҡ ҡабул иткәндәр. Ҡатын-ҡыҙ яғында һауыт-һаба өсөн урындыҡ менән усаҡ араһына ҡуйылған тәпәшәк өҫтәл торған. Ул һике тип атала. Башҡорт йортонда һауыт-һаба йәки китап өсөн кәштә (төрлө нәмә һалыу өсөн һикәлтәләп эшләнгән буй таҡта) булған.

Ике яҡ таҡта йәки шаршау менән бүленгән булған. Ир-ат менән ҡатын-ҡыҙ яҡтары ҡунаҡ өй һәм аш өй тип тә аталған. Бында ҡунаҡҡа булған хөрмәт-ихтирам сағыла. Йәғни башҡорттарҙа өйҙөң иң ҡәҙерле өлөшөн ҡунаҡ өйө тип атау ошонан килә. Ислам ҡанундары буйынса һәр кеше ҡунаҡты өс көн һыйларға бурыслы. Ҡунаҡ өс көндән күберәк булһа, хужаға сауап яҙыла. Шуға күрә лә башҡорттар һәр килгән ҡунаҡҡа ҙур ихтирам күрһәткән.

Ҡунаҡ өйө менән аш өйгә айырым ишектәр булған. Борон ҡатын-ҡыҙҙар ирҙәр менән бер табын артында ултырмаған. Ҡунаҡ килһә, хужабикә һый әҙерләгән дә, аш өйө яғынан, шаршау артынан сыҡмаған.

Шулай итеп, башҡорт өйө борондан килгән ғөрөф-ғәҙәттәргә нигеҙләнеп ҡоролған. Ундағы һәр бер йорт йыһазының үҙ урыны, тәғәйенләнеше булған. Улар быуаттар буйына үҙгәрешһеҙ һаҡланып, бөгөнгә тиклем килеп еткән. Бөгөн улар тарихыбыҙҙың айырылғыһыҙ өлөшө булып тора.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**

лергә һәм хөрмәт итергә өйрәтә. Кемдән ғәфү үтенгәнһегеҙ, шул иғтибар һәм хөрмәт ҡаҙана. Үҙенә булған хөрмәтте күреп, ул әңгәмәсеһенә шулай уҡ яуап бирәсәк. Шулай итеп, тупаҫ ҡылыҡтарыбыҙ өсөн ғәфү үтенергә көс табып, беҙҙең һәр беребеҙ үҙенә икенсе кеүлектән ҡарай, башҡа кешеләрҙе хөрмәт итергә өйрәнә, һәм шуның менән йәмғиәт тәртибенә нигеҙ һала. Шулай уҡ, Аллаһы Тәғәләнән ғәфү үтенеү һәм тәүбә итеү - беҙҙең динебеҙҙең бер ҡағиҙәһе. Раббыһынан ғәфү үтенә белеүсе мосолман кешеләрҙән дә ғәфү үтенә белә. Беҙ, әлбиттә, кемделер төкөп китһәк, йә бысратһаҡ, аяғына баҫһаҡ ҡына ғәфү үтенеп өйрәнгәнбеҙ...

Үҙендең ғәйебенде танымау - беҙҙең дәүерҙең етди ауырыуы. Кешеләрҙе был ауырыуҙан ҡотҡарыр өсөн күп көрәшергә тура киләсәк.

Шулай итеп...

Үҙенең дини бурыстарын тулыһынса үтәмәгән иманлы кеше - Аллаһтан;

Һайлау алдынан биргән вәғәҙәләрен үтәмәүсе сәйәсмәндәр - халыҡтан;

Хөрмәт күрһәтә белмәүсе бала - ата-әсәһенән;

Мираҫты тигеҙ бүлмәүсе һәм ата-бабалар аманатын һаҡламаусы ейән - олатаһынан;

Яратмағаны һәм хөрмәт итмәгәне өсөн ире - ҡатынынан;

Ата-әсә әҙ иркәләгәне өсөн - балаларынан;

Эш хаҡын түләмәгәне өсөн директор - эшсеһенән;

Тупаҫ түрә - хеҙмәткәренән;

Әҙерлекһеҙ дәрес биргән өсөн уҡытыусы - уҡыусыһынан;

Тәкәббер студент - уҡытыусыһынан һәм үҙен шәхес итеп күрергә теләгән башҡа кешеләрҙән;

Ғауғалы пассажир - әйләнә-тирәһендәге кешеләрҙән;

Тупаҫ шофер - пассажирҙарҙан;

Ғәҙел булмаған һатыусы - һатып алыусыларынан ғәфү үтенергә тейеш.

Әйтеп киткәнебеҙсә, үҙендең хаталарыңды танымау һәм ғәфү үтенә белмәү - етди рухи ауырыу. Шулай булғас, әйҙәгеҙ, үҙебеҙҙең хаталарҙан ҡасырға тырышайыҡ. Әгәр ҙә яңылыш ҡына ғәҙелһеҙлеккә юл ҡуйһаҡ, тиҙ арала ғәфү үтенәйек.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

### Аңдың беренсе торошо: тәжрибә менән һынау

Әгәр һәр саҡ әле эшләп алынмаған аҡсағыҙҙы туҙҙыра башлаһағыҙ, аңығыҙ бурысҡа батырасаҡ, бөтөн нәмәгеҙҙе юғалтыуға килтерәсәк был шөғөлөгөҙҙө туҡтатырға саҡырыр. Һеҙҙең кире уй-фекерҙәрегеҙ тиҙ арала уңышлыһ финанс тәжрибәһе булып матдиләшә, сөнки үтенесегеҙ тап шунан ғибәрәт.

Әгәр физика ҡанунының үҙегеҙгә эшләүен теләһәгеҙ, Алла ҡөҙрәте һеҙгә был сығымдарҙы ҡаплау өсөн килемде арттырыу ысулын күрһәтеренә инанғас ҡына аҡсағыҙҙы туҙҙыра алаһығыҙ. Әлбиттә, шунда уҡ ҡиммәтле йорт һатып алыуҙан башларға түгел инде. Шуға күрә бәләкәй сығымдарҙан башлағыҙ.

Инаныуҙың практик тәжрибәнән тороуын иҫегеҙгә төшөрөп, бәләкәй генә тест үткәреп ҡарайыҡ. Мәҫәлән, һеҙ нимәлер һатып алырға теләйһегеҙ, әммә ул айлыҡ бюджетығыҙҙан күпкә артығыраҡ. Ваҡытты һуҙмағыҙ, һатып алығыҙ ҙа, артабанғы 48 сәғәт эсендә нимә булырын күҙәтегеҙ.

Тағы бер тапҡыр ҡабатлайым: беренсе иғәнәне нисек түләрегеҙ билдәле булырҙан алда, ниәт иткән нәмәне барып һатып алығыҙ. Ғәмәл һәм ғәмәлһеҙлек тигеҙлеге принцибы барлыҡ кимәлдә лә эшләгәнлектән, ғәмәлһеҙлек һеҙҙең ғәмәлегеҙ менән бер үк ваҡытта тормошҡа ашасаҡ. Һеҙ мотлаҡ ошо сығымдарығыҙҙы ҡаплар аҡса табасаҡһығыҙ. Был мөмкинлек килеп сығыу менән унан баш тартмағыҙ, "эйе" һәм "юҡ" тип үлсәмәгеҙ. Бары тик мөмкинлеккә сытырман йәбешегеҙ. Ә былдай мөмкинлек мөғжизә кеүек килеп сығасаҡ.

Эйе, быға ышаныуы ҡыйын, тап шиктәр беҙҙең аяҡ-ҡулдарҙы бәйләп тора... Әммә кредитҡа һәм ғәмәлдең ғәмәлһеҙлек тинлеге фәнни принцибы буйынса йәшәү араһында айырма бик ҙур.

Һеҙ кредитҡа йәшәгәндә, сығымдарығыҙ стресығыҙҙы арттыра ғына һәм һеҙ артабан нимә булыр тип борсола башлайһығыҙ. Һөҙөмтәлә аҡса эшләү мөмкинлеген юғалтаһығыҙ.

Ғәмәл һәм ғәмәлһеҙлек тигеҙлеге фәнни принцибы буйынса йәшәһәгеҙ, нимәләр һатып алаһығыҙ һәм шунда уҡ ғәмәлегеҙҙе тигеҙләр өсөн бирелгән мөмкинлек тә алаһығыҙ. Уның асылын аңларға, анализларға тырышмағыҙ, бары тик уның менән файҙаланығыҙ.

Ниндәйҙер предметты төшөрөп ебәрһәгеҙ, уның менән нимә булыр икән, тип уйламайһығыҙ, ә уның тартыу көсөнә ярашлы ергә төшәсәген беләһегеҙ. Мин һеҙгә һөйләгән ҡанундар ҙа эшләй һәм уларҙы анализлап ваҡыт әрәм итмәгеҙ, ә бары тик файҙаланығыҙ. Бөтә сер шунда.

Һәм шуны онотмағыҙ: минут оҙайлығы сағыштырмаса ғына. Барыһы ла бәҙрәф ишегенең ҡайһы яғында тороуығыҙға бәйле!

### Бармаҡ тәжрибәһе

Бәлки, һеҙ, аҡсаны йыйып түгел, ә туҙҙыра башлаһағыҙ, тотонғанға ҡарағанда күберәк алыу мөмкинлегенә эйә булыуығыҙға ышанмайһығыҙҙыр. Әммә һеҙҙең фекерегеҙ был осраҡта бер нәмә лә үҙгәртмәйәсәк. Минеке лә.

Фекер - ул бары тик ҡараш ҡына. Әлбиттә, әгәр файҙа килтерә икән, һеҙ уға таяна алаһығыҙ. Әммә барыбер һеҙҙең ҡарашығыҙ - ул бер яҡлы ғына ҡараш. Унан башҡа хәл-торошҡа ҡарауҙың бик күп ысулдары бар. Күпселектең билдәле бер ҡарашты яҡлауы уның абсолют хәҡиҡәткә тура килеүен аңлатмай әле.

Уң ҡулығыҙҙы баш өҫтөнә күтәрегеҙ ҙә, һуҡ бармағығыҙҙы өҫкә йүнәлтеп, һауала сәғәт йөрөшө буйынса түңәрәк эшләгеҙ. Бармағығыҙҙың сәғәт йөрөшө буйынса хәрәкәт иткәненә ышанаһығыҙмы? Хәҙер хәрәкәтегеҙҙе туҡтатмайынса, бармағығыҙҙы күкрәк тәңгәленә төшөрөгөҙ. Бармағығыҙ һаман да сәғәт йөрөшө буйынса хәрәкәт итәме? Иҫ китмәле, әммә ул кире яҡҡа хәрәкәт итә. Нисек инде, бармағығыҙҙың хәрәкәтен бер туҡтатманығыҙ, ә уның хәрәкәте үҙгәрҙе... Барыһы ла ябай: һеҙ ҡарашығыҙҙы үҙгәрттегеҙ! Тәүҙә һеҙ уға - аҫтан, һуңынан күкрәк тәңгәленән ҡаранығыҙ.

**Пьер МОРАСИ.**



**24 ИЮЛЯ**
**ПОНЕДЕЛЬНИК**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 0.10, 0.50, 1.30, 2.10, 2.45, 3.05, 3.25, 4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.50, 14.15, 18.10, 22.45 Информационный канал. [16+]
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Миссия "Аметист". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Грозный". [16+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Счастье не за горами". [16+]
23.30, 0.15 Т/с "Тихий Дон". [12+]
1.05, 1.55 Т/с "Рая знает все!" [12+]
2.50, 3.35 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.27 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 "Байык-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
11.00 Новости недели (на рус.яз). [12+]
11.45, 14.45, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]
12.00 Спортивная история. [12+]
12.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
12.45, 4.15 Счастливый час. [12+]
13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
13.45 Бәхетнамә. [12+]
15.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
15.30 Гора новостей. [6+]
15.45 Преград. Net. [6+]
16.00 Атлас Баженова. [12+]
16.45 Специальный репортаж. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.30 Т/с "Назад в СССР". [16+]
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Сәнгелдәк. [0+]
20.30 Бай. [12+]
21.00 Пофутболим? [12+]
22.00 Тайм-аут. [12+]
23.00 Д/ф "Донбасс. Аэропорт". [16+]
0.00 Х/ф "Девять дней и одно утро". [16+]
1.30 Новости (на баш. яз). [12+]
2.00 Спектакль "Дочь степей". [12+]
5.00 Следопыт. [12+]
5.30 Вечерний телецентр. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [12+]

**25 ИЮЛЯ**
**ВТОРНИК**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 18.10, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Миссия "Аметист". [16+]
0.10, 0.50, 1.30, 2.10, 2.45, 3.05, 3.25, 4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Грозный". [16+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Счастье не за горами". [16+]
23.30, 0.15 Т/с "Тихий Дон". [12+]
1.05, 1.55 Т/с "Рая знает все!" [12+]
2.50, 3.35 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.26 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 "Ете егет". [12+]
10.45, 23.45, 4.45 "Курай даны". [12+]
11.00, 17.00 Автограф. [12+]
11.30, 12.30, 16.30, 21.30, 22.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 14.45, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]
12.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
12.45 Счастливый час. [12+]
13.30, 14.30, 18.30 Новости (на баш. яз).
13.45 Бәхетнамә. [12+]
15.00 Детей много не бывает. [6+]
15.30 Гора новостей. [6+]
15.45 "Кош юлы. Балалар". [6+]
16.00 "Дорога к храму". [6+]
16.45 Криминальный спектр. [16+]
17.30 Т/с "Назад в СССР". [16+]
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Сәнгелдәк. [0+]
20.30 Елкән. [6+]
21.00 Полезные новости. [12+]
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Башкирские каникулы. [12+]
0.00 Х/ф "Элизабеттаун". [12+]
1.30 Новости (на баш. яз). [12+]
2.00 Спектакль "Ильгизар+Вера". [12+]
5.00 "Автограф". [12+]
5.30 Вечерний телецентр. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [12+]

**26 ИЮЛЯ**
**СРЕДА**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 18.10, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Миссия "Аметист". [16+]
0.10, 0.50, 1.30, 2.10, 2.45, 3.05, 3.25, 4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Грозный". [16+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Счастье не за горами". [16+]
23.30, 0.15 Т/с "Тихий Дон". [12+]
1.05, 1.55 Т/с "Рая знает все!" [12+]
2.50, 3.35 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.25 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 Әлләсе... [6+]
10.45, 23.45 "Курай даны". [12+]
11.00 "Дорога к храму". [6+]
11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 14.45, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]
12.00 Дознание. [12+]
12.15 Пофутболим? [12+]
12.30 Новости спорта (на рус. яз).
12.45, 4.15 Счастливый час. [12+]
13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
13.45, 3.30 Бәхетнамә. [12+]
15.00 МузКәрәз. [6+]
15.30 Гора новостей. [6+]
15.45 "КультУра". [6+]
16.00, 5.00 Тайм-аут. [12+]
16.45 История одного села. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.30 Т/с "Назад в СССР". [16+]
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Сәнгелдәк. [0+]
20.30 Тормош. [12+]
21.00 Полезные новости. [12+]
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 Автограф. [12+]
0.00 Х/ф "Как выйти замуж за 3 дня". [16+]
1.30 Спектакль "Любишь - не любишь?". [12+]
5.30 Вечерний телецентр. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [12+]

**27 ИЮЛЯ**
**ЧЕТВЕРГ**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 18.10, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Миссия "Аметист". [16+]
0.10, 0.50, 1.30, 2.10, 2.45, 3.05, 3.25, 4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Грозный". [16+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Счастье не за горами". [16+]
23.30, 0.15 Т/с "Тихий Дон". [12+]
1.05, 1.55 Т/с "Рая знает все!" [12+]
2.50, 3.35 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.30 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 Башкирские каникулы. [12+]
10.45, 16.15 История одного села. [12+]
11.00 "Атайсал. Знай наших!" [6+]
11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 14.45, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]
12.00 Историческая среда. [12+]
12.45 Счастливый час. [12+]
13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
13.45 Бәхетнамә. [12+]
15.00 Сулпылар. [0+]
15.30 Гора новостей. [6+]
15.45 Этно-краса. [6+]
16.00 Патриот РФ. [12+]
16.45 Криминальный спектр. [16+]
17.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
17.30 Т/с "Назад в СССР". [16+]
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Сәнгелдәк. [0+]
20.30 Башкорттар. [6+]
21.00 Полезные новости. [12+]
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Колесо времени. [12+]
0.00 Х/ф "Амнезия". [16+]
1.45 Новости (на баш. яз). [12+]
2.15 Спектакль "Одолжи мне жеребца". [12+]
4.30 "Бай". [12+]
5.00 Вечерний телецентр. [12+]
6.00 "Это моя профессия". [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [12+]

**28 ИЮЛЯ**
**ПЯТНИЦА**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 19.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
17.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости.
18.30 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Премьера. Музыкальный фестиваль "Белые ночи Санкт-Петербурга". "Все хиты "Русского радио". [12+]
23.50 Х/ф "Жемчужина Нила". [16+]
1.45, 2.20, 2.55, 3.30, 4.05, 4.40, 5.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.40, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
15.05 Д/ф "Виндзорское досье". [16+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 Удивительные люди. Лучшее. [12+]
23.55 Х/ф "Сердечных дел мастера". [12+]
1.45 Х/ф "Я всё преодолею". [12+]
4.56 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00, 18.00 "Йома". [6+]
10.30 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]
11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 14.45, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]
12.00, 16.45, 19.45, 5.15 История одного села. [12+]
12.15 Дознание. [12+]
12.45 Пофутболим? [12+]
13.00, 4.45 Автограф. [12+]
13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
13.45 Үткән гүмер. [12+]
14.15 "Курай даны". [12+]
15.00 Лит-ра. [6+]
15.30 Физ-ра. [6+]
15.45 Патриот РФ. [12+]
16.00 "Аль-Фатиха". [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.30 Дикая ягода. [12+]
19.00 Честно говоря. [12+]
20.00 Сәнгелдәк. [0+]
20.30 "Башкорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]
22.00, 6.00 Спортивная история. [12+]
23.00 "Байык-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
0.00 Х/ф "Не свадебное путешествие". [12+]
1.45 Новости (на баш. яз). [12+]
2.15 Спектакль "В ночь лунного затмения". [12+]
4.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
5.30 Тормош. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [12+]

**29 ИЮЛЯ**
**СУББОТА**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.20 "Поехали!" [12+]
11.15 Д/ф "Самое время". К юбилею Ирины Винер. [16+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 Д/ф "Дуремар и красавицы". К 100-летию Владимира Басова. [12+]
13.30 Х/ф "По семейным обстоятельствам". [12+]
16.05 Д/ф "Уйду я в это лето..." Памяти Владимира Высоцкого. [16+]
17.00 Д/ф "Высоцкий. Последний год". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Поём на кухне всей страной". [12+]
19.55 Премьера. "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
23.20 Х/ф "Пряности и страсти". [12+]
1.35, 2.10, 2.45, 3.25, 4.00, 4.35, 5.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

**РОССИЯ 1**

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.40 Т/с "Баренцево море". [16+]
17.50 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Любовь без памяти". [12+]
0.50 Х/ф "В час беды". [12+]
4.10 Х/ф "Вальс-Бостон". [12+]
5.49 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Доброе утро!" [12+]
7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).
7.45 "Ете егет". [12+]
8.30 Башкирские каникулы. [12+]
9.15 М/ф "Мультфильмы". [0+]
9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]
10.00 Елкән. [6+]
10.30 "Байтус". [6+]
10.45 "Семәр". [6+]
11.00 Лит-ра. [6+]
11.30 МузКәрәз. [0+]
12.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]
12.30 Новости (на баш. яз). [12+]
13.00 Үткән гүмер. [12+]
13.30 Башкорттар. [6+]
14.00 Дарю песню. [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
17.00 Спектакль "Верность". [16+]
19.00 Интервью. [12+]
19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
20.00 Сәнгелдәк. [0+]
20.15 Полезные новости. [12+]
20.30 "Байык-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
22.30 Новости недели (на баш. яз).
23.15 "Башкорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]
0.00 Х/ф "Затишье". [16+]
2.45 Новости недели (на баш. яз). [12+]
3.30 Спектакль "Гайфи агай, женись давай!" [12+]
5.00 "Млечный путь". [12+]
6.00 Мистический Башкортостан. [12+]

**30 ИЮЛЯ**
**ВОСКРЕСЕНЬЕ**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

6.00 Новости.
6.10 Д/ф "Цари океанов. Путь в Арктику". [12+]
7.00, 12.10 "День Военно-морского флота РФ". Праздничный канал.
10.00, 14.20 Т/с "Черные бушлаты". [16+]
12.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
13.00 Торжественный парад ко Дню Военно-морского флота РФ.
16.15 Д/ф "Цари океанов". [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 Премьера. Музыкальный фестиваль "Белые ночи Санкт-Петербурга". День патриотической песни. [12+]
21.00 "Время".
22.35 Х/ф "72 метра". [12+]
0.50, 1.25, 2.00, 2.35, 3.10, 3.45, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

**РОССИЯ 1**

6.10, 1.50 Х/ф "Шесть соток счастья". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Утренняя почта с Николаем Басковым.
9.10 Сто к одному.
10.00, 14.45 Т/с "Баренцево море". [16+]
12.00, 14.00, 17.30, 20.00 Вести.
13.00 Торжественный парад ко Дню Военно-морского флота РФ.
16.00 Х/ф "Нахимовцы". [12+]
17.50 Песни от всей души. [12+]
22.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Д/ф "Адмирал Кузнецов. Флотоводец Победы". [12+]
3.35 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Доброе утро!" [12+]
7.30 Новости (на баш. яз).
7.45 "Йома". [6+]
8.15 Тормош. [12+]
8.45 "Курай даны". [12+]
9.00 "Бай". [12+]
9.30 Новости (на рус. яз). [12+]
10.00 "Книга сказок". [0+]
10.15 "Городок АЮЯ". [0+]
10.30 М/с "Нурбостан". [6+]
10.45 "Сулпылар". [0+]
11.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
11.15, 18.30 "Атайсал. Знай наших!" [6+]
11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]
13.15 "Алтын тирмә". [6+]
14.00 "Внеклассный урок". [12+]
15.00 "Дорога к храму". [0+]
15.30, 4.15 Историческая среда. [12+]
16.00 "Честно говоря". [12+]
16.45 Концерт Залии Ганиатуллиной "Дочь степей". [12+]
19.00, 3.30 Әлләсе... [6+]
19.45 Патриот РФ. [12+]
20.00 Полезные новости. [12+]
20.15, 3.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]
20.45 Интервью. [12+]
21.00, 6.45 Специальный репортаж. [12+]
21.15 Дознание. [16+]
21.30 Новости недели (на рус.яз.).
22.15, 2.30 Республика LIVE #дома. [12+]
22.45 Х/ф "В поисках счастья". [16+]
0.30 Спектакль "Великий обольститель". [12+]
4.45 "Млечный путь". [12+]
6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ИЮЛЬ ЮБИЛЯРҘАРЫ

1



Ишембай районынан ғалим-математик

2



Учалы районынан табип-токсиколог

М. Мортазин ауылы

Оло ата дөйә

Әсе ҡамырҙан йәймә

Ғ. Ибраһимов романы

1

Бөркөтөң кесле балаһы

Теше ҡырҡ - тешләмәй

Тоткон ҡыҙ

Һыу тереклеге

Шыршы биҙәге

2

Ҡатырға һауыт

Нота

Немец композиторы

Киптерелгән емеш-еләк

Ауылда был әҙ, ҡалала күп

"Башта (...) тап, унан ғилем"

Тургеневтың телһеҙ геройы

Хәрби звание

Яһаҡ түләмәгән башҡорт

Тәнәфес араһында

Батша ҡушыуы

Үсемлектең "башланғысы"

Бер тарих өҙөге ингән ваҡыт

Норвегияның баш ҡалаһы

"Ҡайҙа ҡоймаҡ - шунда (...)"

Башҡортстандағы йылға

Бөлөкәй генә бер бала, йүгерә-йүгерә йөк ала

Боронғо рус теләндә миллион

"Бөрәнсе һынауҫы летчик"

Аҫтыртын әйтелгән ҡаршы һүҙ

Көнсығыштағы баш ҡала

Унан ҡаҙан аҫтырмайҙар

4

Йомшаҡ мебель

⌘

Вигвамдағы хужабикә

3



Стәрлетамаҡ ҡалаһынан атҡаҙанған рәссам

Гел ауырыған

3

29 көнлөк февралле йыл

Иректәге малды тотҡос

4



Әбйәлил районынан ауыл хужалығы фәндәре докторы

"(...) сыҡҡанда һыу булмай"

Механизмдың әйләнмәле үҙәге

"Мәленә күрә (...)е"

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**27-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Бурыл. Урындыҡ. Аҡсарлаҡ. Ҡалҡан. Тамыр. Марш. Сабата. Кама. Ыумас. Каса. Кир. Рагу. Саптар. Бүртә. Нужа. Туры. Дебют. Тәре. Мари.

**Вертикаль буйынса:** Тимергүк. Алмасыбар. Розмарин. Урҙа. Умарта. Рәми. Утын. Уба. Елем. Ҡашҡа. Ромб. Ыҙа. Юмор. Ҡурсаҡ. Сәғәт. Капот. Ҡола. Ноғала.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

## ХАЖИЕВ ПРЕМИЯҺЫ...

**Башҡортостан Республикаһының Журналистар союзы журналист Ризуан Хажиев исемендәге йәмәғәт премияһын булдырҙы.**

Конкурс республика, район, ҡала, берләштерелгән матбуғат киң мәғлүмәт сараларында эшләгән журналист өсөн публицистика буйынса берҙән-бер премияны көҙ уңыңда тота. Материалдарҙа замандаштарыбыҙҙың образдары, милли мәҙәниәттәр байлығы һәм халыҡтар дуҫлығы, йәмғиәттәге тыныслыҡ һәм татыулыҡ, республиканың социаль-иҡтисади үҫеше мәсьәләләре сағылырға тейеш. Бер автор өс кенә эш тәҡдим итергә мөмкин. Ризуан Хажиев исемендәге премия ике йылға бер тапҡыр тапшырыла. Әҫәрҙәр Журналистар союзы ҡарамағындағы Ризуан Хажиев исемендәге премияны тапшырыу буйынса комиссияға (Матбуғат йорто, 111-се бүлмә) 2023 йылдың 14 июленән 2024 йылдың 25 майына тиклем ҡабул ителә (бәйләнеш өсөн телефон: 8-917-368-32-84, Журналистар союзының яуаплы секретары Мәүлиҙә Яҡупова). Премияға лайыҡ булған журналисҡа "Ризуан Хажиев исемендәге премия лауреаты" исеме, диплом һәм 50 мең һум аҡса тапшырыла. Журналист-публицист конкурсы еңеүсеһенең исеме киләһе йылдың 14 июнендә - Матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәрҙәре көнөндә иғлан ителә.

## ШАЙМОРАТОВ ТУРАҺЫНДА

**Зәйнәб Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә йәнә тарихсы Фәрит Вәхитовтың "Генерал Шайморатовтың триумфы һәм фажиғәһе" исемле китабы баҫылып сыҡты. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, китаптың тәүге баҫмаһы 2019 йылда легендар комдивтың тыуыуына 120 йыл тулыуға бағышланғайны.**

Баҫмала 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры, генерал-майор Миңлеғәлә Шайморатовтың тормошо һәм хәрби эшмәкәрлеге һүрәтләнә, тип хәбәр иттеләр нәшриәттең матбуғат хеҙмәтенән. Фәрит Вәхитов - билдәле журналист, тарихсы, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың Журналистар союзы ағзаһы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Ш.Хоҙайбирҙин исемендәге республика премияһы лауреаты. Бөйөк Ватан һуғышы темаһын ентекле өйрәнгән. Автор Шайморатов тураһында китапты 30 йылдан ашыу яҙған, 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы һуғышҡан урындарҙа булған. Китапта легендар геройҙың әҙәби образын тыуҙырырға ынтылған. "2002 йылда, республиканың Хәрби Дан музейында ғилми хеҙмәткәр булып эшләгәндә, Башҡорт кавалерия дивизияһының ветерандар советы архивына тап булдым. Бер нисә документты өйрәнгәс, мин Подольскиға, Рәсәй Оборона министрлығының үҙәк архивына барҙым. Унда 10 көн булдым, бер йылдан һуң тағы 10 көн, бик күп һорауҙарыма яуап эҙләнем", - ти автор. Баҫма киң ҡатлам уҡыусыларға, шулай уҡ урта һәм өлкән йәштәге мәктәп уҡыусыларына тәғәйенләнгән.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1445 һижри йыл.*

| Июль (Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 24 (6) дүшәмбе | 3:43 | 5:13 | 13:30 | 18:41 | 21:30 | 23:00 |
| 25 (7) шишәмбе | 3:45 | 5:15 | 13:30 | 18:40 | 21:28 | 22:58 |
| 26 (8) шаршамбы | 3:47 | 5:17 | 13:30 | 18:38 | 21:26 | 22:56 |
| 27 (9) кесе йома | 3:48 | 5:18 | 13:30 | 18:37 | 21:25 | 22:55 |
| 28 (10) йома | 3:50 | 5:20 | 13:30 | 18:36 | 21:23 | 22:53 |
| 29 (11) шәмбе | 3:52 | 5:22 | 13:30 | 18:34 | 21:21 | 22:51 |
| 30 (12) йәкшәмбе | 3:53 | 5:23 | 13:30 | 18:32 | 21:19 | 22:49 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАҠСА

## БИЛ БӨККӘНДЕ...

**Баҡсағыҙ ишелеп уңһын тиһәгеҙ, ошо кәңәштәргә ҡолаҡ һалығыҙ, әүкәйҙәр:**

- барлыҡ йәшелсәләргә лә һыу һипкәндә нишатыр спирты ҡушығыҙ (10 литр һыуға 2 ҡалаҡ);
- 100 грамм әсеткене 10 литр һыуҙа иретеп һипһәң, йәшелсәләр гөрләп үҫә;
- сөгөлдәр баллы булһын өсөн, һирәкләгәс, аш тоҙо иретмәһе һибергә (10 литр һыуға бер стакан). Был кишер, һуған, һарымһаҡ өсөн дә бик файҙалы;
- помидорҙарҙы фитофтороздан һаҡлар өсөн һөт йәки эркет һыуына (сыворотка) бер тамсы йод тамыҙып һибергә кәрәк;
- помидор һәм ҡыярҙарға вегетация осоронда 10 литр һыуға 20 тамсы йод ҡушып яһалған шыйыҡсаны бер нисә тапҡыр һипһәң, бөрөләре күбәйә һәм ауырыуҙарға ҡаршы тороусанлығы арта;
- һуған көпшәләнмәһен өсөн ултыртыр алдынан сәй содаһы иретмәһенә һалып торорға кәрәк (бер литр һыуға бер балғалаҡ сода);
- еләктәргә сәскә атыр алдынан йод иретмәһе һибегеҙ. 10 литр һыуға - 10 тамсы;
- йод иретмәһен шулай уҡ кәбеҫтә лә бик ярата. Сәкән яһала башлағанда һибеү яҡшыраҡ. 10 литр һыуға - 40 тамсы.

**Һәм, әлбиттә, ер бил бөккәнде ярата!**

**Сәйҙә СӘЙӘХОВА.**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# ДОНЪЯНЫ ЯУЛАЙ




**Ошо көндәрҙә Барнаул ҡалаһында уҙған Шукшин фестивалендә "Шагир көндәлеге" фильмы күрһәтелде. Унда "Алтын тәлинкә" төбәк-ара премияһында иң күп тамашасы тауышын йыйып, еңеү яулаған фильмдың режиссеры, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Булат Йосопов үҙе ҡатнашты.**

Булат Йосопов социаль селтәрҙәрҙәге шәхси битендә был фильмдың бер аҙна эсендә лайыҡ булған уңыштарын һанап үткән. "Беҙҙең фильм Бөйөк Британиялағы киң билдәле Lift-Off Global Network фестивалендә ҡатнашыу хоҡуғы алды! Командабыҙ өсөн был оло ихтирам. Шулай уҡ фильм Италияла Ischia Global Film Festival сараһында күрһәтелде. Рәми Ғарипов тарихы донъя буйлап сәйәхәт итә. Ҡырымда үтәсәк Vote to Film фестиваленә лә саҡырыу алдыҡ, урындағы халыҡты проектыбыҙ менән таныштырыуҙы түҙемһеҙлек менән көтәбеҙ. Фильмыбыҙ "Алтын тәлинкә" төбәк-ара премияһының тамашасылар һөйөүен яуланы. Беҙҙе күтәрмәләп, эшебеҙгә тауыш биргән барыһына ла рәхмәтебеҙҙе еткерәбеҙ!" - тип яҙҙы Булат Тимербай улы.

Быға тиклем фильм "Үҙ юлым" фестивалендә еңгән, "Донъя мәнфәғәтенә" премияһын һәм Рәсәй-Италия йәмғиәтенең халыҡ дипломатияһы Рәхмәт хатын алған, Мәскәү халыҡ-ара, Байкал аръяғы, Чебоксар кинофестивалдәрендә, Псковта үткән "Көнбайыш ҡапҡалар" кинофестивалендә ҡатнашҡан, шулай уҡ Рәсәй гәзитенең федераль экспертҭары тарафынан юғары баһаланған. Фильм Мәскәү, Санкт-Петербург, Ҡазан, Тула, Кострома, Нерехт, Ярославль, Һарытау ҡалаларында күрһәтелгән. Башҡортостан халҡы уны 50 кинозалда ҡарай алды. Башҡортостандың халыҡ фильмы илебеҙҙең һәм донъяның төрлө төбәктәрендә тамашасыларына табан үҙ юлын дауам итә.

# ХӘТЕРҘӘЛӘР ӘЛЕ БЫЛ ЙЫРҘАР

**Ишембай районында уҙғарыласаҡ "Ретро-шлягер" йырсыларҙың II асыҡ конкурсында ҡатнашырға теләүселәрҙән ғаризалар ҡабул ителә башланы. Конкурс Ватан йыр мәҙәниәтен һаҡлау һәм традицияларын үҫтереү, йәш быуын йырсыларын Рәсәй эстрадаһының иң яҡшы үрнәктәрендә тәрбиәләү, ҡатнашыусыларҙың оҫталығын арттырыу маҡсатында ойошторола.**

Шулай уҡ "Ретро-шлягер" үҙешмәкәр йырсыларҙы һәм ижади коллективтарҙы асыҡлау һәм уларға ярҙам итеүҙе лә күҙ уңында тота. Ул конкурста үҙешмәкәр һәм профессиональ башҡарыусылар яңғыҙ йәки бәләкәй коллектив менән ҡатнаша ала. Улар йәш категорияһында: 16-нан 35 йәшкәсә, 36-нан олораҡтар араһында ярышасаҡ. Ҡатнашыу өсөн берәҙ дәртле, береһе лирик ике йыр әҙерләргә кәрәк, улар ниндәй телдә булһа ла ярай. Репертуар 90-сы йылдарҙан да һуң яҙылмаған XX быуат эстрадаһының популяр автор йырҙарынан торорға тейеш. Конкурстың икенсе туры 26 августа Ишембай ҡалаһы Мәҙәниәт һарайында уҙғарыласаҡ. Шунда уҡ еңеүселәр ҙә билдәләнәсәк һәм Гран-при эйәһенә бүләккә автомобиль вәғәҙә ителә. Ғаризаларҙы retro.shlyager2023@mail.ru электрон почтаһына йәки Ишембай ҡалаһы, Ленин урамы, 23 адресына юлларға мөмкин. Белешмәләр өсөн телефон: 8-917-740-03-48, 8-927-966-21-99, 8-986-70-22-947.

# ҺӘЛӘҮЕК МОҢДАРЫ

**Шулай уҡ Ишембай районында Башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусыларҙың "Һәләүек моңдары" асыҡ район конкурсы үткәрелә.**

БАССР-ҙың халыҡ һәм атҡаҙанған артисы Мәүлитбай Ғәйнетдинов иҫтәлегенә бағышлап ойошторола асыҡ район конкурсы уның ижадын пропагандалау һәм хәтерен мәңгеләштереү, яңы таланттар асыу, халыҡ йырҙарын башҡарыу традицияларын һаҡлау һәм үҫтереү, йәш йырсыларҙың һөнәри оҫталыҡтарын арттырыуға ярҙам күрһәтеү кеүек маҡсаттарҙы үҙ эсенә ала. Сара быйыл 18 августа Ишембай районы Эткол ауылында уҙғарыласаҡ. Унда ҡатнашыусыларҙы тыңлау, башҡорт музыкаһы өлкәһендә оҫталыҡ дәрестәре, конкурс йомғаҡтары буйынса түңәрәк өҫтәл, Гала-концерт ойоштороу ҡаралған. "Һәләүек моңдары"нда башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарған үҙешмәкәр йырсылар ҡатнашыуға саҡырыла, улар йәш буйынса өс төркөмгә бүленеп ярышасаҡ: 7-нән 13 йәшкә, 14-тән 22 йәшкә, 22 йәштән өлкәндәр. Конкурсанттар ике йыр - М. Ғәйнетдинов репертуарынан һәм профессиональ башҡорт композиторҙары, йәки үҙешмәкәр композиторҙар, автор йырын башҡарырға тейеш. Конкурсты Ишембай районы хакимиәте һәм райондың Мәҙәниәт бүлеге ойоштора. Ғаризаларҙы 2023 йылдың 15 августына тиклем ishimbaikultura@mail.ru электрон адресына йүнәлтергә кәрәк. Барлыҡ һорауҙар менән 8 (34794) 6-48-52 телефон һандарына шылтыратырға мөмкин.

# ҠОМАРТҠЫ

**Әбйәлил районы Байым ауылында "Комартҡы" Урал аръяғы башҡорттарының этник мәҙәниәте республика йәштәр форумы уҙғарылды. Ул шәжәрәне популярлаштырыу һәм һаҡлау, ғаилә институтын әхлаҡи көсәйтеү, ғаиләләге йола, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, халыҡтың ауыҙ-тел ижадын, йола уйындарын, биҙәү-ғәмәли сәнғәт һәм кәсептәрҙе һаҡлау, тергеҙеүгә йүнәлтелгән.**

Сара сиктәрендә ғаилә династиялары араһында "Быуын сылбыры", юмор оҫталарының "Лаҡап тирмәһе", башҡорт милли ризығын оҫта бешереүселәрҙең "Йыуаса" конкурсы ойошторолдо. "Быуын сылбыры"ның йомғаҡлау өлөшөндә Әбйәлил, Бөрйән, Белорет райондары һәм Мәскәү, Силәбе өлкәләренең төрлө ауыл-ҡалаларынан 12 ғаилә сығыш яһаны. Улар үҙҙәренең шәжәрәһе, ата-бабалары тураһында һөйләп кенә ҡалманы, ижади һәләттәрен дә күрһәтте. Гран-призды Мәскәү өлкәһе Котельники ҡалаһынан Сулпан Латипова яуланы. Мәрәкә һүҙ оҫталарының "Лаҡап тирмәһе"ндә 28 кеше ҡатнашты. Баһалама ағзалары уларҙы оҫта һөйләүе, әртислеге, сығышының көнүҙәк темаға арналыуына ҡарап баһаланы һәм Гран-приға Әбйәлил районы Ташбулат ауылынан Һылыу Нәзерш ина лайыҡ тип табылды. Форумдың иң тәмле конкурсы "Йыуаса" булды. Унда ҡатнашыусы ашһыу оҫталары өҫтәлдәр тултырып милли ризыҡтар, үлән сәйҙәре әҙерләгәйне һәм ҡунаҡтарҙы йыр-бейеүҙәр менән ҡаршы алып торҙо. Бөтәһенең дә йыуасаһы телде йоторлоҡ булды, шулай ҙа Әбйәлил районы Ҡушый ауылынан Фәнүзә Дәүләтованыҡына еткәне булманы.

Сара сиктәрендә "Урал аръяғы башҡорттары" ғилми-ғәмәли конференцияһы ла ойошторолдо һәм унда ҡатнашыусылар башҡорт халыҡ дауаһы, эпик әҫәрҙәрҙең йәштәр тәрбиәһендәге әһәмиәте, халыҡ ижады ярҙамында илһөйәрлек тәрбиәләү, халыҡ уйындары, махсус хәрби операция яугирҙары һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам күрһәтеү мәсьәләләрен күтәрҙе. Күптәрҙе халыҡ ижады жанрҙары буйынса оҫталыҡ дәрестәре ҡыҙыҡһындырҙы. Мәрәкә һүҙ һөйләргә өйрәнергә теләүселәргә Республика халыҡ ижады үҙәге "Атайсал" мәҙәни үҙәгенең художество етәксеһе Зилә Лира һәм Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, педагог, сәсәниә Асия Ғәйнуллина оҫталыҡ дәресе уҙғарҙы. Шулай уҡ ғаиләгә һаҡланған боронғо әйберҙәрҙән "Комартҡы" күргәҙмәһе ойошторолдо. Әйткәндәй, саранан йәштәр ҙә ситтә ҡалманы: улар өсөн "Таяҡ тартыш" һәм башҡа төрлө халыҡ уйындары ҡаралғайны. "Комартҡы" форумы Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, Әбйәлил районы хакимиәте тарафынан ойошторолдо.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БАЙ ТУҒАНДАН...

## болот яҡын

Яҡшы һүҙ ике аяҡлы, яман һүҙ дүрт аяҡлы.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Кеше йәне бөтәһенә лә һәләтле, сөнки унда үткәндәр ҙә, киләсәк тә - барыһы ла тупланған.

**(Джозеф Конрад).**

Мәхрүм булғандар үсләшмәһен, нәфрәтләнгәндәр яратырға өйрәнһен, ҡыуылыусылар түҙһен, әрләнгәндәр өндәшмәһен - шулай итеп гонаһты үлтереһен.

**(Владимир Мономах).**

Тормоштағы иң ҙур бәхет - ниндәй булыуыбыҙға ҡарамаҫтан, беҙҙе яратыуҙарына ышаныу.

**(Виктор Гюго).**

Балалар - ярлының байлығы.

**(Инглиз мәҡәле).**

Ут менән һоҡланғанда, күккә ҡарап торғанда үткәндәр рухы уларҙа икәнен онотмағыҙ.

**(Нанакауатцин).**

Кем ҡурҡыуҙа йәшәй, ул ҡурҡыуҙа үләсәк тә.

**(Леонардо да Винчи).**

Әхлаҡлылыҡ һинең холҡоңда булырға тейеш.

**(Иммануил Кант).**

Насар закондар - тиранлыҡтың иң насар төрө.

**(Эдмунд Берк).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер байҙың көтөлмәгән ниндәйҙер ҡылыҡ ҡылыу, башҡаларҙы шаяртыу ғәҙәте булған. Быны ул бер саҡ үҙенең батрағы янына килгән дә, уның эшләпәһен сисеп, башынан һыйпаған. Ә батраҡ аптырап ҡарап торған да, хужаһына телен сығарып күрһәткән.**

**- Эй, батраҡ, һин мине аңламаның, - тигән бай уға. - Мин һинән:"Нимәгә һинең башың ауырта?" - тип һорарға иткәйнем, ә һин дөрөҫ яуапламаның...**

**- Эй, бай, бушты бушҡа ауҙарып йөрөйһөң инде шунда... - тип ысҡынdырған шунда батраҡ.**

**- Һин шулай телләшә беләһеңме ни әле? - тип асыуланып ҡамсыһы менән һелтәнгән бай. Батраҡ байҙың ҡамсылы ҡулынан тотоп алған һәм:**

**- Быңа хәҙер аңланым, бай ағай, баш оҙон теллелектән ауырта икән... - тигән.**

**Байға батраҡтың яуабы оҡшаған, ул уны аҡыллы яуабы өсөн маҡтаған һәм мул ғына итеп бүләкләгән..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башҡортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
21 июль 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы — **ПР905**
Тиражы - 3267
Заказ - 972

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.